ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

24-30 октябрь (карасай) 2025

№42 (1186)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Мостай рухы беҙҙә!



3

Өфөлә беренсеһе булды...



6

Скрипканың атаһы - ҡыл-ҡумыҙ, уны иң тәүҙә ата-бабаларым тыуҙырған



8-9

Яҙмышмы? Яңылышмы?



12-13

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

*Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ!* ***Баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл етте: 2026 йылдың 1-се яртыһына гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы бара. ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә ярты йылға яҙылыу хаҡы - 1054 һум 50 тин. Күп һорауҙарығыҙға яуап бирер, рухландырыр, сәмләндерер һүҙ әйтер матур йөкмәткеле "Киске Өфө"гә яҙылырға ашығығыҙ - үкенмәҫһегеҙ.***

***Мөхәрририәт.***

*АФАРИН!*

## ВАДИМДЫҢ ТАҒЫ БЕР ЕҢЕҮЕ

**Өфө дәүләт нефть техник университеты студенты Вадим Харисов Төркмәнстанда Химия буйынса халыҡ-ара олимпиадала еңеүсе булды. Ул барлыҡ ҡатнашыусылар араһында иң юғары балл йыйып, алтын миҙал яуланы, тип хәбәр иттеләр университеттың матбуғат хеҙмәтенән.**



Рәсәй студенттары бөтәһе 25 миҙал алды, шуларҙың 13-ө - алтын. Беҙҙең илдән М.В. Ломоносов исемендәге Мәскәү дәүләт университеты, Рәсәй халыҡтар дуҫлығы университеты, Ҡаҙан (Волга буйы) федераль университеты, Новосибирск дәүләт университеты, МФТИ, Өфө дәүләт нефть техник университеты һәм Б. Б. Городовиков исемендәге Ҡалмыҡ дәүләт университеты студенттары сығыш яһаны. Ярыштар төркмән, рус һәм инглиз телдәрендә ике категорияла (химия һәм ике йүнәлештәр өсөн) ойошторолдо.

Олимпиада еңеүселәрен вице-премьер Дмитрий Чернышенко, фән һәм юғары белем министры Валерий Фальков ҡотланы. "13 алтын миҙал - оло еңеү. Был уңыш - Рәсәйҙең алдынғы университеттары профессорҙары һәм ғилми мәктәптәренең таланты, тырышлығы һәм һоҡланғыс эше һөҙөмтәһе. Беҙ еңеүселәр һәм уларҙың остаздары менән ғорурланабыҙ! Был ҡаҙаныштар менән генә туҡтап ҡалмағыҙ һәм яңы үрҙәр яулағыҙ!" - тине Дмитрий Чернышенко.

Олимпиадала Азербайжан, Әрмәнстан, Белоруссия, Бөйөк Британия, Иран, Италия, Ҡаҙағстан, Ҡытай, Рәсәй, Үзбәкстан һәм Тажикстандың 24 юғары уҡыу йортонан бөтәһе 100 студент, шулай уҡ Төркмәнстандың 23 университетынан 150-нән ашыу студент ҡатнашты.

**Ләйсән ЗАКИРОВА.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

## ЯҢЫ ЮЛ БИЛДӘЛӘРЕ

**2026 йылда Рәсәйҙә өҫтәмә рәүештә яңы юл билдәләре булдырыла. Улар яңы ГОСТ буйынса урынлаштырыла.**

***"Һаңрауҙар"*** билдәһе ишетеү һәләте боҙолған йәйәүлеләр хаҡында иҫкәртәсәк. Был билдәләр насар ишетеүсе кешеләр йөрөгән ерҙәрҙә, мәҫәлән, дауаханалар, махсус мәктәптәр янындағы йәйәүлеләрҙең юл аша сығыу урындарында ҡуйыласаҡ.

***"Стоп-линия"*** - вертикаль билдә, уны горизонталь билдә ҡуйыу мөмкин булмаған ерҙә күрәсәкбеҙ.

***"Боҙ ҡаплаған һәм еүеш урын" "Тайғаҡ юл"*** һәм ***"Еүеш япма"*** билдәләре менән берләштерелә. Был билдә водителдәргә тиҙлекте кәметергә һәм киҫкен тормозға баҫмаҫҡа ҡуша.

***"Хәрәкәт ваҡыты"*** ("Время действия") элеккесә, билдәнең ҡайһы осорға ҡарауын күрһәтә, ләкин хәҙер билдәгә сәғәт һүрәтләнеше һәм аҙна көндәре генә түгел, ә айҙар ҙа төшөрөләсәк.

***"Яһалма һикәлтәләрҙе үткәндә тәҡдим ителеүсе тиҙлек" "Ерҙә ятыусы полицейский"*** аша үткән саҡта водителдәргә ниндәй тиҙлек кәрәклеген күрһәтә.

"Объясняем.рф" телеграм-каналы хәбәр итеүенсә, яңы билдәләрҙән башҡа юл ситтәрендәге туҡталыу урыны киңлеге 25 см-ға - 2,5 метр урынына 2,25 метрға үҙгәртелә. Оҙонлоғо элеккесә - 6,45 м көйө ҡала.

*"КИСКЕ ӨФӨ"НӨ УҠЫЙБЫҘ!*



*"Киске Өфө" гәзите - рух-йән дауаһы, күңелгә ғәм, сәм һалып, ҡуҙғытып, донъяуи мәсьәләләргә ҡараштарҙы киңәйтеп ебәреүсе баҫма. Йәмғиәттә йәшәгәс, кеше алдында төрлө юҫыҡтағы һорауҙар, проблемалар тыуып ҡына тора - береһенең осона сыҡһаң, икенсеһе килеп ҡалҡа. "Киске Өфө" гәзите айбарланып ярҙамға ташланғандай: албырғап ҡалғандың аңын уятыр, илағанды йыуатыр, тормош юлындағы маяҡтай, аҙашҡанды етәкләп алып китер, атайҙарса төплө кәңәштәр бирер, әсәйҙәрсә сабыр аҡыл менән фатиха ҡылып, юл күрһәтер рухи таяныс, ныҡлы терәк ул.*

12+

ҠЫҪҠАСА

# БӘЛӘ АЯҠ АҪТЫНДА

✔ **Башҡортостан Башлығы Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Стәрлетамаҡта "Авангард" заводындағы шартлауға аңлатма бирҙе.** "Сәбәптәрен криминалистар асыҡлай, хәҙер властарҙың бурысы - һәләк булғандарҙың ғаиләләренә ярҙам итеү, - тип билдәләне Радий Хәбиров. - Ҡыҙғаныска ҡаршы, өс ҡатын-ҡыҙҙың ғүмере өҙөлдө. Уларҙың ғаиләләре етди иғтибар менән солғап алынырға һәм уларға компенсация түләнергә тейеш. Зыян күреүселәргә дауаларға, аяҡҡа баҫтырырға, кешеләргә ярҙам итергә кәрәк. Завод ярайһы уҡ иҫке, әммә мөһим дәүләт миссияһын үтәй. Бында ҙур эш башҡарырға кәрәк, заводҡа бинаны тергеҙеү өсөн кәрәкле подрядсыларҙы билдәләргә ярҙам итергә әҙербеҙ. Ҡыҙғаныска ҡаршы, бындай ҡатмарлы хәлдәр, ысынлап та, була. Шуға ҡарамаҫтан, завод илебеҙ өсөн ифрат кәрәкле һәм ихтыяжлы продукция етештереүҙе дауам итәсәк. Белеүемсә, ведомство-ара комиссия ултырышы үтте, ярҙам күрһәтеү йәһәтенән беҙгә, Хөкүмәткә, йөкләмәләр бар, уларҙы үтәргә кәрәк".".

✔ **21 октябрҙә Мәскәүҙә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров менән Рәсәй Милли гвардияһы ғәскәрҙәре федераль хеҙмәте директоры Виктор Золотовтың эшлекле осрашыуы үтте.** Уның барышында төбәк биләмәһендә хәүефһеҙлекте тәьмин итеү һәм көс ведомстволарының төбәк властары менән берлектәге эше тикшерелде, тип хәбәр итә Башҡортостан Башлығының матбуғат хеҙмәте. Шулай уҡ Махсус хәрби операция биләмәһендә хәрби бурыстарҙы лайыҡлы үтәгән Салауат Юлаев исемендәге ике Башҡортостан батальонына ярҙам мәсьәләләре лә тикшерелгән. Росгвардияның был подразделениелары хәрбиҙәре, бик яҡшы әҙерлек күрһәтеп, бер нисә тапҡыр дәүләт наградаларына лайыҡ булған. Виктор Золотов Башҡортостан етәкселегенә төбәктә урынлашҡан Росгвардия подразделениеларына әүҙем ярҙам күрһәткәндәре өсөн рәхмәт белдерҙе.

✔ **Башҡортостандың мәғариф министры яҡынлашып килгән көҙгө мәктәп каникулдары тураһында иҫкә төшөрҙө.** "Уҡыу календарына ярашлы, мәктәп уҡыусылары өсөн көҙгө каникулдар - 2025 йылдың 25 октябренән 2 ноябренә тиклем. Быйыл каникулдан һуң беҙҙә дәүләт байрамы - 4 ноябрҙә билдәләнгән Халыҡтар берҙәмлеге көнө көтә. Шулай итеп, уҡыусылар туғыҙ көн (25 октябрҙән 4 ноябргәсә) ял итә. Шаршамбы, 5 ноябрҙә, балалар яңы көс-дәрт менән парта артына ултыра", - тип яҙҙы Илдар Мәүлитбирҙин социаль селтәрҙәге сәхифәһендә. Министр шулай уҡ ата-әсәләргә каникул осоронда балаларҙың именлеге хаҡында хәстәрлек күреүҙе һорап мөрәжәғәт итте. Ә уҡыусыларға был көндәрҙе файҙалы итеп үткәреүҙәрен теләне. Әйтәйек, күберәк саф һауала йөрөргә, ҡыҙыҡлы китаптар уҡырға, ғаилә менән ваҡыт үткәрергә һәм мәҙәни сараларға йөрөргә.

✔ **2022 йылдың октябренән 2023 йылдың сентябренә тиклем үҙ теләге менән Рәсәй Оборона министрлығы менән килешеү төҙөгән яугирҙар хәрби хәрәкәттәр ветераны статусын алырға мөмкин.** Ил Хөкүмәте телеграм-каналында хәбәр итеүҙәренсә, Рәсәй Президенты Владимир Путин ҡушыуы буйынса федераль ҡануниәткә үҙгәрештәр әҙерләнгән. "Улар мөһим бурыстарҙы үтәне, илебеҙ өсөн көрәшкәндә батырлыҡ һәм ҡыйыулыҡ күрһәтте, шуға күрә уларҙың һәр береһе хәрби хәрәкәттәр ветераны йәки инвалиды статуҫын юллау һәм уларға бирелгән өҫтөнлөктәрҙән файҙаланыу мөмкинлегенә эйә була. Дәүләт Думаһы депутаттары, һуңынан сенаторҙар закон проектын тиҙ арала ҡабул итер, ә беҙҙә һаҡлаусылар тейешле ярҙам менән файҙалана алыр тип иҫәпләйбеҙ", - тип белдерҙе Хөкүмәт рәйесе Михаил Мишустин.

РӘСМИ СЫҒАНАҠ

# СИТТӘР ШУЛАЙ ТИ...

**Өфөләге Көрәш һарайында Радий Хәбиров Башҡортостан Башлығы ҡарамағындағы Физик культура һәм спорт үҫеше мәсьәләләре буйынса совет эшендә ҡатнашҡан Һиндостан, Афғанстан һәм Үзбәкстан спорт делегациялары вәкилдәре менән осрашты.**

- Ошондай ҡатмарлы ваҡытта спорт дәүләт-ара мөнәсәбәттәрҙе дауам итеү өсөн мөмкинлек бирә. Һеҙҙе республикабыҙҙа ҡабул итеү - беҙҙең өсөн оло мәртәбә. Артабан да берлектәге саралар үткәрәсәкбеҙ, - тине Башҡортостан Башлығы сәләмләү һүҙендә.

- Мин Өфөлә беренсе тапҡыр ғына түгел, ҡаланың үҙгәреүен күрәм. Бында күп кенә афғандар йәшәй, эшләй һәм ғаилә ҡора. Ысынлап та, спорт илдәребеҙҙе берләштерә. Бөгөн бында йыйылыуыбыҙға шатмын. Рәсәй - спорт иле, һеҙ - беҙҙең өсөн өлгө. Һеҙҙең тәжрибәгеҙ ҙур, тренерҙарығыҙ көслө. Ошо көндәрҙә һеҙҙәге ҙур спорт объекттарында булдыҡ һәм тәжрибә тупларға әҙербеҙ, - тип билдәләне Афғанстандың Олимпия комитеты етәксеһе Васик Ахмадулла осрашыу мәлендә.

Башҡортостан етәкселегенә спорт өлкәһендәге әүҙем хеҙмәттәшлек өсөн Панджаб штатындағы Һиндостан Халыҡ Партияһы (BJP) президенты Раджеш Багха һәм Үзбәкстандың Билбаулы көрәш халыҡ-ара федерацияһы вице-президенты Равшан Дастиров рәхмәт һүҙҙәрен еткерҙе.

# ДИНИ СИМВОЛДАРҘЫ...

**Башҡортостанда депутаттар дини символдарҙы ҡануни яҡтан яҡларға тәҡдим итте. Октябрь айында республика Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайында "Башҡортостан Республикаһында намыҫ һәм дин тотоу ирке тураһында"ғы законға үҙгәрештәр ҡараласаҡ.**

"Башинформ" агентлығына Башҡортостан Башлығы ҡарамағындағы Дәүләт-конфессия мөнәсәбәттәре буйынса совет рәйесе Азат Фәттәхов хәбәр итеүенсә, закон проекты федераль ҡануниәткә нигеҙләнеп әҙерләнгән. "Быға бер нисә ваҡиға сәбәпсе булды. 2023 йылдың октябрендә Үҙәк банктың яңы аҡсаһында Ҡаҙан кремле сиркәүенең тәреһеҙ төшөрөлөүенә күптәр ризаһыҙлыҡ белдерҙе һәм уны сығарыу туктатылды. Ошо һәм башҡа шаңдаулы ваҡиғаларға бәйле, традицион дини ойошмалар менән фекер алышыуҙар үткәрелгәс, закон ҡабул ителде. Был норма диндарҙарҙың дини тойғоларын яҡлай, дини символдарҙы һаҡлай, киң мәғлүмәт сараларында һәм рекламала уларҙы бысратыуға юл ҡуймай. Дини биналарҙың мәҙәни һәм тарихи йөҙөн һаҡлай. Бынан тыш, әгәр ҡайһылыр дәүерҙә дини биналар һәм башҡа объекттар дини символһыҙ булған икән, уларҙың һүрәттәрен тәғәйен символикаһыҙ таратыу рөхсәт ителә. Һәм тағы. Дини символиканы ҡайһы бер тауарҙарға ҡуйыу тыйылды. Мәҫәлән, полиэтилен пакеттар, бер тапҡыр ҡулланыла торған ҡағыҙ стакандар, салфеткалар һ.б. Шуны ла иҫкәртәм: дини символдарҙың аңлы рәүештә дәрәжәһен төшөргән һәм боҙған өсөн административ яуаплылыҡ ғәмәлгә индереү ҡарала", - тип билдәләне Фәттәхов.

Башҡортостандан МХО-ла ҡатнашыусыларҙың рухи остазы протоиерей Виктор Иванов, яңы закон киләсәк быуынды тәрбиәләүгә, уларҙа дингә ҡарата ихтирамлы ҡараш булдырыуға бер аҙым булырға тейеш, тип белдерҙе.

# БАЛАЛАР МӘСКӘҮҘӘ УҠЫЙ

**Мәскәүҙә Башҡортостандан беренсе курс студенттарын тантаналы рәүештә бағышлау - "БашПерваш 2025" байрамы үтте. Сараны ойоштороусы - Башҡортостандың Рәсәй Президенты ҡарамағындағы Тулы хоҡуҡлы вәкиллеге булышлығында Республика студенттары һәм аспиранттары ассоциацияһы.**

Йыл һайын уҙғарылған фестиваль Башҡортостанда тыуып үҫкән студенттарға Мәскәү вуздарында уҡыуға яраҡлашырға ярҙам итә, тыуған төйәк менән бәйләнештәрҙе нығыта һәм милли традицияларҙы үҫтерә. Башҡортостандың Тулы хоҡуҡлы вәкиллегендә үткән асыу тантанаһы сараның мөһим өлөшө булды, унда республика һәм баш ҡала етәкселеге вәкилдәре сығыш яһаны.

Байрам программаһында концерттар, Мәскәүҙең "Алтын ай" башҡорт бейеүҙәре ансамбле сығыштары, шулай уҡ баш ҡаланың иҫтәлекле урындары буйлап мауыҡтырғыс экскурсиялар бар ине. Рәсми өлөштән һуң Мәскәүҙең Йәмәғәтселек бәйләнештәре һәм йәштәр сәйәсәте комитетының коворкингтар селтәре майҙансығында байрам кисәһе үтте, унда "Иң яҡшы беренсе курс студенты - 2025" конкурсы булды. Интерактив квестың иң яҡшы командаларына бүләктәр тапшырылды.

# ЭШЛЕКЛЕ ҺӨЙЛӘШЕҮ

**Был көндәрҙә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Транспорт өлкәһендә федераль хеҙмәттең Волга буйы федераль округы буйынса төбәк-ара территориаль идаралығы (Ространснадзор) начальнигының яңы урынбаҫары Александр Косолапов менән осрашты.**

Һөйләшеү барышында теркәлеү үтмәйенсә законһыҙ пассажир ташыусыларҙың эшмәкәрлеген туктатыу, автомобиль трассаларында ауырлыҡ-габарит контроле системаһына бәйле эш һәм башҡа актуаль мәсьәләләр ҡаралды. Башҡортостан Башлығы идаралыҡ начальнигы урынбаҫарын вазифаға килеүе менән ҡотланы һәм уңыштар теләне.

- Ространснадзор менән беҙ әүҙем хеҙмәттәшлек итәбеҙ. Транспорт өлкәһен контролдә тотоуға бәйле көн тәртибендә бер нисә көнүҙәк мәсьәлә тора, - тине Радий Хәбиров. - Төбәктә байтаҡ юлдар төҙәлә, әммә күп осраҡта ауыр йөк транспорты уларҙы емерә. Беҙ ауырлыҡ-габарит контроле өлкәһендә ҡануниәтте боҙоусыларға ҡаршы көрәш буйынса комплекслы программа әҙерләү алдында торабыҙ. Һеҙҙән дә был эшкә ҡушылыуығыҙҙы һорайым.

Александр Косолапов ведомство менән берлектә конструктив эше өсөн республика етәкселегенә рәхмәт белдерҙе. "Минең профессиональ тәжрибәм, шул иҫәптән Рәсәйҙең яңы төбәктәрендәге хеҙмәтем, Башҡортостан менән һөҙөмтәле эш алып барырға булышлыҡ итер, тип ышанам", - тип белдерҙе Ространснадзор идаралығы начальнигы урынбаҫары.

# Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Салауатҡа эш сәфәре барышында "Битум" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәтенең производство майҙансығында булды һәм 60 мең тонна сеймал һаҡлау өсөн өр-яңы резерв паркын ғәмәлгә индереү тантанаһында ҡатнашты. 2017 йылдан "Битум" компанияһы етештереүсәнлекте үҫтереүгә 2,4 млрд һумдан ашыу аҡса һалған. "Илебеҙ һәм республикабыҙ өсөн ябай булмаған осорҙа яңы производстволар асылыуы - ҡыуаныслы хәл. Бер нимәгә ҡарамай, беҙ үҫешәсәкбеҙ. Был бик мөһим", - тине Радий Хәбиров ҡотлау һүҙендә.

✔Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Алга" махсус иҡтисади зонаһының 4-се төҙөлөш майҙанында булды һәм "ДоГа" финанс төркөмөнөң инвестиция проектын ғәмәлгә ашырыу барышы менән танышты. 2023 йылдың апрелендә "ДоГа" углеводород газдарын эшкәртеү буйынса ҡоролма төҙөй башлай. Эшкәртеү өсөн сеймалды ул "Газпром нефтехим Салауат" предприятиеһынан аласаҡ. Инвестицияның дөйөм күләме 7,1 миллиард һум тәшкил иткән, 155 яңы эш урыны булдырыу күҙаллана.

✔"2019 йылдан республика "Уңайлы ҡала мөхитен булдырыуҙың иң яҡшы проекттары" Бөтә Рәсәй конкурсына 76 ғариза биргән, шуларҙың 39-ы еңеп сыҡҡан. Бәләкәй ҡалаларҙы һәм тарихи ауылдарҙы төҙөкләндереүгә бөтәһе 3,3 миллиард һум федераль аҡса йәлеп иттек", - тип яҙҙы Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәрҙә. Башҡортостандың тораҡ пункттарында йәмәғәт киңлектәре йылдан-йыл үҙгәрә һәм халыҡты йәлеп итеү урыны булып тора, тип билдәләне ул.

✔Башҡортостандан 2026 йылға Президент гранттарының беренсе конкурсында ҡатнашыу өсөн 636 ғариза бирелгән. Артабан - Омск (507) һәм Белгород (378 ғариза) өлкәләре килә. Ғаризаларҙы ҡабул итеү 15 октябрҙә тамамланған. Һөҙөмтәләр киләһе йылдың ғинуарында билдәле була. Башҡортостандың коммерцияға ҡарамаған йәмғиәттәре проекттарында башлыса Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға ярҙам итеү, студенттарҙы имтихандарға әҙерләү, Бөйөк Ватан һуғышы осоронда Башҡортостандан партизандар рәтендә һуғышҡандар тураһындағы эҙләнеүҙәр кеүек йүнәлештәргә өҫтөнлөк бирелгән.

✔Республика хужалыҡтары иген культуралары майҙандарының 98 процентында, йәғни 1,4 миллион гектар сауаһы ерҙә, ураҡ эштәрен тамамлаған. Бөтәһе 3,8 миллион тонна сауаһы иген һуғып алынған. Былтырғыға ҡарағанда был 500 мең тоннаға күберәк. Республика буйынса уртаса уңыш гектарынан 27 центнерҙан ашҡан. Республика Хөкүмәте вице-премьеры - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов билдәләүенсә, 250 мең тонна иген һуғып алған Стәрлетамаҡ районы уңыш күләме буйынса лидер булып тора. Саҡмағош, Мәләүез, Илеш, Баймаҡ, Ауырғазы һәм Дәүләкән райондарында был күрһәткес - 150 мең тоннанан ашыу.

✓ *Мостай Кәрим исеме - хикмәт, кешелеклек, һынмаҫ рух ныҡлығы һәм еребеҙгә, халҡыбыҙға, уның теле һәм мәҙәниәтенә ҡарата булған оло һөйөү менән һуғарылған айырым донъя ул.*



*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

# МОСТАЙ РУХЫ БЕҘҘӘ!

**Һауа торошо ҡояш нурҙары менән артыҡ иркәләмәһә лә, Өфө фән һәм технология университетының Башҡорт филологияһы, шәрҡиәт һәм журналистика факультетында 20 октябрь көнө шатлыҡҡа, йылы осрашыуҙарға, хәтирәләргә бай булды. Сөнки тап ошо көндә Мостай Кәрим исемендәге фондтың 2025 йылғы гранттарын тапшырыу тантанаһы үтте.**



Мостай Кәрим исемендәге ижади оҫтаханала Фонд директоры Әлфиә Мостай ҡыҙы Кәримова, ректор Вадим Петрович Захаров, Башҡортостандың халыҡ шағиры Ҡәҙим Аралбаев, шағирә Йомабикә Ильясова һәм башҡа мәртәбәле ҡунаҡтар, журналистар, төрлө йылдарҙа Мостай Кәрим исемендәге грантҡа лайыҡ булыусылар, студенттар йыйылды. Шәхестәр Мостай Кәримгә ҡағылышлы йылы иҫтәлектәре менән бүлеште, байрам шатлығын уртаҡлашты, изге теләктәрен еткерҙе. Мәҫәлән, журналист Галина Ишмөхәмәтова ҡунаҡтарға Мостай Кәримдең Милли архивта һаҡланған 1955 йылғы Бөтә Союз яҙыусылары съезынан һуң яһаған сығышынан өҙөк уҡып ишеттерҙе. Был ҡыҫҡа ғына өҙөктә лә бөйөк яҙыусының үҙ ижадына ни тиклем талапсан булыуы, яҙыусы һөнәрен ҡоро һүҙ менән генә түгел, ә ысын эштәр менән биҙәргә өйҙәүе аңлашыла.

Республикабыҙға арҙаҡлы белгестәр биргән факультетта бөгөнгө көндә сит телдәр өйрәнеүгә ҙур баҫым яһала. Сарала Мостай Кәрим шиғырҙары башҡорт, урыҫ, ғәрәп, төрөк, ҡытай, корея, инглиз, француз, япон телдәрендә яңғырауы шуға ишара. Ә студенттарҙың һәр кемдең күңел түренә үтеп инерлек итеп, үҙебеҙҙең башҡорт телендә сәхнәләштергән "Туй дауам итә" пьесаһынан өҙөк күптәрҙең күҙҙәренә йәш эркелдерҙе.

Быйылғы грантҡа лайыҡ булыусылар - уҡыу алдынғылары, университеттың йәмәғәт тормошонда ҡайнап йәшәүсе Юлдаш Мусин һәм Илзидә Асаинова. Улар Мостай Кәрим фондына, Әлфиә Мостай ҡыҙына, факультетҡа булған сикһеҙ рәхмәттәрен белдерҙе. Сара аҙағында улар Мостафа Сафа улының ижады тураһында үҙ фекерҙәрен әйтеп үттеләр. Юлдаш Мусин: "Мостай ағай Кәрим минең өсөн ҙур өлгө булып тора. Уның биографияһын һәм әҫәрҙәрен уҡыһаң, үҙенең башынан үткәндәрен, кисергәндәрен яҙғанын аңлайһың. Уның әҫәрҙәрендә, беренсенән, көслө башҡорт рухы, икенсенән, беҙҙең кеүек йәштәргә бик тә кәрәк әхлаҡи һабаҡтар һүрәтләнгән. Шунын өсөн дә мин Мостай ағайҙы ратып уҡыйым һәм өйрәнәм", - тиһә, Илзидә Асаинова иһә: "Мостай Кәрим исеме - хикмәт, кешелеклек, һынмаҫ рух ныҡлығы һәм еребеҙгә, халҡыбыҙға, уның теле һәм мәҙәниәтенә ҡарата булған оло һөйөү менән һуғарылған айырым донъя ул. Уның шиғырҙарынан һәм прозаһынан беҙ йәшәйештең иң ауыр һорауҙарына яуаптар табабыҙ, һынауҙар алдында баш эймәҫкә, изгелеккә һәм ғәҙел булырға өйрәнәбеҙ", - тип бүлеште. Һәм уларҙың был фекерҙәре залға йыйылған йә бында булмаған йәштәрҙең дә, ололарҙың да күптәре өсөн ауаздаштыр.

"Грант алыусы йәштәр киләсәктә лә илебеҙ һәм халҡыбыҙ өсөн кәрәкле белгестәр булырҙар, бөйөк Мостай рухына тап төшөрмәҫтәр, үҙҙәренә күрһәтелгән ышанысты аҡларҙар, ә университетыбыҙҙың Башҡорт филологияһы, шәрҡиәт һәм журналистика факультетында Шәхестәр мәктәбе үҙ традицияларын дауам итер, тигән өмөттәбеҙ", - тип тамамланы һүҙен шағирҙың ҡыҙы.

**Айһылыу ДАУЫТОВА.**

*ҮӘТ ШУЛАЙ!*

# БЕҘҘӘ ЛИМОН ДА ҮҪӘ!



**Өфөлә "Йәшел сауҡалыҡ" шифаханаһы биләмәһендә Өфө лимонарийының 35 йыллығы уңайынан шунса уҡ йүкә ултыртылды. Шул рәүешле Өфө лимонарийы коллективының Башҡортостандың урман ресурстарын һаҡлауға һәм үҫтереүгә индергән өлөшө билдәләнде.**

Өфө лимонарийы 1990 йылда асылған. Бөгөн питомникта 1300 лимон ағасы үҫтерелә, улар йыл һайын 20 тоннанан ашыу емеш бирә. Шулай уҡ бында әфлисун, мандарин, грейпфрут, цитрон һәм башҡа тропик һәм субтропик ағастар, ҡыуаҡтар, үҫемлектәр үҫә, ҡайһылары Ҡыҙыл китапҡа индерелгән. Ҙур теплица комплексы бер үк ваҡытта уҡыу, фәнни һәм экскурсия объекты булып тора.

Өфөлә ошо мөһим датаға ҡарата "Субтропик һәм тропик емеш культуралары" халыҡ-ара ғилми-ғәмәли конференцияһы бара, бында Рәсәйҙән һәм сит илдәрҙән килгән ғалимдар, белгестәр һәм практиктар тәжрибә уртаҡлаша, урман хужалығы, үҫемлекселек һәм ландшафт архитектураһы өлкәһендәге көнүҙәк мәсьәләләр хаҡында фекер алыша.

"Өфө лимонарийы - ғилми үҙәк кенә түгел, мәҙәни майҙансыҡ һәм популяр туристик объект та. Өфө лимонарийының Башҡортостан урман тармағының айырылғыһыҙ өлөшөнә әүерелеүе, уникаль "цитрус урманы" булдырылыуы менән ғорурланам. 35 йыл эсендә ул республиканың ысын байлығына әйләнде", - тип билдәләне үҙенең ҡотлауында Башҡортостандың урман хужалығы министры Марат Шәрәфетдинов.

*ҠЫҪҠАСА*

# ӨЛКӘНДӘР ХӘСТӘРЛӘНӘ

✓ **Башҡортостандың ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы мәғлүмәте буйынса, Башҡортостанда 930 меңдән ашыу өлкән быуын вәкиле иҫәпләнә.** Республикала уртаса ғүмер оҙайлығы 73 йылдан артып киткән. 90 йәштән өлкәнерәктәр - 17 367 кеше, 100 йәштән өлкәнерәктәр - 294 кеше. 512 меңгә яҡын оло кешегә социаль ярҙам күрһәтелә. Республика Башлығы Радий Хәбиров башланғысы менән 2020 йылдың октябрендә "Башҡортостанда оҙон ғүмерлелек" проекты бойомға ашырыла башланы. Проектта ҡатнашыусылар һаны йыл һайын арта бара. Былтыр ғына унда 470 меңдән ашыу кеше ҡатнашһа, быйыл иһә 400 меңдән күберәк. Проектта бер нисә төп йүнәлеш бар: "Туризм", "Сәләмәтлек", "Физик культура", "Белем алыу", "Волонтёрлыҡ һәм остазлыҡ", "Мәҙәниәт һәм ижад". 9 ай йомғаҡтары буйынса, 35 меңгә яҡын өлкән йәштәге гражданға өйҙәрендә социаль хеҙмәт күрһәтелә. Быйыл 12 әбей-бабайҙы ҡарауға алған 10 ғаилә төҙөлгән. Республикала йәмғеһе 377 өлкән кеше ғаиләләргә урынлаштырылған.

✓ **Башҡортостанда һәм илдең башҡа төбәктәрендә ипотека микрокредит компаниялары асыла. Улар төбәктәрҙә торлаҡ алыу мөмкинлеген киңәйтеү буйынса дәүләт программаларын тормошҡа ашырыу өсөн булдырыла.** Ипотека микрокредит компаниялары Рәсәй субъекттары милкендә буласаҡ. Бер төбәктә - бер ипотека МКК-һы. Уларҙы Үҙәк банк контролдә тота. Ипотека микрокредит компаниялары 22 октябрҙән эш башланы. Улар өсөн кредиттың тулы хаҡын сикләүгә мораторий ғәмәлдә булған яраҡлашыу осоро билдәләнгән. Мораторий 2026 йылдың 31 мартына тиклем ғәмәлдә ҡала. Ипотека МКР-ры - ипотека кредиттары менән эшләү рөхсәт ителгән микрофинанс ойошмалары. Уларҙың заёмсыларға талаптары ябайыраҡ, әммә улар ипотеканы юғарыраҡ процент менән бирә.

✓ **Башҡортостанда халыҡты спортҡа йәлеп итеү өсөн тейешле шарттар булдырыла.** Вице-премьер - республиканың спорт министры Руслан Хәбибов һүҙҙәренсә, 2022 йылдан алып капиталь ремонт программаһына 40 спорт объекты индерелгән. Йүнәлтелгән средстволарҙың дөйөм суммаһы 382,1 миллион һум тәшкил иткән. Бынан тыш, муниципаль спорт объекттарын капиталь ремонтлау буйынса федераль проект эшләй. Быйыл ошо программа буйынса республикала спорт комплекстарын яңыртыуға 40 миллион һум бүленгән. Дәүләткә ҡарамаған спорт йүнәлеше лә үҫешә. 2022 йылдан 56 спорт ойошмаһына 12 спорт төрө буйынса спорт әҙерлеген тормошҡа ашырыуға 263,5 миллион һумлыҡ субсидиялар бирелгән. Был проект сиктәрендә 7205 спортсы өҫтәмә спорт әҙерлеге үткән.

✓ **2026 йылда Алыҫ Көнсығыш һәм Үҙәк федераль округтарҙың 26 төбәгендә "Ауыл тренеры" программаһы эшләй башлай.** Субъекттарға белгестәр йәлеп итеү өсөн 90 миллион һумдан ашыу аҡса йүнәлтелә, тип хәбәр итә Рәсәй Хөкүмәте. 50 меңгә тиклем кеше йәшәгән ауылдарға эшкә килгән физик культура һәм спорт хеҙмәткәрҙәре бер тапҡыр бирелә торған компенсация алырға мөмкин. Алыҫ Көнсығышта түләү күләме - 2 миллион һум, башҡа төбәктәрҙә иһә 1 миллион һум. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, бындай программаны тәүгеләрҙән булып республикабыҙ башлап ебәрҙе. 2020 йылдан республикала "Ауыл тренеры" программаһы эшләй. Ауылдарҙа һәм бәләкәй ҡалаларҙа буласаҡ чемпиондар тәрбиәләргә теләгән йәш белгестәр бер тапҡыр 1 миллион һум күләмендә бер тапҡыр бирелә торған түләү алырға хоҡуҡлы.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Хөкүмәте 2026 йылға инвалид һәм һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән балалар өсөн балалар ялы һәм һауыҡтырыу учреждениеларында квоталарҙы раҫланы. Ҡарарға ярашлы, киләһе йылда махсус ихтыяжлы балалар төрлө балалар лагерҙарында ял итә аласаҡ. Улар өсөн йыл әйләнәһенә һәм миҙгелле лагерҙарҙа, шул иҫәптән мәктәп лагерҙарында урындарҙың дөйөм иҫәбенең 2 проценты ҡарала. Махсус профилле лагерҙарҙа, хеҙмәт һәм палаткалы лагерҙарҙа - 1 проценты.

✓2025 йылда Башҡортостандың алыҫ ауылдарында йәшәгән 40 меңдән ашыу кеше "Сәләмәт республика - сәләмәт төбәк" иҫкәртеү акцияһы сиктәрендә медицина тикшереүе үткән. 21 апрелдән 16 сентябргә тиклем барған акцияла табиптар 175 мең тикшереү үткәргән, 23 меңгә яҡын хәүефле ауырыуҙар барлыҡҡа килеү мөмкинлеген асыҡлаған. Шулай уҡ 2 меңдән ашыу МХО-ла ҡатнашыусы һәм уларҙың ғаилә ағзалары тикшерелгән. 2026 йылдан мобиль комплекстарға күсмә УЗИ-аппараттарын индереү ҙә планлаштырыла. Был хаҡта Хөкүмәттең аҙналыҡ кәңәшмәһендә республиканың һаулыҡ һаҡлау министры Айрат Рәхмәтуллин хәбәр итте.

✓Республиканың Транспорт министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, Хәйбулла районында Аҡъяр - Яңы Черкассы - Ырымбур өлкәһе сиге юлының 7,6 километр оҙонлоҡтағы участкаһында асфальт-бетон япма түшәй башлағандар. Асфальт түшәлгәндән һуң юлсылар юл ситтәрен һәм юл билдәләрен билдәләйәсәк. "Был юл Башҡортостанды Ырымбур өлкәһе менән тоташтыра. Уның аша көн һайын 30 меңләп транспорт Гай, Орск ҡалаларына һәм артабан юллана", - тип билдәләне Башҡортостандың транспорт һәм юл хужалығы министры Любовь Минакова.

✓Башҡортостандан 9 ай йомғаҡтары буйынса, яҡын яткан сит илдәргә 21,4 мең тоннанан ашыу бойҙай һәм арыш оно һатылды, тип хәбәр итә Россельхознадзорҙың республика буйынса идаралығының матбуғат хеҙмәте. Был күрһәткес йыл башынан ике тапҡырға тиерлек арҡан. Башҡортостан продукцияһын күпләп һатып алыусылар иҫәбендә Әзербайжан, Әрмәнстан, Грузия, Үҙбәкстан һәм Төркмәнстан ҡала.

✓Йыл башынан Башҡортостанда миллион ярым турист булған. Туристар ағымы йыл аҙағына тиклем былтырғы күрһәткескә етер һәм уны 200 мең кешегә уҙып китер, тип фаразлай туризм министрлығы белгестәре. Республика ҡунаҡтарының күпселеге күрше төбәктәрҙән - Силәбенән, Татарстандан, Ырымбурҙан.Туристарҙы ҡабул иткән объекттарҙың 95 проценты дәүләт аккредитацияһын үткән. 1 сентябрҙән тейешле талаптарға яуап бирмәгән ҡунаҡханалар, ял базалары, глэмпингтар ҡунаҡтарҙы ҡабул итеү хоҡуғын юғалтты.

✓ *"Бер тапҡыр ахыр заман булған икән. Тик ул халыҡтың рухи юғарылыҡ кисергән, байрам иткән сағына тура килгән. Шуға халыҡ ахыр заманды һиҙмәй ҙә ҡалған".*



*"КИСКЕ ӨФӨ" ПРОЕКТЫ*

# УЛАР БАШҠОРТ МӘКТӘБЕНДӘ УҠЫНЫ!

**Ауылдарыбыҙҙың һәм ҡалаларыбыҙҙың башҡорт мәктәптәрендә белем алып, үҙ тормошонда, эшмәкәрлегендә, ижадында бейектәрҙән-бейек үрҙәр яулаған, республикабыҙҙа һәм Рәсәй кимәлендә киң танылыу тапҡан бик күп арҙаҡлы шәхестәребеҙ бар. Бөгөн балалар, йәштәр улар хаҡында бигүк хәбәрҙар түгел. Башҡорт мәктәбендә фәндәрҙе башҡортса өйрәнеп тә бик юғары маҡсаттарға, вазифаларға өлгәшеп була икәнен белһендәр әйҙә.**

## ҒӘҘЕЛШИН ХӘМИТ ҒАБДУЛЛА УЛЫ

Ул -Бөйөк Ватан һуғышы яугиры, элемтәсе. Полковник. Советтар Союзы Геройы.

Ғәҙелшин Хәмит Ғабдулла улы 1923 йылдың 10 июлендә Башҡорт АССР-ының Бәләбәй кантоны (хәҙерге Бишбүләк районы) Айыт ауылында Ғәҙелшин Ғабдулла Сәхибгәрәй ғаиләһендә тыуа. Нәҫел-нәсәбе заманында илекәй мең еренә күсеп килгән, әүәл Минзәлә өйәҙендә көн иткән ҫарылы-мең башҡорттарынан. Айыт ауылында башланғыс мәктәпте тамамлай. 1936 йылда ғаиләһе Ҡырғыҙ АССР-ының Кенеш ауылына күсеп китә, шунда ете йыллыҡ мәктәпте тамамлай. Һуғыш алдынан Фрунзе ҡалаһында финанс-иҡтисад техникумында уҡый.

Ҡыҙыл Армия сафтарына 1941 йылдың авгусында Фрунзе ҡалаһы хәрби комиссариаты тарафынан саҡырыла һәм радиотелеграфсылар курсына ебәрелә. 1941 йылдың октябрендә Көньяҡ фронтында, Таганрог ҡалаһы янында немец-фашист илбаҫарҙары менән һуғышҡа инә. 1943 йылдың август айынан алып ул 46-сы Дала армияһынның 31-се уҡсылар дивизияһында, 1449-сы айырым элемтә ротаһында хеҙмәт итә. Днепр өсөн барған алыштарҙа айырыуса батырлыҡ күрһәтә. 1943 йылдың авгусында - сентябрь аҙағында Дала фронты ғәскәрҙәре Полтава-Кременчуг фронты операцияһы барышында Днепр ярҙарына сыға. 1943 йылдың 26 сентябрҙән 27-нә ҡарай төндә сержант Ғәҙелшин 75-се уҡсылар полкының алдынғы подразделениелары менән Сошиновка (Украина, Верхнеднепровский районы) ауылы янында йылға аша сыға. Йылғаның уң яры эргәһендә өлкән радиотелегафсы Ғәҙелшин йөҙөп барған кәмә һыуға бата, әммә батыр яугир рацияны ҡотҡарып алып ҡала, аҙаҡ 13 сәғәт дауамында полк штабының дивизия штабы менән элемтә бәйләнешен тәьмин итә. Һуңынан сержант Ғәҙелшин Ауль плацдармындағы алыштарҙа ҡатнаша. 1944 йылдың 22 февралендә сержант Ғәҙелшин Хәмит Ғабдулла улына СССР-ҙың Юғары Советы Президиумы Указы менән Советтар Союзы Геройы исеме бирелә. Артабан ул 3-сө һәм 4-се Украин фронттары составында һуғыша, Украинаны, Молдавияны, Румынияны азат итеүҙә ҡатнаша. Хәрби юлы Чехословакия территорияһында Моравия-Острава һөжүм операцияһы ваҡытында тамамлана.

Һуғыштан һуң Ғәҙелшин Германияла совет ғәскәрҙәре төркөмө составында хеҙмәтен дауам итә. Һуңынан Ленинград хәрби инженер элемтә училищеһын һәм С. М. Буденный исемендәге Хәрби академияны тамамлай. Житомир юғары элемтә училищеһында уҡыта, кафедраның мөдире була. Полковник Ғәҙелшин Хәмит Ғабдулла улы 1969 йылда запасҡа сыға, Фрунзе ҡалаһында йәшәй (хәҙерге Бишкәк). Ул профессиональ техник училищела хәрби эш буйынса уҡытыусы булып эшләй. 2000 йылдың 10 ғинуарында вафат була. Ҡырғыҙстан Республикаһының Бишкәк ҡалаһында билдәле кешеләр зыяратында ерләнә.

*БЫНАҒАЙЫШ!*

# ЙОҠОЛАРЫ ТУЙҺЫН, ТИҘӘРҘЕР...

**Әллә ни күптән дә түгел, ни бары ун-ун биш йыллап элек булыр: бер ҡулға бала етәкләп, икенсе ҡулға икебеҙҙең дә сумкаларҙы тотоп, әлгә-ҡолай мәктәпкә сәсәп йүгергән мәлдәр онотторлоҡ түгел, хәтергә төшһә, әле лә аяҡ-табандар һыҙлап киткәндәй...**



Әйе, хәҙер генә ул баланы машина менән мәктәпкә лә, баҡсаға ла, секция-түңәрәктәргә лә йөрөтә ата-әсәһе, ә беҙҙең заманда машина рәхәте күптәргә тәтемәне. Әле генә ул беҙҙең йорт эргәһендәге дөйөм белем биреү учреждениеһы менән музыка мәктәбе янынан йөрөй торған юл тирәһе йырып үткеһеҙ: төрлө маркалы текә машиналар эргә-тирәне ҡаплап ултыра. Бер яҡтан, ата-әсәнең эшкә барышлай балаһын мәктәпкә килтереп китеүе бик уңайлы: дәрескә һуңламай килеп тә етәләр; ә яҡын-тирәлә йәшәүсе уҡыусыларға был бигерәк тә проблема түгел, йәйәү генә йөрөйҙәр.

Шулай булыуға ҡарамаҫтан, Дәүләт Думаһы депутаттары мәктәп уҡыусылары тормошон тағы ла еңеләштереү хаҡында баш вата: аҙна эсендәге алты уҡыу көнөн бишкә ҡалдырып, шәмбене - ялға, ә дәрестәрҙең башланыу ваҡытын 08.30-ҙан сәғәт 09.00-ға күсермәксе. "Ғәҙел Рәсәй " фракцияһы етәксеһе Сергей Миронов башланғысындағы был закон проектына аңлатма яҙыуҙа әйтелеүенсә, тәҡдим ителеүсе үҙгәрештәр уҡыусыларҙың һаулығын һаҡлау, уларҙың ижади үҫешенә булышлыҡ итеү һәм ғаиләлә ата-әсә тәрбиәһендә күберәк ваҡыт үткәреү маҡсатын күҙҙә тота.

Бынан тыш, проектта ял һәм байрам көндәрен уҡыуҙан тыш саралар - мәҙәни, спорт, тәрбиә эштәренә бағышлау ҡарала. Документ авторҙарының береһе - Дәүләт Думаһының һаулыҡ һаҡлау буйынса комитеты башлығы Сергей Леонов билдәләүенсә, мәктәп "йөгө" уҡыусылар өсөн бик көсөргәнешле, шуға күрә дәрестәрҙең башланыу ваҡытын 9-ға күсереү балаларға йоҡо туйҙырыу мөмкинлеге бирә, ә биш көнлөк уҡыу ғаиләгә бергәләп ял итеү сараһын ойоштороуҙы еңеләштерә.

Ғөмүмән, бөгөнгө мәктәп темаһына иғтибар итһәң, шундайыраҡ фекер ҡала: бәлки, балаларҙы "ыҙалатып", уҡытып тороу ҙа кәрәкмәйҙер? Рособрнадзор етәксеһе Анзор Музаев, мәҫәлән, бына нимә ти: уҡыусыларға ауыр темалар йөкмәтеүҙе туҡтатырға кәрәк; вуздарҙың эксперт берләшмәһе фекеренсә, стандарт мәктәп предметтарында бала аңы ҡабул итә алмаҫлыҡ артыҡ күп материалдар бирелә. Мәктәп программаларының ҡатмарлығын Музаев хатта "безобразие" тип атаны. Ләкин, бөгөнгө мәктәп уҡыусыларына күҙ ташлап алыу ғына ла уларҙың "ауыр йөктән" яфа сиккән, йонсоған балалар икәнлеген күрһәтмәй. Мәктәп эргәлә булғас, улар менән аралашырға ла тура килгеләй. Һәр замандың йәш быуын вәкилдәре кеүек, былар ҙа шат күңелле, аралашыусан; дәрестән һуң мәктәп биләмәһендә асылған иркен, уңайлы спорт

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# РУХЫҢ ЮҒАРЫ БУЛҺА...



**Күршем "Киске Өфө" гәзитендә баҫылып сыҡҡан "Һаңғырауҙар менән тулған донъя" мәҡәләһен уҡып сыҡҡан да: "Әллә мин дә һаңғыраумы икән?" - тип, уйҙары менән уртаҡлашырға миңә ингән.**

- Бына мин башҡорт мәктәбен тамамланым, республикабыҙҙа башҡорт телендә баҫылған гәзит-журналдарҙы уҡып барам. Русса акцентһыҙ һөйләшәм. Немец телендә һүҙлек ярҙамында аралаша алам. Тик бына Рәсәй каналы яңылыҡтарында һөйләгәндәрҙе тыңлаһам, үҙемде һаңғырау кеше итеп тоям. Тоталар ҙа, тормош яҡшыра, тиҙәр. Аңлай алмайым, - ти күршем. - Бына элек минең эш хаҡым 160 һум ине, ә ике бүлмәле фатир өсөн 3 һум түләй инем. Ә хәҙер пенсиям 15 мең һум, фатир өсөн 7 мең һум түләргә, тип квитанция килә. Тормош яҡшыра буламы һуң шунан?

Мин уйланып тороп ҡалдым. ТВЦ каналындағы "Времечко" тапшырыуында бер яҙыусы әйткән һүҙҙәр иҫемә төштө: "Бер тапҡыр ахыр заман булған икән. Тик ул халыҡтың рухи юғарылыҡ кисергән, байрам иткән сағына тура килгән. Шуға халыҡ ахыр заманды һиҙмәй ҙә ҡалған", - тигәйне ул.

Әйе, рухтарыбыҙ ғына юғары булһын, берүк төшөнкөлөккә бирелә күрмәйек, тим мин дә.

**Айгөл АХУНОВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Дүртөйлә, Октябрьский ҡалалары, Кушнаренко, Шишмә һәм Үрге Йәркәй ауылдары дәүләт бюджетынан 436 миллион һум алыуға иреште. Был сумма ваҡ ҡалалар һәм тарихи ҡасабалар араһындағы Бөтә Рәсәй конкурсы сиктәрендә тапшырылды. Бюджет ярҙамы менән ҡала-ауылдарҙа йәмәғәт объекттары - парктар, скверҙар, архитектура ҡомартҡылары, тәбиғи биләмәләр - төҙөкләндерелә.

✓"Иннопром. Беларусь" форумында Башҡортостан Республикаһы һәм Беларусь Рәсәй-Белоруссия инвестиция кластеры сиктәрендә үҙ-ара эш итеү буйынса ниәттәр тураһында килешеүгә ҡул ҡуйҙы, тип хәбәр итә республика Хөкүмәте. Яңы кластерҙарҙы "Алға" һәм "Минск" иҡтисади зоналарында урынлаштырыу планлаштырыла. Яңы проект махсус шарттар: һалым льготалары, инфраструктура өҫтөнлөктәре һәм башҡа инвесторҙарҙы дәртләндереү саралары ярҙамында төбәктәрҙең үҙ-ара эш итеүен әүҙемләштерергә мөмкинлек бирәсәк

✓Мәләүез районының Смаҡ, Бәләкәй Шәрип, Ҡыҙрай һәм Һыртлан ауылдарында яңы фельдшер-акушерлыҡ пункттары асылды. Был "Оҙайлы һәм әүҙем тормош" милли проекты һәм республика ярҙамы менән бойомға ашырылды. Ошо ауылдарҙа 1200-ҙән ашыу кеше йәшәй. Район хакимиәте башлығы Зәбир Ғабдуллин социаль селтәрҙәге сәхифәһендә медпункт мөдирҙәре менән таныштырҙы, ауыл халҡын медицина ярҙамының юғары кимәлдә булыуына ышандырҙы.

✓Башҡортостан һауыҡтырыу туризмының отошло йүнәлештәре араһында 8-се урынды биләй. Сентябрь-ноябрь айҙарына бронь һалыу мәғлүмәттәренә ярашлы, Башҡортостан иң отошло ун шифахана йүнәлеше иҫәбенә инде, тип хәбәр итте "Яндекс Сәйәхәттәр". Көҙгөһөн туристар республика шифаханаларына уртаса 4 көнгә килә, ә бер төн өсөн йәшәү хаҡы 6730 һум тәшкил итә. Быйыл көҙҙә иң отошло шифаханалар ғәҙәти курорттарҙа түгел, ә үҙәк Рәсәйҙә һәм Волга буйында, Башҡортостанда һәм Ростов өлкәһендә урынлашҡан, тип билдәләй сервис эксперттары. Был төбәктәргә барып етеүе лә еңелерәк: самолетта осорға кәрәкмәй, поезда йәки машинала барырға мөмкин.

✓Башҡортостанда Шишмә-Аксенов-Ҡырғыҙ-Миәкә трассаһы участкаһы ремонтланды. "Тормош өсөн инфраструктура" милли проекты сиктәрендә М-5 "Урал" трассаһының алты саҡрымлыҡ участкаһында юл япмаһы яңыртылды. Дәүләкән районының Вперёд ауылы янындағы участка норматив хәлгә килтерелде. Юл Әлшәй, Дәүләкән, Миәкә һәм Шишмә районлары ауылдарында йәшәүселәргә транспорт бәйләнешен булдыра. Был юлдан М-5 "Урал" федераль трассаһына сығырға һәм Өфөгә барып етергә мөмкин.

✓ *Күрәһең, ул ваҡытта бөгөнгө балаларҙың ваҡытын "урлаусы" интернет та, айфон-смартфондарҙың да булмау беҙгә ысын илһөйәр һәм телһөйәрҙәр, хеҙмәт яратҡан, тырыш, үҙаллы булып үҫергә ярҙам иткәндер.*



майҙанынан ҡайтышмай улар футбол, баскетбол, волейбол уйнай, сәпидтә елдерә.

Бар, әлбиттә, араларында тәрбиәһеҙҙәре лә. Ил буйынса тотош алғанда, ундайҙар, бәлки, күберәктер ҙә хатта, сөнки йәш быуын вәкилдәренең әхлаҡ йөҙө, белеме, тормошҡа ҡараштарына бәйле йәмғиәттәге ризаһыҙлыҡ тойғоһо юҡтан ғына түгел бит. Ғаиләлә һәм мәктәптә тәрбиә кимәленең ниндәй икәне лә һәр кемгә яҡшы мәғлүм.

Ҡыҫҡаһы, дәрестәрҙе кәметеүгә ҡарата, күберәк буш ваҡыт биреп, былай ҙа күҙ уңынан ысҡынырға әҙер генә торған үҫмерҙәрҙе әпәүләү булмаҫмы был, тип икеләнеүселәр һәм тәҡдим ителгән үҙгәрештәрҙе хупламаусылар ҙа бар. Өҫтәүенә, проект авторҙары ял көнөнә өйгә эш биреүҙе лә бөтөрөргә тәҡдим итә.

Закон проектына ҡарата үҙ фекерен белдереп, Башҡортостан Фәндәр академияһының Стратегик тикшеренеүҙәр институты ғалимы Александр Кобыскан "Московский комсомолец" гәзитенә әңгәмәһендә биш көнлөк уҡыу аҙнаһының үҙен аҡламаясағы хаҡында һөйләне. Был уҡыусыларҙың нигеҙ белемен һәм уҡыу сифатын юғалтыуға килтерәсәк; заман мәғариф стандартын уҡыусыларҙы көсөргәндермәйенсә генә биш көнлөк уҡыу аҙнаһында сифатлы үҙләштереү мөмкин түгел, ти ул. "Бында шуны аңлау кәрәк: алтынсы уҡыу көнө - мөһим педагогик ресурс. Ул программаны һәр көнгә тигеҙ бүлеп сығыуға булышлыҡ итә, - тип дауам итә ғилми хеҙмәткәр. - Был айырыуса өлкән һәм профиль кластар өсөн мөһим". Икенсе яҡтан, ғалим мәктәптең социаль әһәмиәтен иҫкә төшөрөүҙе кәрәк таба. Балаларҙың күпселегә, айырыуса тынысһыҙ ғаиләләрҙә йәшәүселәр өсөн мәктәп мөхите хәүефһеҙ урын иҫәпләнә, ә шәмбе көнөнән уларҙы мәхрүм итеү, тимәк, баланы урамда ҡарауһыҙ йөрөргә мәжбүр итәсәк. Шул уҡ ваҡытта Александр Кобыскан мәктәптәргә тәҡдим ителеүсе үҙгәрештәрҙе һайлауҙа үҙаллылыҡ биреү яҡлы булыуын белдерә.

Ләкин аҙнаһына ике көн ял итеүҙән кем баш тартыр икән! Уҡыу көнөн кәметергә тәҡдим итһә лә, Сергей Миронов ял көнөнә өйгә эш бирмәүҙе хупламай. Был үҙаллы эш төрө, үтелгән темаларҙы иҫтә ҡалдырыу, ҡабатлау, ти ул, ләкин яһалма интеллект технологияһы заманында өйгә эштең формаль рәүештә, әҙер яуаптарҙы күсереп башҡарылыуы сәбәпле, Дәүләт Думаһы рәйесе Вячеслав Володин был эште файҙаһыҙ тип иҫәпләй һәм өйгә эш бирмәү яҡлы. "Үҙаллы эш булараҡ, өйгә эш ижади һәм тикшеренеү эшмәкәрлеген үҙ эсенә алырға тейеш, был балаға теманы тәрәнерәк өйрәнеүгә һәм нығытыуға, үҙендә тәнҡит ҡарашы үҫтереүгә булышлыҡ итәсәк", - ти спикер.

Әлеге ваҡытта мәктәптәрҙә эш аҙнаһы көнөн кәметеү буйынса депутаттар ҙа, табип һәм психологтар ҙа, уҡытыусылар ҙа, ата-әсәләр ҙә үҙ фекерҙәрен белдерә. "Заманында биш көнлөк уҡыу аҙнаһы тигәнде лә белмәнек, баш күтәрмәй өйгә эштәрҙе лә теүәл үтәп килә инек. Ул арала мәктәптең йәмәғәтселек тормошонда әүҙем ҡатнашырға, Тимур командаһы эштәренә лә өлгөрҙөк, түңәрәктәрҙә шөғөлләндек, ләкин уҡыу ауыр, тип зарланманыҡ, бер ҙә яфа сикмәнек - киреһенсә, берҙәм, татыу, өлгөлө һәм сәмле булып үҫтек. Күрәһең, ул ваҡытта, бәхеткәме, бәхетһеҙлеккәме, бөгөнгө балаларҙың бөтөн ваҡытын "урлаусы" интернет та, айфон-смартфондарҙың да булмау беҙгә ысын илһөйәр һәм телһөйәрҙәр, хеҙмәт яратҡан, тырыш, үҙаллы, сәләмәт быуын булып үҫергә ярҙам иткәндер. Әлеге балалар уҡыуҙан түгел, көнө-төнө телефон, интернетта ултырыуҙан йонсой, минеңсә. Шуға ла уларҙың йоҡоһо ла туймай", - тип яҙа, мәҫәлән, бер ветеран уҡытыусы. Алтын һүҙҙәр! Бер яҡтан уйлап ҡарағанда, ысынлап та, Дәүләт Думаһы кимәлендә мәктәптә өйгә эш биреү-бирмәү буйынса бәхәс ҡороп ултырыу ваҡ мәсьәлә һымаҡ, сөнки илдә бөгөн аныҡ ҡарарҙар ҡабул итеп бойомға ашыраһы проблемалар былай ҙа етерлек. Ләкин, әгәр уҡыусы, Володин әйтмешләй, мәктәп партаһы артынан ижади эшкә һәм үҙаллы фекерләүгә әҙер булып сыға икән, был балала, тимәк, киләсәккә өмөт бар, тигән һүҙ.

Депутаттар ниндәй уртаҡ фекергә килеп, ниндәй үҙгәрештәр ҡабул итер, ләкин "Ғәҙел Рәсәй" фракцияһы етәксеһе Сергей Миронов был тәҡдимдәрҙең балалар өсөн генә түгел, уҡытыусыларға ҡарата ла мөһим булыуын белдерә һәм уларға эш хаҡын арттырыу мәсьәләһен дә күтәрә.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ДОНЪЯ ШАНДАУЫ

# НИСЕК ИТЕП УИТКОФФ...

## Зеленскийҙың "ҡулын шаҡарғыланы"?

**Ысынында иһә, улай уҡ булмаһа ла, АҠШ президенты илсеһе Стив Уиткоффтың шефы биргән йүнәлештә нығышлығы яҡшы мәғлүм. Быйыл ғына ла ул Рәсәйҙә биш тапҡыр булырға өлгөрҙө. Ҡайһы сәйәсмән-чиновник баҙнат итә ала әле үҙ эшмәкәрлегендә бындай фиҙаҡәрлеккә! Һәм ул һәр осрашыуында РФ Президенты Владимир Путин менән күҙмә-күҙ осрашып һөйләшә алды. 6 августа һуңғы килеүендә улар өс сәғәткә яҡын әңгәмәләште.**

Аңлашылып тора ки: ҡаралған мәсьәләләр ҙә мөһим, көнүҙәк. Ә шулай ҙа һөйләшеү беренсе сиратта Украина конфликтын тыныс юл менән көйләү хаҡында бара. Рәсәй бындай һөйләшеүҙәргә әҙер булыуын һәр дайым ҡабатлап килһә лә, был бер яҡлы башланғыс менән генә бойомға ашырыла алмай. Ике арала ҡаңғыра торғас, ниһайәт, Аҡ йорт хакимиәте Киев режимына теш батырмаҡсы булды. Трамп Рәсәйҙең эске территорияларына һөжүм маҡсатында Киевҡа вәғәҙәләгән Томагавк ракеталарын биреү ниәтенән оҫта ғына ялтана алды һәм Зеленскийҙан конфликтты туҡтатыу буйынса килешеүгә барыуын талап итте. Бынан алда ғына, 16 октябрҙә, Владимир Путин менән телефондан һөйләшкәндә, Трамп Донецк Республикаһын Киев режимынан тулыһынса Рәсәй контроленә биреүҙе тәҡдим итте һәм шуның иҫәбенә Запорожье менән Херсон өлкәләренән баш тартыу ихтималлығын да белдерҙе, тип яҙҙы kommersant. Ru сайты һәм башҡа киң мәғлүмәт сығанаҡтары. Ә 17 октябрҙә Аҡ йортта Зеленскийҙы ҡабул итеп, Трамп, Украина конфликтын Томагавкыһыҙ ҙа көйләп була алыуға ышаныс белдерҙе. Бының менән Трамп Владимир Зеленскийҙың стартегияһын һындырҙы, тип яҙҙы "Страна.ru" баҫмаһы. Axios порталы белдереүенсә, ике араларғы һөйләшеү көсөргәнешле барҙы, ләкин иртәгәһенә Трамп Зеленский менән Донбасты Рәсәй контроленә ҡалдырыу тураһында һөйләшеү булмауын белдереп, был хаҡтағы рәсми хәбәрҙәрҙе кире ҡаҡты, ә уның урынбаҫары вице-президент Джей Ди Вэнс Томагавк мәсьәләһененең әле хәл ителмәүе хаҡында әйтте.

Эйе, сәйәсәт шундай нәмә, ул көнләп түгел, минут һайын йөҙөн үҙгәртеүе мөмкин. Ә бына уларҙың осрашыуында ҡатнашҡан Уиткофф украин делегацияһын Донецкиҙы Рәсәй контроленә бирергә өгөтләй. Сөнки, ти ул, был төбәктә нигеҙҙә рус телле халыҡ йәшәй. Трамп ярҙамсыһының был мәсьәләлә айырата нығышмаллығын урындағы мәғлүмәт саралары, Киев режимына баҫым яһау, тип атай һалды. "Московский комсомолец" яҙып сыҡҡан әлеге "ҡул шаҡарыуҙар" тарихы бына шунан килеп сыҡты ла.

Ҡул шаҡарыу, тигәндән, Уиткофф барыбер -Трамп, ә Зеленский Макрон түгел бит. 13 октябрь Шарм-әш-Шәйех саммитында АҠШ президенты Эммануэль Макрондың күрешергә һуҙған ҡулын ярты минуттай оҙаҡ ҡына шаҡарғылап тотоп торҙо һәм был француз лидерын ҡаушата төштө. Төркиә президенты Эрдоган иһә икенсе бер саммитта үҙен яурынынан ҡаҡҡаны өсөн әҙәпһеҙ Макрондың бармағынан эләктереп алды. Юғары даирәләрҙә лә тәрбиә һәм дистанция ҡағиҙәләрен белмәгән ҡайһы бер әҙәмдәрҙе бына шулай аҡылға ултырталар.

Үткән һанда ғына һүҙ алып барылған "билдәге балтаның" кәрәге тейеү ихтималлығы килеп тыуҙы тәки. The Times of Israel мәғлүмәт баҫмаһы хәбәренә ҡарағанда, ХАМАС тарафынан яңынан ут асыуға яуап итеп, йәнәһе, Израиль үҙенең Оборона армияһы (ЦАХАЛ) көстәренә Газа секторының көньяғындағы Рафах ҡалаһына авиаһөжүм итергә бойора, ләкин ХАМАС ике арала утты туҡтатыу тураһында килешеүҙе тотоуын белдереп, уны боҙоуҙа яуаплылыҡты, киреһенсә, Израиль иңенә ауҙара. Рафахты утҡа тотҡандан һуң Израиль яңынан тыныс килешеүгә ҡайтыуы хаҡында белдерҙе. Ике араларғы бына шундай тотороҡһоҙлоҡҡа нисек ышанмаҡ кәрәк? Әйткәндәй, Евросоюз менән НАТО ла һуғыш хөсөтөнән арына алмай. Рәсәйҙең Венадағы халыҡ-ара ойошмаларҙағы вәкиле Михаил Ульянов яҙыуынса, һуңғы өс йылда НАТО менән Евроберләшмә илдәре Украинаға һуңғы украин ҡалғанса ярҙам итәсәктәрен белдерә. Күптән түгел Брюсселдә булып үткән НАТО илдәре сит ил министрҙары осрашыуында ла альянс Рәсәйгә ҡаршы йүнәлеште йәйелдереү ниәтен раҫланы һәм Украинаға ла ошо йәһәттән баҫымды көсәйтә бара. Шул уҡ ваҡытта Евросоюз лидерҙары һуғыш идеяһы менән мауығып, көрсөккә килеп терәлгән үҙ илдәре проблемаларын онота.

Сәйәсәткә ҡағылмаһа ла, үткән аҙнаны шаулатҡан тағы бер хәбәр: көпә-көндөҙ Луврҙы талап сыҡҡандар! 19 октябрҙә һары төҫлө эш кейемендәге дүрт кеше, баҫҡыс ҡуйып, Париждың Лувр музейына тәҙрәнән үтеп инә һәм ете минут эсендә император Наполеон III менән уның ҡатынының зөмрәт-бриллиант гарнитурынан туғыҙ зиннәтле хазина: ике таж, алҡа, муйынса, брошка, диадеманы урлап сыға, ләкин ҡабаланыуҙары арҡаһында, императрицаның 1354 бриллиантлы, 56 зөмрәт ташлы тажы төшөп ҡала, ә бурҙар ҡеүәтле скутерҙарҙа тиҙ арала күҙҙән юҡ була. Фаразлауҙарынса, бында профессионалдар эш иткән. Был хәлде донъя мәғлүмәт каналдары быуат уғрылығы тип атаны ла инде.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө районының Шмидт ауылында күптән көтөлгән мәктәп 2026 йылдың башында, ҡышҡы каникулдарҙан һуң, асыла. Был хаҡта киң мәғлүмәт сараларына биргән интервьюһында муниципалитет башлығы Николай Ельников һөйләне. "2025 йылда бөтә эштәрҙе лә тамамлайбыҙ һәм мәктәпте лицензиялайбыҙ. 2026 йылда, Яңы йыл байрамдарынан һуң, балалар унда йөрөй башлаясаҡ", - тине ул. 640 урынлыҡ мәктәптән тыш, объект 140 балаға иҫәпләнгән балалар баҡсаһын да үҙ эсенә ала.

✓Өфөлә 52 йәшлек ҡатын тәүге тапҡыр әсәй булған. Бала ҡала клиник Перинаталь үҙәгендә тыуған. "Минең практикала бындай хәл тәүге тапҡыр! Тәүге тапҡыр пациент 52 йәшендә әсәй булды. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ашығыс операция яһаныҡ. Сабый етлекмәй тыуҙы", - тип яҙҙы был турала акушер-гинеколог Ирина Шәйхиева үҙенең телеграм-каналында.

✓Башҡортостандың яғыулыҡ ҡойоу станцияларында йәнә яғыулыҡҡа хаҡ артҡан. RussiaBase порталы мәғлүмәттәре буйынса, "Башнефть" яғыулыҡ ҡойоу станцияларында АИ-92 маркалы бензиндың бер литры 58 һум тәшкил итә (+0,26 процент). АИ-92+ бензины 59,30 һум тора (+0,25 процент), АИ-95+ иһә 63,05 һум (+0,16 процент). Дизель яғыулығына хаҡ үҙгәрмәгән, уның да бер литры өсөн 69,4 һум түләргә кәрәк. "Лукойл"да водителдәргә АИ-92 бензины 60,43 һумға (+0,5 процент) төшә. АИ-95 - 64,96 һум (+0,46 процент). АИ-100 - 88,68 һум (+1,37 процент). Солярканы 72,06 һумға һатып алырға мөмкин.

✓"Госуслуги Дом" мобиль ҡушымтала торлаҡ булмаған күсемһеҙ милек хужалары өсөн өҫтәмә функция асылды. Уның аша келәттәр, машина ҡуйыу урындары һәм күп фатирлы йорттарҙа урынлашҡан башҡа биналар өсөн түләүҙәр башҡарырға, коммуналь хеҙмәттәр менән бәйләнешкә сығырға һәм башҡа ғәмәлдәр атҡарырға мөмкин. "Госуслуги Дом" ҡушымтаһы менән Башҡортостанда 350 мендән ашыу кешеһе файҙалана, ә бөтә ил буйынса был күрһәткес - яҡынса 13 миллион тәшкил итә һәм ул даими үҫә.

✓AY YOLA төркөмө "Ural Batyr" тигән тәүге альбомын сығарҙы. Ул башҡорт халҡының ҡомартҡыһы - "Урал батыр" эпосының 12 бүлеген сағылдырған 12 йырҙан тора. "Һомай менән бергә күккә күтәрелерһегеҙ, ә Аҡбуҙат менән йәншишмәгә юл алырһығыҙ, Шүлгәндең ҡараңғылыҡҡа тәүге аҙымдарын ишетерһегеҙ һәм ҡараңғылыҡты еңгән Урал ҡылысының көсөн тойорһоғоҙ", - тип яҙҙы артистар социаль селтәрҙә.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ТУРИСТ ҺУҠМАҒЫ



# ТОРАТАУ

**Торатау - Башҡортостан тәбиғәтенең уникаль ҡомартҡыларының береһе, халҡыбыҙҙың изге тауы. Ул Ишембай районы биләмәһендә Ағиҙел йылғаһынан алыҫ түгел ятҡан Туғар Һалған күле буйында урынлашҡан. Тауҙың бейеклеге - 406, оҙонлоғо - 1200, киңлеге 800 метр тәшкил итә. Тауҙың көнбайышы һәм көньяҡ-көнбайыш битләүендә бер нисә ҙур булмаған мәмерйә бар. 230 миллион йыл элек был урында тропик диңгеҙ булған. Тектоник хәрәкәттәр һөҙөмтәһендә уның төбө тау булып күтәрелә. Шуға ла Торатауҙа диңгеҙ ҡабырсаҡтары һәм башҡа диңгеҙ тереклеге ҡалдыҡтары табыла. Тау 1965 йылдан алып тәбиғәт ҡомартҡыһы статусын йөрөтә һәм дәүләт тарафынан һаҡлана.**

Торатау тәбиғәтенең уникаль ҡомартҡыһы ғына түгел, ә башҡорт халҡының тарихи урыны ла. Тау башында Башҡорт иле менән хакимлыҡ иткән нуғай хандарының һарайы (нығытмаһы) булған.

Торатауҙа әүлиәләр ҙә ерләнгән. Шуға ул борон-брондан изге урын һанала. Башҡорттар тауға әйткән нәҙерҙәрен үтәгәс, изге ниәттәр ҡылып, доғалар менән генә менер булған. Торатауҙың үҫемлектәрен өҙөү ҙә оло гонаһ һаналған.

2020 йылға тиклем Торатауға тапалған боронғо һуҡмаҡтар буйлап күтәрелһәләр, хәҙер махсус ике һуҡмаҡ һалынған. Тәүгеһе, шиханды уратып, һөҙәк итеп ҡырсын түшәп эшләнгән.

Экоһуҡмаҡтың оҙонлоғо - 412 метрҙан ашыу, бөтәһе 697 баҫҡыс ҡуйылған. 50 метр һайын 15 кешегә иҫәпләнгән биш ҙур ҡуҙәтеү майҙансығы һәм ике кешегә иҫәпләнгән биш эскәмйә майҙансыҡтары бар.

Тәүҙә көнсығыш битләүҙә баҫҡыс, унан төньяҡ битләүҙә спорт һуҡмағы, артабан - һыбайлы, ҡулса һуҡмаҡтары, 80 автомобилгә иҫәпләнгән парковка булдырыу, шулай уҡ яңы тирмәләр ҡороу планлаштырыла.

Шулай уҡ Торатау итәгендә ауыр һуғыш осоронда урынлашҡан лагерҙың ҡалдыҡтарын ҡарап, үткәнебеҙгә, тарихи ваҡиғаларға әйләнеп ҡайтҡандай булаһың. Шихандың төньяғында урынлашҡан Туғар Һалған күленең тәрәнлеге 15 метр. Ул - республикалағы иң тәрән күлдәрҙең береһе.

2018 йылда Ишембай, Стәрлетамаҡ, Ғафури, Мәләүез райондары биләмәһендә урынлашҡан, майҙаны 4 мең квадрат километрҙан ашыу булған республика әһәмиәтендәге "Торатау" геопаркы булдырылды. Уның сикткәрендә 155 тәбиғәт объекты, 27 махсус һаҡланған тәбиғәт биләмәһе, 103 геологик һәм 126 тарихи-мәҙәни объект урынлашҡан. Төп иҫтәлекле урындар иҫәбендә - Торатау, Йөрәктау һәм Ҡуштау шихандары.

Торатау Стәрлетамаҡ менән Ишембай ҡалалары араһында, түгеһенән 18 саҡрым алыҫлыҡта ята. Өфөнән юлланғанда Стәрлетамаҡҡа етә килә һулға боролорға, артабан, Ҡарайған һәм Шихан ауылдары янынан тура үтеп, Урман-Бишҡаҙаҡҡа етмәй уңға тартырға кәрәк. Ишимбай яғынан барғанда ла юл Урман-Бишҡаҙаҡ аша үтә.

**Рәсүл БАЙГИЛДИН әҙерләнә.**

БЕЛЕМ УСАҒЫ

# ӨФӨЛӘ БЕРЕНСЕҺЕ БУЛДЫ...

**Эйе, бынан 55 йыл элек Өфөлә тәүге башҡорт мәктәбе булараҡ барлыҡҡа килә Ф.Х. Мостафина исемендәге 20-се Өфө ҡала башҡорт гимназияһы. Ошо йылдар буйына ул милли мәғарифҡа, республикабыҙға, халҡыбыҙға, туған телебеҙгә һәм рухыбыҙға арымай-талмай хеҙмәт итә. Гәзитебеҙҙең 39-сы һанында "һаны - егерменсе, асылы - беренсе" булған уҡыу йортоноң ветеран-уҡытыусылары иҫтәлектәре менән уртаҡлашҡайны. Ошо көндәрҙә үтәсәк юбилей тантанаһы алдынан Ф.Х. Мостафина исемендәге 20-се Өфө ҡала башҡорт гимназияһы директоры, БР-ҙың атҡаҙанған уҡытыусыһы Сулпан Мәүләүи ҡыҙы УЙЫЛДАНОВАнан да белем усағының бөгөнгөһө тураһында бер нисә һүҙ әйтеүен һорап мөрәжәғәт иттек:**



- Заман менән бергә атлай, заманса белем бирә, заманса фекер ҡора беҙҙең уҡыу йорто. Йәғни, гимназияла уҡыусыларға күп профилле урта белем биреү буйынса бай тәжрибә тупланған. Беҙҙә һәр уҡыусы теләгенә һәм һәләттәренә ярашлы билдәле бер уҡыу профилен һайлай ала, бында технология, социаль-иҡтисади һәм тәбиғи фәндәрҙә тәрәнәйтеп өйрәнеү кластары булдырылған. Был кластарҙа уҡыусылар үҙҙәре һайлаған предмет буйынса ҡатмарлыраҡ программаларҙы үҙләштерә, улар өсөн ошо өлкәлә эшләгән эксперттар лекциялар уҙғара, өлкән кластарҙа уҡыусылар билдәле бер темалар буйынса проектлау эшмәкәрлегенә йәлеп ителә, даими рәүештә төрлө махсуслаштырылған саралар ойошторола.

Әйтергә кәрәк, Төп дәүләт имтиханы һөҙөмтәләре барса предметтар буйынса уҡыусыларҙың белем сифатының яҡшыра барыуын күрһәтте, инглиз теле, туған тел, математика предметтары буйынса уртаса балдар юғарыраҡ булды. Һуңғы йылдарҙа БДИ һөҙөмтәләре лә ҡыуандырырлыҡ: эштәре юғары балл менән баһаланған уҡыусылар байтаҡҡа артты. Әлбиттә, улар Рәсәйҙең һәм республикабыҙҙың абруйлы юғары уҡыу йорттары студенттары булып китте.

Гимназистарыбыҙ йыл һайын уҡыусыларҙың Бөтөн Рәсәй олимпиадаларында әүҙем ҡатнаша. Һәләтле балаларҙың олимпиадаларҙа ҡатнашыуы уларҙың интеллектуаль үҫешенә булышлыҡ итә, киләсәктә билдәле бер һөнәр һайлау өсөн етди ерлек булдыра. Ошондай уҡыусыларыбыҙҙан технология буйынса олимпиаданың һуңғы этабы призеры Карина Гәрәеваны (10 класс), биология буйынса төбәк этабы еңеүсеһе Айзилә Әбделмәкминованы (10 класс), тарих предметы буйынса төбәк этабы призеры Арыҫлан Шафиҡовты (11 класс), йәмғиәтте өйрәнеү фәне буйынса төбәк этабы призеры Камила Әхмәтованы (11 класс), башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса төбәк-ара олимпиада призеры Камила Бикбулатованы (9 класс) билдәләп үтергә була.

Әлбиттә, уҡыу-уҡытыу процесында билдәле бер проблемалар ҙа килеп сыға: 2024 йылда өлгәрөштәре түбән булған уҡыусылар арҡаһында белем сифатының түбәнәйеүе күҙәтелгәйне. Бындай хәлдән сығыу маҡсатында айырым уҡыусылар менән индивидуаль эштәр, өҫтәмә занятиелар уҙғарыу юлға һалынды. Был йәһәттән һөҙөмтәләр күҙгә күренеп яҡшырҙы.

2024 йылда гимназия БР-ҙың Мәғариф һәм фән министрлығы Евразия ғилми-белем биреү үҙәге менән берлектә муниципаль уҡыу йорттары базаһында ойошторған предуниверсарийҙар селтәрен инициативалы бюджеттар проекттары конкурсында еңеп сыҡты. Предуниверсарий булдырыу буйынса Килешеү сиктәрендә гимназия "Өфө фән һәм технологиялар университеты" һәм иҡтисадтың ғәмәли секторы предприятиеһы менән хеҙмәттәшлек итәсәк. Беҙҙең партнерҙарыбыҙ гимназияла уҡыусыларыбыҙға һөнәри йүнәлеш биреү саралары уҙғарыу, педагогтарҙы һөнәри йүнәлеш эштәренә йәлеп итеү һәм гимназияны уҡыу материалдары менән тәьмин итеү менән шөғөлләнәсәк.

Гимназиябыҙҙа уҡытыу процесы тәрбиә эштәре менән ҡуша алып барыла. МХО шарттарында патриотик тәрбиәгә иғтибар артты, уҡыусыларыбыҙ һәр даим яугирҙарыбыҙға гуманитар ярҙам итеү акцияларында ата-әсәләре, уҡытыусылары менән бергә бик әүҙем ҡатнаша.

Гимназияла 2022 йылдан башлап Мостафина Фатима Хәмит ҡыҙына арналған Төбәк-ара ғилми-ғәмәли конференциялар уҙғарылыуы беҙҙең бренд сараһына әүерелде. Мәҫәлән, Ф.Х. Мостафинаның тыуыуына 110 йыл тулыуға арнап, 2023 йылда Башҡорт теле көнөндә уҙғарылған конференцияла, Башҡортостан Республикаһы мәктәптәре вәкилдәренән башҡа, Силәбе, Ырымбур өлкәләре, Удмурт Республикаһынан килгән ҡунаҡтар ҡатнашты. Ҡатнашыусылар гимназияға 600-ҙән ашыу эш ебәрҙе, 100 эш конференцияның аҙаҡҡы этабына тәҡдим ителде. Бындай һөҙөмтәле саралар яңы уҡыу йылында ла дауам итәсәк.

**Униҙан файҙаланып, легендар уҡыу йортон тамамлап сыҡҡан меңәрләгән милләттәштәребеҙҙе, педагогтар һәм уҡыусылар коллективын, ата-әсәләрҙе ошо ҙур байрамға тороролоҡ ваҡиға - гимназияның 55 йыллығы менән ихлас ҡотлайым!**

СЕТЕРЕКЛЕ ҺОРАУ

# ҮҘ-ҮҘЕҢДЕ ҮҘГӘРТЕҮ ЕҢЕЛМЕ?



**Әгәр һиңә, бөгөндән уҡ үҙгәр, тиһәләр… һин эште ниҙән башлар инең?**

- Иң тәүҙә ҡағыҙ битенә үҙемдең яҡшы һәм алама һыҙаттарымды яҙып, улар араһынан "ин-индәрен" билдәләп сығыр инем. Үҙемде сиктән тыш изге күңелле кеше тип иҫәпләйем. Был насар сифат булмаһа ла, ҡайһы ваҡыт минә ҡамасаулай. Изге күңеллелектән бөтөнләйгә ваз кисеү түгел маҡсатым, ә бары тик сиктәрҙән сыҡмаҫҡа, аҡтан ҡараны айырырға өйрәнергә теләр инем. Һөҙөмтәлә, һәр нәмәгә тиҙ генә ышанып барыуымдан да бер аҙ арыныр инем.

Артабанғы кире сифатым - сиктән тыш әүҙемлек. Әүҙем булыу яҡшы күренеш, тик әүҙем кешеләр, ғәҙәттә, ваҡыт төшөнсәһе менән иҫәпләшмәйенсә пландар ҡора. Һәр хәлдә, үҙ алдыма көс етмәҫлек пландар ҡороп, яуаплылыҡ алам, шунан инде әйткән эш килеп сыҡмаһа, йөҙ ҡыҙартырға тура килә.

Тағы ла кешеләр менән ҡәҙимгесә аралашыуға өҫтөнлөк бирер, әйләнә-тирәләгеләргә иғтибарлыраҡ булыр инем. Бөгөн ситтән тороп аралашыу заманы. Кешеләр бер-береһе менән бер тапҡыр ҙа күрешмәүе һәм интернет селтәрҙәре аша аралашыуы мөмкин, һәм был тәбиғи һанала. Уның яҡшымы, насармы икәнен әлегә баһалай алмайым, ә шулай ҙа ул ҡәҙәре шәп нәмә түгеллеген бер аҙ төҫмөрләйем.

Үҙгәреү өсөн күпме ваҡыт кәрәк? Нисә көн, нисә ай? Бәлки, бер-ике генә йыл да түгелдер. Һәр хәлдә, үҙ-үҙеңдә үҙгәртеү өсөн яныңда һине аңлаған, һинең үҙгәреүең өсөн ысын күңелдән тырышҡан һәм заман менән бергә атлаған яҡын кешең булырға тейештер. Ә кешегә бер инеп ояланған холоҡто үҙгәртер алдынан - ғәҙәтте, унан да алдараҡ йәшәү рәүешен үҙгәртеү кәрәк бит әле. Йәшәү рәүешен үҙгәртмәй тороп, холоҡто ла үҙгәртеп булмай. Ә беҙҙең ҡалыптар, стереотиптар һәм глобалләшеү процестары заманында йәшәү рәүешен үҙгәртеү өсөн икеләтә, өсләтә көс түгергә тура киләсәк.

**Әйткәндәй, гәзит уҡыусылар араһында ошо һорауға яуабы булғандар барҙыр, яҙып ебәрегеҙ.**

**Гөлфирә РӘХИМОВА.**

*ТАРИХИ ЙЫЛЪЯҘМА*

# ӨС ЙЫЛҒА САТЫНДАҒЫ ҠАЛА,

## йәки Нисә йәш һиңә, Өфө?

**(Салауат Хәмиҙуллиндың видеофильмы буйынса)**



***Салауат Хәмиҙуллин:*** Нагой фамилиялы баярҙар хакимлыҡ итеүсе династия менән туғанлаша: уларға туған булған Мария Нагаяны Иван Грозныйға кейәүгә бирәләр. Ул Мәскәү батшаһының һуңғы - етенсе ҡатыны була һәм Дмитрий Углицкий исемле батша улына ғүмер бирә. Уныһы 1591 йылда үтә сәйер рәүештә үлеп ҡала, тап шунан һуң Болғауыр заманы тип аталған йылдарҙа үҙҙәре үҙҙәрен батша тип атаған ялған батшалар пәйҙә була. 1584 йылда Иван Грозный вафат булғас, Нагойҙарҙы һөргөнгә ебәрәләр, бер нисә йылдан уларҙың берәүһе - Михаил Нагой Өфөгә килеп сыға, был факт Разряд кенәгәһендә хеҙмәткә алыныу айҡанлы теркәлгән. Донъя яратылыуҙың 7095 йылында, йәғни яңы иҫәп буйынса 1587 йылда кенәгәлә ошолай тип яҙылған: "В новом городе на Уфе Михайло Олександрович Нагой да голова Григорей Онучин".

Разряд кенәгәһендә ҡаланың яңы булыуы һәм унда Михаил Нагойҙың воевода хеҙмәтен үтәүе хаҡында ниндәйҙер ҡыҫҡаса белдерелә. Урындағы кешеләр ни сәбәпле Михаилдың исемен уның бер туғаны Иванға алыштырған һуң? Күрәһең, был осраҡта Өфөлә бер ҡасан да йәшәмәгән Иван Нагой исемен махсус рәүештә ҡулланғандар, тип фараз итергә була. Ни өсөн? Ысынында Михаил Нагой Болғауыр йылдарында ялған батша Лжедмитрий Беренсенең яҡын кешеләре иҫәбенә ингән, ул йәмғәтселек фекере буйынса һатлыҡ йәндәргә тиңләнгән, сөнки Болғауыр заманы уҙып киткәндән һуң был ваҡиғалар ямanатлы итеп баһаланған.

Өфө тарихы буйынса оҙаҡ йылдар буйына Рычковтың "Топография Оренбургская" тигән китабы төп сығанаҡ булып, 1573 йыл башҡорттарҙың ҡала төҙөтөү инициативаһын белдергән берҙән-бер дата рәүешендә теркәлгәс, Өфө статистика комитеты сәркәтибе, этнограф һәм крайҙы өйрәнеүсе Николай Гурвич быны нимә тип яҙа: "До 70-х годов в Уфе существовало, даже между интеллигенцией, какая-то традиционная уверенность, что в 1873 году Уфа должна отпраздновать свой 300-летний юбилей основания города". Әммә шул уҡ ваҡытта, алдараҡ әйтелгәнсә, әҙәбиәттә икенсе бер дата - 1574 йыл да йыш телгә алына. Шуға күрә Өфө йәмғәтселеге ошо ике датаның ҡайһыһын һайларға белмәйенсә, ошо ваҡытта ғалим-ғәләмәләр араһында киң танылыу тапҡан элекке Өфө кешеһе, Петербург Фәндәр академияһы академигы Петр Пекарскийға ғилми экспертиза уҙғарыу мәсьәләһе буйынса мөрәжәғәт итә. Өфөнөң бик тә теләп ҡаршы алырға йыйынылған 300 йыллыҡ юбилейына бер йыл ҡалғас, ғалим сығарған вердикт барыһын да шаҡ ҡатыра: Өфөгә 1573 йылда ла, һәм 1574 йылда ла нигеҙ һалынмаған булып сыға, ә 12 йылға һуңыраҡ - 1586 йылда.

***Булат Азнабаев:*** Академик Пекарский иң элгәре Нуғай хандарының рус батшалары менән алып барған дипломатик яҙмаларын өйрәнә. Ул ошо яҙмаларҙа Башҡортостан территорияһында, атап әйткәндә, Волга буйында һәм Уралда төҙөлгән ҡалалар хаҡында мәғлүмәт булыуын асыҡлай.

***Салауат Хәмиҙуллин:*** Пекарскийҙың "Өфө һәм Һамар ҡалалары ҡасан һәм ни өсөн нигеҙләнгән?" тигән мәҡәләһендә Нуғай ханы Урустың Мәскәү батшаһы Федор Ивановичҡа дәғүә белдереп яҙыуы хаҡында иҫкә алына: "...ты на четырех местах хочешь городы ставити: на Уфе, да на Увеке, да на Самаре, да на Белой Воложке. А теми месты твои деды и отцы владели ли? ... Поставил те городы для лиха и недружбы". Был хаттың яҙылыу ваҡыты - 1586 йылдың көҙө. Ошонан сығып, Өфө ҡәлғәһенең ошо йылдың йәй айҙарында төҙөлә башлауын билдәләп була. Һәм 1886 йылдың 8, 9, 10 июлендә - өс көн дауамында - Өфө күптән көтөлгән һәм, әйтергә кәрәк, күп яфалар менән аныҡланған 300 йыллыҡ юбилейын байрам итә. Ошо ваҡиға хөрмәтенә Өфөнөң Үрге Сауҙа майҙанында (Верхне-Торговая площадь), Ҡунаҡһарай (Гостиный двор) янында Александр Невский часовняһы һалына. Әммә ошонан да мөһимерәк ваҡиға - Ағиҙел йылғаһы аша тимер юл күперен төҙөй башлау була, ул Һамар-Златоуст тимер юлының үтә мөһим инфраструктура проектына ҡарай һәм 4 йылдан һуң Көньяҡ Уралдың икһеҙ-сикһеҙ киңлектәрендә, төпкөл бер төбәктә урынлашҡан Өфөнө Рәсәй империяһының Европа өлөшө менән тоташтыра. Ул ваҡыт үлсәмдәре буйынса ультразаманса булған коммуникация, һыу юлы һәм ат транспорты мөмкинлектәре менән сағыштырғанда күпкә алдымыраҡ булғас, төбәк үсеше өсөн үтә ҡеүәтле этәргес көскә әйләнә.

**(Дауамы. Башы 37-41се һандарҙа).**

*ТАРИХЫНДАН ДАН ТАП!*

# БАШҠОРТ АБЫЗДАРЫ ҺӘМ БАТЫРҘАРЫ

**Был һүҙ-атамалар тарихи сығанаҡтарҙа, халыҡ ижады һәм әҙәби әҫәрҙәрҙә йыш осраһа ла, уларҙың социаль-ижтимағи мәғәнәһе һәм функциялары фәнни яҡтан махсус өйрәнелгәне юҡ тиерлек. Абыз һүҙен хәҙерге уҡыусы бик тиҙ генә аңлап та бармай. Кем ул абыз? Ниндәй мәғәнәгә эйә? Ҡайһы замандарҙа ҡулланылған был һүҙ?**

Мәҫәлән, XIX быуат уртаһында Өфөлә яҙып алынған "Буҙъегет" ҡиссаһында шундай юлдарҙы уҡыйбыҙ:

Өй эсендә бер абыз ултыра икән,
Кереп өйгә бер сәләм бирҙе, тине,
Абыз тороп сәләм алды, тине,
Былярҙы күреп таңға ҡалды, тине.

Йәки үткән быуат башында шағир Шәйехзада Бабич "Башҡорт халҡына көйлө хитап" тигән әҫәрендә былай ти:

Беҙҙең абыз Аҡай, Салауаттар,
Ҡараһаҡал, Айҙар, Күсемдәр -
Былар бары ла ҡара көскә ҡаршы
Һуғышып үлгән алтын исемдәр!

XVIII быуатҡа ҡараған тарихи документтарҙа абыз һүҙе ҡушып әйтелгән кеше исемдәренә йыш ҡына тап булабыҙ. Шулар араһында Килмәк абыз, Кинйә абыз кеүек атаҡлы тарихи шәхестәребеҙ исемен күрәбеҙ.

Башҡортостандың ауыл, ер-һыу атамаларына күҙ һалһаҡ, Килкә Абыз, Иҫке Абыз, Ҡара Абыз кеүек ауыл исемдәрен, Абыз, Абызай, Абыздар тауы һымаҡ күл, тау атамаларын табабыҙ. Кисәге-бөгөнгө тормошобоҙҙоң үҙенә килһәк, туғантыумасалыҡ мөнәсәбәттәрендә һирәгерәк булһа ла ололар телендә абыз ағай, абыз апай, абыз бабай, абыз әбей ише һүҙҙәрҙе ишеткеләйбеҙ.

**Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ.**
**"Башҡорт халҡының рухи донъяһы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



# БАШҠОРТТАР

## Солоҡсолоҡ һәм умартасылыҡ, малсылыҡ һәм ҡошсолоҡ, ер эшкәртеү

Умарталарҙы урманда ағастарға элеү тәүҙән үк солоҡсолоҡ характерын алған. Әммә уларҙы күҙәтеү, ҡорттарҙы ҡарау, тәрбиәләү, күстәрҙе айырыу мөмкинлеге булмаған. Шул уҡ ваҡытта бәләкәй генә урында күп умарта урынлаштырыу бал урлауҙан ҡурсалау мөмкинлеге биргән һәм был умарталар ерҙә ултырған утарға күсеү формаһы булып торған.

Умарталыҡ йәки утар өсөн урманда ел булмаған майҙансыҡ, һирәк ағаслыҡ һайланған. Бал ҡорттары умарталарға урынлаштырылған, умарталар махсус умарта аҫты ташына йәки ағасҡа беркетелгән йәки ергә ҡағып ҡуйылған ҡаҙыҡ (һүрәт) өҫтөнә ултыртылған.



Умарталар ҡарама, йүкә, уҫаҡ, өйәңкә, имән йәки ҡарағай ағастарынан яһалған. Уларҙың бейеклеге - метр ярымдан ике метрға, диаметры 70 сантиметрҙан 1 метрға тиклем булған. Умарта уртаһындағы оҙон ярыҡ ике киҫәк таҡта - бер-береһе өҫтөнә ҡуйылған һәм махсус ағас сөй менән нығытылған ҡапҡаҡ менән ҡапланған. Умартаның өҫкө өлөшөндә ҡолаҡ эшләнгән һәм уның ярҙамында умарта ағасҡа йәки ҡаҙыҡҡа бәйләп ҡуйылған. Умартаның эсендә арҡыс-торҡос итеп рәтә йәки тағарау урынлаштырылған. Улар балауыҙҙы тотоп торған. Өҫкө бүлектә кәрәҙҙе тотоу өсөн тырма беркетелгән. Умартаның өҫтөнә туҙ ябылған һәм ул таш йәки ауыр предмет менән баҫтырып ҡуйылған. Ҡабырғанан, квадрат кейә эргәһенә бал ҡорттары умартаға инһен өсөн оҙон кейә ҡалағы ҡуйылған. Уның бер осо эске стенаға тейеп торһа, икенсе осо тышҡа сығып торған һәм уның осона сытыр-сатырҙан щетка бәйләнгән.

Умарталыҡта йәки уға яҡын асыҡ урында ҡорт ҡарасҡыһы йәки ҡорт һарығыс урынлаштырыла. Улар дүрт ҡаҙыҡҡа инкеү итеп ҡуйылып, ҙур булмаған ҡайыр пластиналарынан ғибәрәт булған йәки ҙур булмаған ағастарға нығытылған туҙҙы тәшкил иткән. Күстән сыҡҡан бал ҡорттары шуларға ултырған. Бал ҡорттары июнь һуңынан күс айыра башлағас, был ваҡытҡа умарталар, әйрә һәм ҡорт тубал, ҡортсолоҡта кәрәк булған ҡүҙелдерек һәм башҡа кәрәк-яраҡты әҙерләп ҡуйғандар.

Умартаны солоҡ эшләгәндәге ҡоралдар ҡулланып яһағандар. Иҫке умарталар йышҡы менән йышылып, кәрәҙ менән тултырылған. Селтәрҙәре ҡара аттың ялынан ишелеп, киндер туҡыма тегелгән киң ҡабыҡ ҡулсаға тарттырылған. Ҡорт тубал йәки моҙға төрлө формала һәм ҡоролошта булған. Ул ҡабыҡтан тәрән тырыз, тотошлайы менән ҡабыҡтан һәм иләк кеүек төплө яҫы, эллипс йәки селтәр иләкле ярым цилиндр рәүешендә булған.

Айырылған күсте оҙон туҙ ҡашығы менән һоҙғандар. Һоҙоп алғас, уларҙы ҡорт тубалға урынлаштырғандар һәм ҡорт сепрәге менән бәйләп ҡуйғандар. Күс шунда ниҫкә йәки таңға тиклем торған. Инә ҡорт махсус ҡорт сымылдығында эҙләнгән. Табылғас, уны инә ҡорт ситлегенә ултыртып, умартаға урынлаштырғандар һәм уны унда күс умартаға әйәләшеп, бал йыя башлағансы тотҡандар.

**(Дауамы бар).**

✓ ***Вакил ағай артабан ҡыл-ҡумыҙ эшләмәйем, был бит баҡсы-шамандар ҡоралы, уны эшләүе бик ҡатмарлы, ныҡ мәшәҡәтле лә, аңлауы ла ауыр минең өсөн, ҡыл-ҡумыҙ миңә серен сисмәй, тине.***



# СКРИПКАНЫҢ АТАҺЫ - уны иң тәүҙә

**Эске Рәсәй һәм Себер Үҙәк диниә назараты мөфтөйө һәм рәйесе булған күренекле башҡорт мәғрифәтсеһе Ризаитдин Фәхретдиндең ғүмере үҙәктән йыраҡта, ауыл мөхитендә үтә, Өфөгә килгәнсе үк ул билдәле шәхес була. Ҡыл-ҡумыҙ буйынса оҫта остаздарҙың береһе Миңлегөл СОЛТАНБАЕВА менән һөйләшкәндә, ниңәләр, олуғ шәхес иҫкә төштө. Юҡҡа түгелдер...**

## Яҙмыш яңылышмай

Сығышым менән мин Бөрйән районы Мәһәҙей ауылы ҡыҙымын. Күп балалы ғаиләлә алты ҡыҙ, ике малай араһында икенсе бала булып донъяға килгәнмен. Әсәйем ғүмер баҡый бала тәрбиәләне, бер ваҡытта ла буш булманы, йәй көндәре механизаторҙарға ашнаҡсы була торғайны. Ауылдың ҡояшы тип йөрөттөләр уны. Ябай ғына ауыл ҡатыны булһа ла, бик күп оло эштәр башҡарҙы ул. Атайым механизатор ине. Әйткәндәй, унын төп сығышы Әбйәлил районы Ҡаҙмаш ауылынан булып сыҡты. Быны 3-4 йыл элек бер аятҡа барғанда белдем, 90 йәшлек әбей, атайым мәрхүмдең уҡытыусыһы, иҫләп һөйләгәйне, хайран ҡалдым. Баҡтиһән, беҙҙең олатай указной мулла булған икән. Әсәйем Бөрйәндең Байназар ауылынан, ул бик матур йырланы, тауышы көр, матур, көслө ине. Атайым ҡурайҙа уйнаны, халыҡ йырҙарын оҫта башҡарҙы.

Әйткәндәй, ғаиләбеҙҙә барыбыҙ ҙа музыкаль яҡтан һәләтлебеҙ, бөтәбеҙ ҙә йырлайбыҙ, һәр беребеҙ үҙе өйрәнгән музыка ҡоралында ла уйнай. Тик, ниңәләр, мин генә бөләкәй сағымдан уҡ сәнғәт юлынан киттем. Ул ваҡытта ауылда бар бәйләнеш тик радио аша ғына булды, телевизорҙы белмәй үҫтек. Эфир аша концерттарҙы йыш бирәләр ине. Шуларҙы тыңлағанда Көнбайыш көйҙәре күңелгә ятмай торғайны, ә Азиянан, йә Көнсығыш яғынан булған көйҙәрҙе таңһыҡҡа ғына бер тулҡын аша тапшыралар. Транзисторҙар сыға башлағас ҡына төрлө-төрлө ҡыллы музыка ҡоралдарының тауышын тыңлай башланым. Аҙаҡ ҡына аңланым: сығышыбыҙ менән сит яҡҡа тайпылһаҡ та, генетик кимәлдәге хәтеребеҙ онотола барған юлға кире алып килгәндер. Ошо йәшемә еткәс, уйлап-уйлап анализлайым, үткәндәрҙе иҫләйем дә, бәләкәйҙән үк Хоҙай Тәғәлә миңә ана шул юлды биргәндер, тим. ***Күктәр көнсәләрендә айырым программа буйынса, яҙмышымды маңлайыма яҙып, ҡыл-ҡумыҙҙы тергеҙеүҙе ғүмерлек бурыс итеп тапшырғандарҙыр.*** Шулай булмаһа, музыка йүнәлешендә күрк йыл эшләү дәүеремдең утыҙ йылы ҡыл-ҡумыҙға бағышланмаҫ ине.

## Ир маҡтаныр, музыка ҡоралы уйнар

Башланғыс кластарҙы Мәһәҙейҙә тамамлап, Байназар ауылында бишенсе класта уҡып йөрөгәндә, музыка яғынан һәләтле балаларҙы һайлап алырға тип, Өфөләге хәҙерге Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге Республика гимназия-интернатынан комиссия килде. Шунда мин һайлап алыу турынан үттем, авгусҡа имтихандар бирергә килергә ҡуштылар. Барғайным, унда ла уңышлы үтеп киттем. Шул хәтлем шатландым, бала аҡылым менән тик бында уҡырға тейешлегемде аңланым. Әлбиттә, ауыл яғы ныҡ һағындыра торғайны, сөнки тыуған яҡҡа йылына ике тапҡыр ғына ҡайта инем.

Ситтә уҡыу өйҙән айырылып китеү генә булманы, бөтөн бала саҡ мөхитенән, тыуған яҡ тәбиғәтенән, туған телдән айырылыу булды бит. Тамара Миңнулла ҡыҙы Боревских исемле уҡытыусының ҡулында виолончель класында уҡыным. Тырыштым, мәктәпте матур ғына итеп тамамланым. Артабан сәнғәт училищеһын, институтын уҡып бөтөрҙөм. ***Был тормошта беҙҙе ниҙер етәкләп йөрөтә, бер нәмә лә осраҡлы түгел. Һөнәрем буйынса виолончель менән шөғөлләнһәм дә, башҡа музыка ҡоралдары ла ҡыҙыҡһындыра ине, энциклопедиялар аша ҡарап, беҙҙең башҡорттарҙа ла үҙенсәлекле берәй музыка ҡоралы булғандыр ул, тип уйлай торғайным.***

## Һорау-яуап

Сәнғәт училищеһынан һуң, кейәүгә сығып, иремдең тыуған яғы Әбйәлилдең Аҫҡар музыка мәктәбендә виолончель класы асып, скрипканан уҡыта башланым. Хеҙмәт юлым 1985 йылда шулай башланып китте. Ирем, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Радмир Иншар улы Солтанбаев, "Миләш" исемле фольклор төркөмө төҙөнө, хәҙер улар Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған коллективы һанала. Төрлө мәҙәни сараларҙа мин дә улар менән бергә ҡатнашам. Өфөлә үткән шундай сараларҙың береһендә башҡорт халҡының милли музыка ҡоралдары бүлеген ҡарап йөрөгәндә бәләкәй генә китапсыҡҡа иғтибар иттем. Асып ҡараһам, унда дөңгөр, ятаған кеүек башҡорт милли музыка ҡоралдарының фотолары бар. Улар Өфө сәнғәт институтының традицион музыка ҡоралдары бүлеге деканы, фольклорсы, композитор Айрат Миңләхмәт улы Ҡобағошов йыйған материалдар булып сыҡты. Йөрәгемдә нимәләр ҡуҙғалды: была бит, мин эҙләгән нәмә! Шунан башлап ҙур ҡыҙыҡһыны менән гәзит-журналдарҙан, төрлө китаптарҙан кәрәкле материалдар эҙләй башланым.

90-сы йылдар аҙағында "Башҡортостан" гәзитендә Закиров фамилиялы бер авторҙың "Ишетелерме берәй ҡасан?" тигән ҙур ғына мәҡәләһе иғтибарымды йәлеп итте. ***Ул унда, башҡорттарҙа алтмыш алты (!) музыка ҡоралы булған, тип яҙа, шул иҫәптән, ҡыл-ҡумыҙҙы ла телгә ала. Оҙаҡ эҙләгән һорауыма яуапты шул гәзиттән таптым, ҡыл-ҡумыҙ тураһындағы материалдарҙы ныҡлап өйрәнә башланым, милли музыка ҡоралдары оҫтөндә эшләүсе Вакил Шөғәйепов, Рәшит Ғәлимов, Риф Сәләймәнов, Салауат Баймөхәмәтов кеүек оҫталар менән аралашып торҙом.*** Улар бөтәһе лә экспериментальь рәүештә ҡыл-ҡумыҙҙы эшләп ҡаранылар. Бер ваҡыт Вакил ағай, ҡыл-ҡумыҙҙы эшләп бөттөм, килеп уйнап ҡара, тип шылтыратты. Оҫтаханаһына барҙым, уйнап ҡараным. Смычок декага ныҡ тейгән аркала, моңло тауыш сығарып булманы... Ағайҙың күңеле кителде... Һүтеп ташлап, янынан эшләүе бик ныҡ мәшәҡәтле эш бит инде... Бер ни саҡлы ваҡыт үткәс, янынан барҙым уға. Вакил ағай думбыра һәм шпондан ҡурай эшләү ысулын табып, артабан тулыһынса шул йүнәлештә генә эшләйәсәген белдерҙе, артабан ҡыл-ҡумыҙ эшләмәйем, был бит баҡсы-шамандар ҡоралы, уны эшләүе бик ҡатмарлы, ныҡ мәшәҡәтле лә, аңлауы ла ауыр минең өсөн, ҡыл-ҡумыҙ миңә серен сисмәй, тине.

1993 йылда Өфө дәүләт сәнғәт институты янында экспериментәль оҫтахана асылды. Унда һөнәре буйынса рәссам-скульптор булған Рәшит Ғәлимов эшләй башланы. Төрлө документаль сығанаҡтарға таянып, ул думбыра һәм ҡыл-ҡумыҙ эшләп ҡараны. Миңә унын өс ҡыллы ҡыл-ҡумыҙы оҡшап ҡалды һәм мин уны һатып алдым. Бөгөнгө көнгә тиклем был инструментта Аҫҡар сәнғәт мәктәбендә балаларҙы уйнарға өйрәтәм. Артабан, Рәшит ағай Ғәлимов вафат булғас, унын эшен ҡыҙы Гөлнур дауам итте. Унын менән бик тығыҙ бәйләнештә эшләйбеҙ. Шулай итеп, институтта теоретик яҡтан нығынып үҫеш алһам, оҫталар менән осрашып, эксперименталь варианттар өҫтөндә эшләй торғас, дүрт ҡыллы ҡыл-ҡумыҙҙы ла эшләп ҡуйҙылар! Бөгөнгө көндә беҙгә традицион (ике ҡыллы), дүрт ҡыллы прима, альт, бас ҡыл-ҡумыҙҙарында уйнарға мөмкинселектәр асылды, Аллаһҡа шөкөр! Милли музыка ҡоралдары оҫтабикәһе Гөлнур Рәшит ҡыҙы бик нәтижәле рәүештә ҡыл-ҡумыҙҙың сифатлы, тәрән, сихри-моңло, шул уҡ ваҡытта ҡолаҡҡа ятышлы матур тауышын эҙләүҙе дауам итә . Беҙҙең төп маҡсатыбыҙ: бик боронғо музыка уйын ҡоралы ҡыл-ҡумыҙҙы тергеҙеү, үҙгәртеп ҡороу һәм халыҡҡа еткереү! Хәҙер республикабыҙҙа милли оркестр ҙа бар, төрлө этноансамблдәр барлыҡҡа килеп, ҙур сәхнәләргә бик уңышлы сығыш яһайҙар. Шулай итеп, Батыр Иҫәнсуриндың 1998 йылда сыҡҡан "Юғалмаһын беҙҙең моң" һәм 1999 йылдағы Айҙар Закировтың "Ишетербеҙме берәй ҡасан?" тигән мәҡәләләрендәге һорауҙарға яуап табылды. Ишеттек! Эшләнек! Уйнаныҡ! Моң дауам итә!

## Беренсе аҙымдар

Гөлнурҙы ҡыл-ҡумыҙ эшләргә атаһы өйрәтеп өлгөрҙө, әммә артабанғы эш еңел булманы. Ни тиһәң дә, республикала эшләнгән иң беренсе ҡыл-ҡумыҙ бит! Әбйәлил музыка мәктәбенең ҡыл-ҡумыҙлы булыуының да үҙенә күрә тарихы бар. Шул ваҡыттағы район башлығы Павлюкович Владимир Петровичҡа барҙым. Әгәр музыка мәктәбендә республикала беренселәрҙән булып ҡыл-ҡумыҙҙы уҡыта башлаһаҡ, тарихҡа инеп ҡаласаҡбыҙ, тип тураһын ярып һалдым, инструмент һатып алырға ярҙам итеүен һораным. Ул ваҡыттағы аҡса менән инструмент алты мең тора ине. Йән биргәнгә йүн бирә, тигәндәй, йүне лә килеп сыҡты. Нәҡ шул йылды Йылайыр районы Яҡуп ауылындағы Ишмулла Дилмөхәмәтов конкурсы Положениеһына милли музыка ҡоралыбыҙ ҡурайҙан тыш, башҡа милли музыка ҡоралдарын ҡулланыуҙы ла индерҙеләр. Һис шикһеҙ, ҡатнашам, тинем дә, Өфөгә юлландым, сөнки Владимир Петрович конкурста урын алһағыҙ, ярҙам итербеҙ, тигәйне. Тура Гөлнурға барып, күргәҙмәләргә алып йөрөгән ҡыл-ҡумыҙын һораным. Инструменты алып, артҡа ут төрткәндәй, Йылайырға ашыҡтым. Беҙ барып еткәндә конкурс бөтөп бара ине, хатта беҙҙе иғлан итеп өлгөргәндәр. Тупһанан түргә тигән кеүек, ашыҡ-бошоҡ кейенә һалып, сәхнәгә сыҡтым. Шулайтып, телде арҡыры тешләп, бәйгелә өсөнсө урын алдым. Башлыҡ әйткән һүҙендә торҙо, мин уға шул тиклем рәхмәтлемен. Икенсе көндә үк Өфөгә барып, оҫтаға ҡыл-ҡумыҙ эшләүгә заказ бирҙем.

## Тәүге ҡарлуғастар

Ҡатмарлы музыка ҡоралын эшләү бер-ике көнлөк эш түгел: Аҫҡар музыка мәктәбе 2003 йылда - беренсе, 2008 йылда икенсе ҡыл-ҡумыҙлы булды. Виолончель, скрипка, фортепьянонан уҡытыу менән бер рәттән, виолончель буйынса уҡыған балаларҙы иплән кенә ҡыл-ҡумыҙҙан уҡыта башланым. 90-сы йылдарҙағы ауыр, көрсөк йылдары булыуға ҡарамаҫтан, виолончель буйынса уҡып бөткән ике уҡыусымды, Эльвира менән Эльмираны, Өфөгә сән-



***1993 йылда Өфө дәүләт сәнғәт институты янында эксперименталь оҫтахана асылды. Унда һөнәре буйынса рәссам-скульптор булған Рәшит Ғәлимов эшләй башланы. Төрлө документаль сығанаҡтарға таянып, ул думбыра һәм ҡыл-ҡумыҙ эшләп ҡараны. Миңә унын өс ҡыллы ҡыл-ҡумыҙы оҡшап ҡалды һәм мин уны һатып алдым. Бөгөнгө көнгә тиклем был инструментта Аҫҡар сәнғәт мәктәбендә балаларҙы уйнарға өйрәтәм.***

**✓ Асҡар музыка мәктәбендә 12 балаға бер ҡыл-ҡумыҙ булған хәлдә лә, тарһынманыҡ, бер инструмент менән шөғөлләнделәр, уларҙы, яйлап, виолончелдән милли музыка ҡоралыбыҙға күсерә башланым.**

# ҠЫЛ-ҠУМЫҘ,

## ата-бабаларым тыуҙырған

ғәт училищеһына алып барҙым, сөнки киләсәктә үҙебеҙҙең кадрҙар кәрәклеген белә инем. Аҡыл тештәрегеҙ сығып, тәжрибә тупламайынса, Асҡарға ҡайтып йөрөмәгеҙ, тинем уларға. Нәҡ шул йылда башҡорт милли музыка ҡоралдары бүлеге асылғайны. Ришат ағай Рәхимов та, комиссияның башҡа ағзалары ла виолончель буйынса уҡыһындар, тиһәләр ҙә, юҡ, улар башҡорт балалары, башҡорт бүлегендә уҡырға тейеш, тип әйтергә батырсылығым етте. Яңынан комиссия төҙөп, шул ике баланы, беренсе ҡалуғастарҙы, 1991 йылда уҡыуға алдылар, аҙаҡ улар сәнғәт институтына уҡырға инделәр, Рәмил ағай Ғәйзуллин, Айрат ағай Ҡобағошовтар ҡулында уҡынылар.

Ә Пушкин урамындағы махсус музыка мәктәбенә, ҡыл-ҡумыҙға башлап юл һалыр өсөн, Ҡаҙағстандан Ҡондоҙ Каламбаеваны саҡыртып алдылар. Ул унда ике йыл эшләне лә, тыуған яғына ҡайтып китте. Шул тиклем ҡыуанғайныҡ, әммә ҡыуанысыбыҙ оҙаҡҡа һуҙылманы. Әле лә хәтеремдә: ҡаҙаҡ ҡылҡумыҙсыһы килгән йылында уҡ филармонияла ҙур концерт ойошторҙо. Шунда мине лә саҡырҙылар, ҡыл-ҡумыҙҙа оркестрға ҡушылып уйнаным. Тәьҫораттарым шул тиклем көслө булды, Ҡаҙағстандың билдәле педагогы Ҡондоҙ Жаппас ҡыҙы Каламбаеваның маҡтау һүҙҙәре киләсәккә онотолмаҫлыҡ көс бирҙе, ҡыл-ҡумыҙҙы юлға һалған кешенең әйткәне күңелгә май булып яғылды, тимәк, мин дөрөҫ юлдан барам, тигән ышанысым артты. Ҙур, фәһемле һөйләшеүҙәрҙән ҙур ҡәнәғәтлек тойғоһо кисереп, дәртләнеп ҡайттым.

### Ҡояш Көнсығышта сыға

Минең өсөн йәшәү көрәшкә тиң, һәр саҡ байраҡ тотоп алдан барыуҙы хуш күрәм, арттан бысаҡ ҡаҙаһалар ҙа, һуғылһамбәрелһәм дә, төп уйымдан, эшемдән ситләшмәйем. Асҡар музыка мәктәбендә 12 балаға бер ҡыл-ҡумыҙ булған хәлдә лә, тарһынманыҡ, бер инструмент менән шөғөлләнделәр, уларҙы, яйлап, виолончелдән милли музыка ҡоралыбыҙға күсерә башланым. Балаларға халыҡ йырҙары оҡшай. Уларға йырҙың тарихын, легендаһын һөйләйем, тыуған ерлеген аңлатам. Ә өҫтән төшөрөлгән программала Бах, Бетховен, Моцарт ҡаралған, башҡорт көйҙәре бөтөнләй уйналмай. Күрәһең, баш бирмәү холҡом бала саҡтан киләлер. Өфөлә музыка мәктәбендә уҡыған саҡта уҡ виолончелдә башҡортса уйнарға теләгемде белдерҙем. Шул хәтлем "Асылыҡай буйы" йырын уйнағым килә ине. Һеҙ иң тәүҙә классик көйҙәрҙе уйнарға тейеш, тип, һуҙып килеп, өсөнсө йыл уҡығанда ғына рөхсәт иттеләр. ***Йөҙөмдө Көнбайыштан Көнсығышҡа борҙом. Асҡар музыка мәктәбендә эшләй башлағас, бала саҡтан оҙатып килгән теләгемде тормошҡа ашырыу өсөн мөмкинлектәр киңәйҙе, уҡыусыларымдан тик башҡорт көйҙәрен, халыҡ йырҙарын, эстрадаһын уйната башланым, төрлө жанрҙағы әҫәрҙәр ярҙамында балаларҙың һәләттәрен асыу мәғәнәлерәк икәнен аңланым.***

### Ғүмерлек дуҫ

Мин балаларҙы бер ваҡытта ла һәләтенә, ғаилә хәленә ҡарап һайлап алманым, кем ихлас теләк менән килә, рәхим ит, иң мөһиме, урам буйлап эт һуғарып йөрөмәһендәр. Һәләттәре булмағандарға, әлбиттә, бик күп көс һалырға тура килә. Аңлағандар оҙаҡ йылдар үткәс булһа ла рәхмәт әйтәләр. 90-сы йылдарҙағы тәүге сығарылышымдан булған бер уҡыусым, әгәр һеҙ шул осорҙа мине музыка менән шөғөлләнеүгә ылыҡтырмаһағыҙ, мин күптән ер аҫтында булыр инем, тине. Сөнки уның ата-әсәһе эсә ине, аҙаҡ бер нисә туғаны эсеп үлде. ***Музыка мәктәбе - ул эстетик яҡтан, матурлыҡ яғынан ҙур тәрбиәүи мәктәп, бында балаларҙың холоҡтары формалаша. 40 йыл эсендәге күҙәтеүҙәремдән сығып әйтә алам: беҙҙең мәктәпте тамамлаған балалар баштарын ғорур тотоп йөрөйҙәр, бер ваҡытта ла төшөнкөлөккә бирелмәйҙәр, сөнки уларҙың музыка ҡоралы тип аталған күңел торошон үҫтереүсе ғүмерлек дуҫы, терәге бар.***

### Беренсе халыҡ-ара ҡыл-ҡумыҙсылар конкурсы

Ҡыл-ҡумыҙ буйынса уҡытыуыма ун йыл булғас, ошо йүнәлештә конкурс үткәрергә ваҡыт етте, тип уйлай башланым, сөнки беҙҙә республикала ғына түгел, сит өлкәләрҙә лә яҡшы беләләр. Быйыл ғына 26 уҡыусым лауреат исеме алды! Ғүмер буйы эшләп тә, бындай һөҙөмтәгә ирешмәгәндәр бар. Силәбелә булған шундай бер конкурсҡа ҡаҙаҡтар ҙа килгәйне. Улар беҙгә башҡорт көйҙәрен бүләк итегеҙ, тиҙәр. Ә беҙҙә әлегә тиклем ҡыл-ҡумыҙға яраҡлаштырылып нотаға һалынған китаптар юҡ, конкурста ҡатнашҡан балаларҙың һәләтенә ҡарап, үҙем яҙам. Шуға һөйләшеүебеҙ вәғәҙәнән ары китмәне. Арҡайымда үткән конкурста ла ҡыҙҙарым беренсе урын алды. Шунда килгән ҡаҙаҡтар, иҫләйһегеҙме, һеҙ беҙҙе Башҡортостанға саҡырғайнығыҙ, тиҙәр. Тоттом да, килегеҙ, тиҙҙән беҙ конкурс иғлан итәбеҙ, тинем.

Әйтеүен әйттем, әммә оҙағыраҡ көтөргә тура килде. Былар ураған һайын шылтыраталар, Положениеғыҙ әҙерме, ҡасан була, тип төбәшәләр. Йөрәгемә урын тапмай йөрөй торғас, иң тәүҙә ирем Радмирға, йәшем үтеп бара, уҡыусыларым да байтаҡ булып китте, ҡыл-ҡумыҙ буйынса асыҡ конкурс үткәрәм, тип әйттем һәм август айына планлаштырып та ҡуйҙым. Тик идеямды урындағылар, нимәгә кәрәк ул, тип, хупламаны. Һеҙгә кәрәкмәйҙер ҙә, әммә мин асыҡ беләм: әгәр туҡтаһам, ҡыл-ҡумыҙға бағышлаған ғүмеремдең мәғәнәһе булмаясаҡ, тинем һәм яңы эшкә тотондом.

Иң тәүҙә элекке уҡыусыларым менән бәйләнешкә сыҡтым, бөтәһе лә ҡушҡуллап риза. Яңы конкурсты нисек атарға, тигән һорау тыуҙы. Ҡайҙан килгәндер, белмәйем, башыма "Заман сыңы" тигән исем инеп ояланы. Хәҙер иң ауыры - финанс мәсьәләһен хәл итеү кәрәк ине. Ҡатнашыусылар булмай ҡуйһа, тип, 15 уҡыусымды әҙерләй башланым, ике ансамбль төҙөнөк. Хафалар бушҡа булған, Ҡаҙағстандан хәбәр килеп етте. Өфөгә республика халыҡ ижады үҙәгенә шылтырата һалдым. Эштәр яйға китте, Үҙәктең генераль директоры Салауат Илгиз улы Кирәев, үҙем барам, яҡшылап әҙерләнегеҙ, тип, хатта ярҙамсы тәғәйенләп ҡуйҙы. Жюри рәйесе итеп мине тәҡдим итеүҙәренән баш тарттым, сөнки конкурста ҡатнашыусылар араһында күпселеге минең уҡыусыларым. Балаларымдың ата-әсәләренә рәхмәт, улар ҙа ең һыҙғанып ярҙам иттеләр. Камил Вәлиев исемендәге Сибай сәнғәт колледжы директоры Дилә Йомабай ҡыҙы Фәттәхова ярҙам йөҙөнән концертмейстер ебәрҙе - Хоҙай Тәғәлә бар ул!

Ни булһа ла, асыҡ конкурс (ҡаҙаҡтар килеүен иҫәпкә алғанда, халыҡ-ара конкурс тиергә лә була) юғары кимәлдә үтеп китте. Был сараны һис шикләнеүһеҙ Беренсе халыҡ-ара ҡыл-ҡумыҙсылар конкурсы тип атарға була! Төрлө ҡалаларҙан килгән махсус музыка мәктәптәре уҡыусылары менән беҙҙең Асҡар музыка мәктәбе балалары ҡатнашыуы күп нәмә тураһында һөйләй. Тимәк, беҙҙең балаларҙың кимәле юғары! Ҡайҙан ишеткәндәрҙер, Башҡортостан юлдаш телевидениеһының "Бәхетнамә" тапшырыуынан ҡыл-ҡумыҙ конкурсы тураһында тапшырыу эшләргә саҡырып шылтыраттылар. Үкенес, уҡыусыларымды алып барырға мөмкинселек юҡ ине, улар төрлө ял лагерҙарына таралышып бөткәйне.

### Бала күңеле далала

Шау-шыулы ваҡиғалар артта ҡалды, тынысландым. Бер көн шулай мәктәпкә килдем дә, ҡулымды йыуып торам. Әллә нисек ҡапыл, ҡылт итеп, әллә ниндәй уйҙар солғап алды: минең бында һөлдәм йөрөй, ә күңелем бында түгел бит. Ни булды миңә, әллә пенсияға китер ваҡыт еткәнгә шулаймы? Бында эшләгән һымаҡ түгелмен. Класҡа индем, бар нәмә ят һымаҡ. 40 йыл бында эшләнең, булды, етте, бар, ял ит, тип уйлайым. Стенала эленеп торған ҡыл-ҡумыҙ ҡабат яңғырамаҫ микән? Йөрәккә ҡыйын булып китте. Фейерверк һымаҡ конкурс үтеп китте, салют бөттө, эшмәкәрлегеңде туҡтат, тип уйланым.

Шулайын-шулай, әммә күңелде алдап булмай: отпускаға киттем. 6 июлдә сығыш яһарға, тип, телевидениенан саҡырыу килде. Тапшырыуҙан һуң, Салауат Юлаевты күрәйем, тип, Ағиҙел ярына ашыҡтым. Эргәмә таныш түгел бер машина туҡтаны ла, сигнал бирҙе. Аптырап киттем. Өфө сәнғәт училищеһының предмет-цикл комиссияһы мөдире икән. Әйҙә, ултырығыҙ, ти. Юҡ, мин ҡайтырға ашығам, тим. Ҡыҫҡаһы, ул мине өгөтләп тиерлек сәнғәт училищеһына алып китте. Эшкә саҡырҙылар. Беҙ һеҙҙе 90-сы йылдарҙан уҡ көтәбеҙ, етер һаман да район кимәлендә эшләргә, һеҙ беҙгә бик кәрәкһегеҙ, тине директор. Телһеҙ ҡалдым. Ярай, уйлармын, тигән булдым. Ике сәғәт буйы һөйләштек, күҙҙе лә астырмайҙар. Ахырҙа, беренсенән, мин отпускала, ирем, ғаиләм бар, тип ҡырталашып ҡараным. Эшкә алабыҙ, тип аныҡ шарт ҡуйҙылар.

Ҡайтып, иремә әйткәйнем, ул, оҙаҡ та уйлап тормай, "Бар, бында ыҙалап йөрөмә", - тине. Һүҙ шуның менән бөттө, балалар, ейән-ейәнсәрҙәр килде, йәй башланды. Өйҙә ҡабат был мәсьәләне күтәрмәнем. Көҙ етеп, эшкә сыҡтыҡ. Бер көн Өфөнән шылтыраталар. Һеҙ ҡайҙа? Асҡарҙа. Тиҙ арала килеп етегеҙ, беҙ һеҙҙе эшкә алдыҡ, тиҙәр. Шулай, күҙемде йомоп та өлгөрмәнем, Өфө сәнғәт училищеһында эш башланым. Бер йыл булды инде эшләүемә. Вахта ысулы менән өс көнгә йөрөп эшләйем, бында ярты ставкам ҡалды. Әлегә шулай, сөнки бында үҙем менән бергә ҙурайған балалар коллективым бар. Минең өсөн улар иңиндәр! Нисек итеп уларҙы ташлап китәһең?

### Кәрәкле булыу - ҙур бәхет

***Әле беҙҙә профессиональ ҡыл-ҡумыҙсылар бармаҡ менән һанарлыҡ, төп эшебеҙ энтузиазм кимәлендә бара. Сәнғәт училищеһын бөткән ҡыҙҙарыбыҙ республиканың милли оркестрында уйнай, скрипка класы буйынса уҡып бөткән ҡайһы берҙәре ҡыл-ҡумыҙға күсте, сөнки уның перспективалы, көн талабына тап килгән инструмент булыуын аңлайҙар. Ул ғына ла түгел, халҡыбыҙ генетик хәтере менән ҡыл-ҡумыҙҙы яҡыныраҡ күрә.*** Екатеринбург, Сибай, Белорет, Күмертау, Өфө, Силәбе, Магнитогорск, Ҡаҙан ҡалаларында сығыш яһап, бик күп тапҡыр лауреат исемен яуланыҡ һәм ике тапҡыр Гран-при алырға өлгәштек, ансамбль менән иҫтәлекле, бик мәртәбәле фестивалдәрҙә лә ҡатнаштыҡ. Роберт Юлдашев ойошторған "Музыка ветра" фестивале үҙе ни тора! Урал аръяғында беҙҙе яҡшы беләләр, үҙебеҙҙе танытып бөттөк. Эшләнгән эштәр һанап бөткөһөҙ, тик уҡытыусыларыбыҙ юҡ. Аңлайым, был юлға осраҡлы кешеләр килә алмай, сөнки ҡыл-ҡумыҙ мәктәбе - юғары сәнғәт төрө. Коллегаларым өсөн кәрәкле булыуыма ҡыуанам, был - ҙур бәхет.

### Скрипканың атаһы

***Донъя кимәленә сыҡҡандай ҡыл-ҡумыҙсыны әҙерләү өсөн шул кимәлдәге музыка ҡоралы кәрәк. Беҙгә әле тауыш сифатын яҡшыртыу өҫтөндә эшләргә лә эшләргә. Хатта республиканан ситкә сығыр өсөн дә зыңғырлап торған инструмент кәрәк. Ҡыл-ҡумыҙсыларҙы бергә ойоштороу ҙа ҙур мәсьәлә, әле беҙ тарҡаубыҙ, һәр кем үҙ ҡаҙанында ҡайнай, төрлө конкурстарҙа осрашыуҙан ары китә алмайбыҙ, берҙәмлек юҡ. Ойошма төҙөү өсөн тағы бер Миңлегөл кәрәк, мин яңғыҙым өлгөрә алмайым.***

Татарстанға конкурсҡа барғанда ҡыл-ҡумыҙҙа уйнағайныҡ, ҙур эш хаҡы, фатир тәҡдим итеп, үҙҙәренә эшкә саҡырып, өгөтләп, артыбыҙҙан йүгереп йөрөйҙәр. Белеүемсә, улар ете ҡыл-ҡумыҙ эшләтеп алған, беҙҙең ҡыҙҙарҙы үҙҙәренә ҡоҙалай башлауҙары бик тә ихтимал. ***Магнитогорск ҡалаһында үткән башҡорт һәм татар ҡылҡумыҙсыларының конкурсында китап бүләк иттеләр. Тышында башҡорт милли кейемендәге ҡыҙ тора, ә эсендә татарса яҙылған. Үҙҙәренең милли кейеме тип беҙҙекен ҡуйғандар.*** Бөгөнгөләй, музыка мәктәптәренән сыҡмай ултырһаҡ, беҙҙе белмәйәсәктәр. Бына миңә балалар ун бер ауылдан йөрөп уҡый, бер дәрес ҡалдырғандары юҡ. Үҙҙәре инструмент һатып алалар. Оҫтабыҙ Гөлнурға алдан заявка бирәләр, ә ул өлгөрә алмай, ике-өс ай, бер йыл көтөргә тура килә. Ҡурай ҙа ваҡытында популярлаштырыу өсөн шул юлды үтте, нығынды. Хәҙер ул республикабыҙ гербында тора. ***Ҡыл-ҡумыҙ тулғаҡ тотоп, яйлап, ыҙылай-ыҙалай тыуып килә. Мин уны шундай бала һымаҡ күрәм. Беҙгә башҡорт ҡыл-ҡумыҙының тарихын өйрәнергә, уйнау оҫталығын фән кимәленә күтәрергә кәрәк. Башҡорт талантһыҙ булмаған, төркиҙәрҙең иң олоһо беҙ, скрипканың атаһы булған ҡыл-ҡумыҙ иң алда беҙҙә эшләнгәненә иманым камил.***

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Был донъяға һәр беребеҙ үҙ бурысы менән килә. Кемдер уны артығы менән ҡайтара, кемдер бурыслы булып баҡыйлыҡҡа күсә. Әгәр һин үҙ юлыңда йәшәү маҡсатыңды аңламаусыларға юлығаһың икән, уларға асыуланмаҫҡа кәрәк, тимәк, уларҙың бурыстары түбәнерәк... Был донъяла бер нәмә лә осраҡлы түгел!**

**Радик ӨМӨТҠУЖИН яҙып алды.**

*✔ Хайуандар кешегә хеҙмәт итер өсөн, уны ашатыр, кейендерер өсөн тәғәйенләнгән йән эйәләре тигән фекер менән йәшәй инем мин ул саҡта. Ә бит Алаҡай беҙгә егерме йыл самаһы хеҙмәт итте, әллә нисә мең биҙрә һөтөн бирҙе.*





# ИСЕМЕМ - АЛАҠАЙ

Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ

(Донъяуи хикәйә)

Йәшәй башланыҡ Ҡолсора ауылында. Миңә ауыл бик оҡшаны. Ни өсөн, тип һораһағыҙ, әйтәйем. Беренсенән, ауылдың ултырған урыны матур ине. Муллаҡайҙың тирә-яғы ҡола яланға әйләнгән булһа, Ҡолсораның аръяғы таллыҡҡа һәм муйыллыҡҡа күмелгән ине. Икенсенән, йортобоҙ ҙа оҡшаны. Уны атайым Үмәр олатайҙан мең һумға һатып алғайны. Бәләкәй генә булһа ла, ул туп-тура ултыра ине. Муллаҡайҙағы ҡаҙна йорто, иҫке булғанлыҡтан, Һаҡмар яғына ауышыбыраҡ ултырҙы, шуға мин унда, ҡолап китмәһен тип, хәүефләнеберәк йәшәй торғайным. Өсөнсөнән, Ҡолсора халҡы бик оҡшаны миңә. Тыныс, мөләйем һәм киң күңелле кешеләр булып сыҡты яңы ауылдаштарым.

Бөтәбеҙ ҙә ҡәнәғәтбеҙ, тик атайым менән Алаҡай ғына ерһенә алмай бит яңы урынды. Атайым күңелһеҙләнә, әллә ниндәй уйҙарға сумып йөрөй. Ә Алаҡай Ҡолсора көтөүен һанға ла һуҡмай. Мал менән дә аралашмай, көтөүҙән ситтәрәк, яңғыҙы ғына йөрөүҙе хуп күрә. Ике-өс көн шулай йөрөнө лә ғәйеп булды. Муллаҡайға ҡасып ҡайтып киткән икән. Ҡулына арҡан тотоп, атайым китте уның артынан. Ала һыйыр менән улар ҡыҙыл эңерҙә генә ҡайтып инделәр. Алаҡай ҡаршылашмайынса һарайға инеп китте, атайым өндәшмәй генә өйгә инеп бикләнде. Әсәйемдең һораулы ҡарашына бер һүҙ ҙә әйтмәне, ҡулын ғына һелтәп ҡуйҙы.

Ярты сәғәт самаһы үткәс, төпкө бүлмәгә инһәм, атайым кәкерәйеп карауатта ултыра, эргәһендә әсәйемдең эйелгән кәүҙәһе күренә. Өҫтәлдәге үтә күренмәле һауытта атайымдың быяла күҙе ята. Йөрәгемде телгеләгәне шул булды: атайымдың һау күҙе ҡоп-ҡоро, ә һуғышта зәғифләнгән күҙенән сорлап йәш аға. Унның илағанын мин тәүге тапҡыр күрҙем. Икенсе тапҡыр илағандан һуң, мәңгелеккә Ҡыҙҙар тауы итәгендәге зыяратҡа инеп ятты ул.

Алаҡайҙың тәүге ҡасып ҡайтыуы булды был. Аҙаҡ муллаҡайҙар унын ҡайтыуы хаҡында ғәжәпләнеп һөйләне. Төшкә табан Ҡолсора юлынан ауылға Алаҡай юртып килеп инә. Ғәҙәттәгесә, башын юғары тотоп, ауылдың бер осонан икенсе осона бәйге аты кеүек юртып үтә ул. Ун алты йыл ғүмере үткән йортона килеп еткәс: "Ҡапҡаны асығыҙ!" - тигәндәй, унын алдында мөңрәп тора. Асыусы булмағас, ҡапҡаға алғы тояҡтары менән туҡылдата. Бесәй иркәләнгәндә аяҡҡа нисек уралһа, Алаҡай ҙа, ҡапҡа бағанаһына шулай уралып-уралып ышҡына. Инә алмаҫын белгәс, ҡапҡа эргәһенә оҙаҡ итеп кесе ярау итә лә китә үҙенең көтөүенә. Малҡайҙарҙы күргәс, алыҫтан уҡ һағынышлы тауыш менән өс мәртәбә мөңрәп, йәш башмаҡ шикелле ҡойроҡтарын күтәреп, көтөү тупланған урынды әйләнеп сыға. Шунан һуң ғына, бер нәмә лә булмағандай, утларға керешә. Һыулауға туҡтағас, иң яҡын күргән һыйырҙарына нимәлер һөйләгәндәй, башын туҡтауһыҙ сайҡай, мороно менән уларҙың башына ышҡына, күҙҙәрен ялай. Кискә табан, атайым килә яҡҡанды күреп, торған урынында шып туҡтай, мөгөҙөнә элмәк һалдыра һәм, тартҡылашмайынса, яҙмышы ҡушҡан яҡҡа китә.

Алаҡай Ҡолсораны барыбер ерһенмәне: ҡасты ла ҡайтты, ҡасты ла ҡайтты. Көтөүсегә лә әйтеп ҡараныҡ, сиратлап үҙебеҙ ҙә көтөштөк - файҙа булманы. Көс-хәл менән ҡышты еткереп, ниһайәт, ҡураға бикләнек. Өс йыл шулай интеккәндән һуң, Алаҡай менән мәңгелеккә хушлашырға тура килде. Уға ун туғыҙ йәш ине ул саҡта, миңә - ун дүрт. Ул йылда ике ағайым Сибайға имтихан тапшырырға китте, шуға өйҙә иң өлкән бала булып мин ҡалдым.

Алаҡай менән айырылышҡан шул йәйҙе, шул йәйҙең ошо хәүефле кисен мәңге онотасаҡ түгелмен мин. Сәбәбе шунда: ғаиләбеҙ тормошонда шуға тиклем көн булһа, ошонан һуң төн төштө. Төнгә эйәреп, юғалтыуҙар, күҙ йәштәре һәм ҡайғы килде.

Йәйге томра кис ине. Атайым менән әсәйем, бер-береһенең күҙҙәренә ҡарамай, ара-тирә низағлашып, нимәгәлер әҙерләнә башланы. Миндә ни өсөндөр хәүефләнеү тойғоһо уянды. Ҡулымды кеҫәгә тыҡһам, бәләкәй генә түңәрәк көҙгөм ҡап урталай ярылып ята. Мин уны ай ярым элек кенә Иҫке Собханғол ауылының кәпрәтендә һатып алғайным. Йәй башында беҙ, мәктәптең тиҫтәләгән уҡыусыһы, Сабур ағай етәкслегендә Шүлгәнташ мәмерйәһен күрергә барғайныҡ. Шунда Иҫке Собханғол ауылына ла һуғылып үткәйнек. Көҙгөнө мин шунда алғайным.

Атайым, йылы тип тормай, башына һоро кәләпүшен батыра кейеп алды. Әҙерәк аптырап торғандай итте лә ҡара еләнен дә кейҙе, өс төймәһен дә ҡаты итеп эләктерҙе. "Һин ошоно тотоп барырһың", - тип ҡулыма башбармаҡ йыуанлығындағы ҡыҫҡа ғына һуйыл тотторҙо һәм үҙе һарайға инеп китте. Бер аҙҙан ҡапҡа шығырлап асылды, һәм унан, Алаҡайҙы етәкләп, атайым килеп сыҡты. Улар ихата уртаһына еткәйне, аласыҡтың ишегендә әсәйемдең бөкөрәйгән һыны күренде. Ул һыйырға яҡынланы, арҡаһынан һыйпарға теләгәндәй, ҡулын һуҙҙы. Быға яуап итеп, Алаҡай ҡойроғо менән арҡаһына шундай ныҡ итеп һуҡты - әсәйем ҡурҡышынан ҡулын кире тартып алғанын һиҙмәй ҙә ҡалды. Ауыҙы эсенән наҙлы итеп нимәлер мыңғырлай башлағайны, Алаҡай "фу-у-у" тигәнерәк ауаз сығарҙы һәм башын асыулы сайҡап ҡуйҙы. Шунан башын ғорур итеп күтәрҙе лә ҡатып ҡалды. "Ҡайҙа?" - тип һораным мин атайымдан. "Бәләкәй Иҙрескә". "Нишләп?" "Иткә тапшырабыҙ".

Был һүҙҙәр миңә ауыр тәьҫир итте, миндә Алаҡайға ҡарата йәлләү тойғоһо уянды, күҙҙәремә йәш тулды, тиһәм, ялғанлау булыр ине. Миндә бер ниндәй хис тә, тойғо ла уянманы. Бер ниндәй ҙә! Хайуандар кешегә хеҙмәт итер өсөн, уны ашатыр, кейендерер өсөн тәғәйенләнгән йән эйәләре тигән фекер менән йәшәй инем мин ул саҡта. Ә бит Алаҡай беҙгә егерме йыл самаһы хеҙмәт итте, әллә нисә мең биҙрә һөтөн бирҙе. Ете бала шунын һөтөн эсте, ойотҡанын һемерҙе, майын ашаны. Йыл һайын Алаҡайҙың берәр улын үҫтереп, һуғымға һуйып, ит итеп ашап торҙоҡ. Дөрөҫөн әйткәндә, тәндәребеҙҙең, һөйәктәребеҙҙең һәр күҙәнәгендә ала һыйырҙың бәләкәй генә булһа ла өлөшсәһе бар ине. Әсәйебеҙҙең күкрәк һөтөнән генә көс йыйманыҡ, шул һыйырҙың елененән дә һурҙыҡ беҙ ҡеүәтте. Ә мин, ир етеп килгән егет, шул турала уйлап та ҡарамағанмын. Ниндәй хурлыҡ, ниндәй һуҡырлыҡ!

Атайым менән әсәйемдең рух күҙҙәре һуҡырайҙы шул йәйҙә, ә беҙ, уларҙың ҙурайған балалары, аңра икәнебеҙҙе таныттыҡ. Ҡуян өләсәйем менән олатайым белеп ҡалһа, аҡыл өйрәтерҙәр ине, әлбиттә, әммә улар белмәй ҙә ҡалды шул был хәлде.

Ала һыйырҙы, йәше олоғайһа ла, аҙаҡҡа саҡлы аҫырарға кәрәк булған беҙгә. Үлгәс, рәхмәттәр әйтеп, хөрмәтләп ерләр инек.

Йәки, ғәфү үтенеп, үҙебеҙгә һуйып ашарға кәрәк булғандыр. Әммә атайым менән әсәйем, был итте ашай алмаҫбыҙ, тип уйлағандарҙыр, ахырыһы.

Һис юғында, һуйып, баҙарға алып барып һатырға ла мөмкин ине.

Һатырға мөмкинлек юҡ икән, һуйып әҙерләүсегә тапшырыу ҙа үтә насар булмаҫ ине.

Атайым шул һуйыуҙан ҡасырға ынтылғандыр, тип уйлайым мин бөгөн. Унын төп хатаһы ана шунда.

Ауыр хәлдән сығыуҙың еңел юлын эҙләп, тереләй иткә тапшырыуҙы яҡшыраҡ күргәндер инде.

Үҙ ҡулы менән салып, итен иткә биргән хәлдә лә Алаҡай былай уҡ рәнйемәҫ ине.

Уны аҙағыраҡ тимер ҡорамалдар аяуһыҙ өҙгөсләгәндер, ә ул әсе күҙ йәштәрен түккәндер. Беҙҙе һәм беҙҙең йөҙөбөҙҙә бөтә кешеләрҙе намыҫһыҙлығы һәм оятһыҙлығы өсөн ҡәһәрләгәндер. Өҙгөсләнер алдынан эскән итселәр унын башына ауыр сүкеш менән һуҡҡандыр. Матур тиреһен тупаҫ ҡулдар арлыбирле һыҙырып алғандыр. Нәзәкәтле мөгөҙкәйҙәрен, бысҡы менән ҡырҡып, хәшәрәтләнеп бөткән иҙәнгә быраҡтырғандарҙыр. Әле ҡыбырлап ятҡан янбашҡыналарын тимер бысаҡтар тураҡлай ҙа башлағандыр.

Алаҡайҙың рәнйергә хаҡы булғандыр.

Шул шомло кистең бөтә ваҡиғалары ла бөгөнгөләй күҙ алдымда минең. Эңер ҡапыл төштө ул кистә. Шыйыҡса кеүек сәйер булып төштө ул: кешеләрҙе, йорттарҙы, тауҙарҙы ҡосағына кинәт кенә алды. Алды ла ҡыҫҡан кеүек итте. Ауыҙ-ҡолаҡтарға тулды, күҙҙәрҙе томаланы. Атайым, Алаҡай һәм мин мәсет эргәһенә килеп етеүгә бөтә ер өҫтөн һорғолт ҡараңғылыҡ солғап алғайны. Бер аҙ барғайныҡ, зыярат яғынан һыҙғырған кеүегерәк тауыш ишетелде. Ҡараһам, һалам, ҡағыҙ, сепрәк осмоттарын зырлатып өйөрөлтөп, ҡойон етеп килә. Беҙҙең алдан үтеп китер алдынан унын бер осо күккә олғашты. Башымды күтәреп өҫкә ҡараным һәм бейектә-бейектә, бик бейектә, тиҫтәгә яҡын аҡ ҡағыҙ осмотонон саң араһында ҡайнашып йөрөгәнен күрҙем. Әллә ҡасан байыған ҡояштың һуңғы нурҙары ҡан төҫөнә буяғайны уларҙы...

Иҙрестә алама ғына йорттоң аҙбарына индереп ебәрҙек Алаҡайҙы. Бер кеше атайыма ҡапҡаны ябышты. Мин арттараҡ баҫып ҡарап ҡына торҙом. Алаҡай ҡәртәгә инде лә, үҙе кеүек үк өс-дүрт бисара хайуандың эргәһендә туҡтап тормайынса, төпкә үтте. Теге кеше өйгә инеп китте, ә атайым өс-дүрт һайғауҙан эшләнгән тәпәш ҡапҡа эргәһендә өндәшмәй оҙаҡ ҡына торҙо. Шунан унын ҡарлыҡҡанағыраҡ тауышы ишетелде: "Алаҡай... Алаҡай!" Һыйыр арты менән боролған көйө тороуын белде. "Алаҡай!" Атайымдың һуңғы һүҙе булды был.

Өйгә индек. Унда һүрән генә янған шәм яҡтыһында өс-дүрт кешенең башы күренә ине. Улар, бер-береһенә эйелеп, ҡыҫылған тауыш менән бәхәсләшә ине. "Юғары көрлөктә". "Юҡ, юҡ, бушты һөйләмә!" "Алайһа, урта көрлөктә, тип яҙ!" "Арығыраҡ бит әле" "Яҙ инде урта көрлөктә, тип!" "Ярар инде, яҙайым". "Күпменән була инде?" "Туҡһан өс тиндән ҡабул ителә". "Ҡалай әҙ!" "Дәүләт шулай ҡуша, башҡа сара юҡ". Бәхәсләшеүселәрҙең бер туҡтауһыҙ һелкенеп торған шәүләләренә ҡарап-ҡарап торҙом да уларҙы аҡса бүлешеп ултырған юлбаҫарҙарға оҡшатып ҡуйҙым.

Алаҡайҙы ла урта көрлөктәге мал иҫәбенә индерҙеләр, һәм өс йөҙгә яҡын аҡса менән ҡайтырға сыҡтыҡ. Иҙресте сыҡҡайныҡ ҡына, тома һуҡыр булдыҡ. Күк йөҙөн уртаға бүлеп, шундай йәшен йәшнәне - бөтә донъя бер аҙға зәңгәр яҡтылыҡҡа сумды.

Шунан, йөрәктәрҙе өшөтөрлөк итеп, күк күкрәне, әйтерһең, йәһәннәм арбаһынан ергә тотош ҡаялар емерелеп төштө, ер өҫтөнә суйын ҡаҙандар ауҙы. Мин шул тиклем ҡурҡтым, хатта атай тураһында ла оноттом. Уны яңғыҙын ҡалдырып, бар көсөмә Ҡолсора яғына йүгерҙем. Ауылға инде еттем тигәндә, Көнтөшмәҫ яғынан ниндәйҙер сәйер тауыштар ишетелде. "Топ"... "Туп"... "Шап"... "Шоп"... "Топ"... Йәй көнө шыйыҡ һыйыр тиҙәге ергә килеп бәрелгәндәге тауыштарҙы хәтерләтте улар миңә. Шул ваҡыт башыма ла бер йылы нәмә килеп төштө. Был ямғыр тамсыһы ине. Ул шундай ҙур булып сыҡты, әйтһәм, ышанмаҫһығыҙ, - минең йоҙроҡтай бар ине. Тамсы суңҡам тирәһенә бәрелде һәм төрлө яҡҡа сәсрәп китте. Бер өлөшө, елкә соҡоро буйлап ағып, умыртҡа бағанаһын буйынан буйына үтте һәм уң табанға тиклем барып етте.

Иҫ китмәле хәл! Әммә ул мәлдә ғәжәпләнеп торорға форсат булманы: Муллаҡай яғынан яҡынлашып килгән ҡойма ямғырҙың дәһшәтле тауышы ишетелде. Мәсеткә инде еттем тигәндә, шундай ямғыр башланды - күҙ асып йомғансы хатта ҡултыҡ аҫтында биш тин аҡса ҡуйырлыҡ та ҡоро урын ҡалманы. Көтмәгәндә арттан атайымдың тоноҡ ҡына тауышы ишетелде: "Улы-ым! Улы-ы-ы-ым! Мине ҡалдырма инде!" Мин артҡа боролоп ҡараным. Шул саҡта йәшен йәшнәне, һәм ҡыялатып яуған ямғырҙың аҡ пәрҙәһе үтә атайымдың бәләкәй генә һынын күреп ҡалдым. Ул башын түбән эйеп, аяҡтарын юғары күтәреп йүгерергә тырышҡан була, ә үҙе бер урында тапанған кеүек, сөнки аяҡтары бәкәлсәйенә етеп торған һыу ҡатыш мәтене иҙә ине.

**(Дауамы. Башы 38-41-сы һандарҙа).**

ФӘЛСӘФӘ ҺАТАБЫҘ!

**XVIII быуатта йәшәгән француз философтарынан иң күренеклеһе - Вольтер. Ул, монархия хөкөм һөргән илдә йәшәүенә ҡарамаҫтан, йәш сағынан уҡ деспотизмға ҡаршы сыға, һәм уның фәлсәфәүи һәм публицистик әҫәрҙәрендә, трагедияларында граждандарҙың ирекле йәшәй алыуы иң бөйөк идея рәүешендә сағылыш таба. 83 йыл дауам иткән ғүмерендә ул үҙен үҙ заманының иң талантлы аҡыл эйәһе итеп таныта, уның афоризмға әйләнгән фекерҙәре XXI быуатта ла актуаллеген һис юғалтмаған.**

# ТҮҘЕМЛЕ БУЛЫУҒА, ҺЫЙЫШЫП ЙӘШӘҮГӘ НИ ЕТӘ!



Вольтерҙың фәлсәфәүи мираҫын байҡап та, баһалап та бөткөһөҙ. Шәхсән үҙемә уның бик ябай ғына тойолған, әммә үтә фәһемле бер фекере оҡшаны. XVIII быуатта, донъяның цивилизациялы тип иҫәпләнгән илдәрендә социаль тигеҙһеҙлек тәбиғи ҡанун итеп ҡабул ителгәндә, ярлы-ябағаны аяуһыҙ эксплуатациялауҙан башҡа йәмғиәт һәм дәүләт тормошон күҙ алдына ла килтерә алмаған заманда, инквизиция "диндән яҙғандар"ҙы тереләй яндырған саҡтарҙа, яңы ерҙәргә һәм байлыҡтарға хужа булыу өсөн үлемесле һуғыштар барған дәүерҙә Вольтер граждандарҙың, улар ниндәй һәм кем генә булмаһын, бер-береһенә ҡарата түҙемле ҡараште була алыу идеяһын күтәреп сыға. ***"Мин һеҙҙең фекерҙәрегеҙ менән килешә алмауым мөмкин, әммә һеҙҙең уларҙы белдерә алыу хоҡуғығыҙ өсөн йәнемде фиҙа ҡылырға әҙермен", - быны философтың демократик кредоһы итеп ҡабул итеп була. Ниндәй бөйөк, гуманизм менән һуғарылған идея! Вольтер йәшәгән дәүерҙән 250 йылдан ашыу ваҡыт үтеп китһә лә, XXI быуат гуманистары уның ошо идеяһына нигеҙләнгән толерантлы йәмғиәт һәм дәүләт хаҡында хыяллаһып йәшәй.***

Кешелек тарихына байҡау яһаһаң, бер үтә негатив фекер тыуа: таш быуаттарынан башлап, хәҙерге заманға тиклем бер әҙәм балаһы икенсеһенең йәнен ҡыйыуҙан баш тартмай. Башҡа сәбәптәр менән бер рәттән, быны кеше психологияһының бик тә алама бер сифаты менән аңлатып була: башҡаларҙы сит-ят итеп ҡарап, уларҙың төҫ-баштары, телдәре, ғәҙәттәре, йолалары, инаныстары үҙҙәренекенән айырылып торғас, уларҙы ҡырағайлыҡта йә иһә дошманлыҡта ғәйепләп, януарҙарға тиңләп, ер йөҙөнән юҡ итеүҙе аҡлау. Әгәр йәмғиәттә ошондайыраҡ фекер-тәғлимәт өҫтөнлөк алһа, бер ҡәүемдең икенселәренә һөжүм итеүенә, талауына, ҡырып бөтөрөүенә йә иһә ҡоллоҡҡа дусар итеүенә юл асыҡ. Икенсе Бөтөн донъя һуғышын башлап ебәргән Германияла уҙған быуаттың 30-сы йылдарында расизм һәм нацизм дәүләт идеологияһына әйләнә, фашизм тәғлимәте немец халҡын иң юғары раса тип нарыҡлай, ә башҡа халыҡ вәкилдәренә "untermensch", йәғни етлекмәгән, түбән кеше ярлығы тағыла. Дәүләттәр араһында һуғыштар йыш булып торғанлығы тарихта теркәлеп ҡалған, әммә тик нацист пропагандаһы ғына башҡа ҡәүемдәрҙе ҡырағай хайуандарға тиңләй, уларҙы юҡ итергә өндәй. Немец халҡы аңында ошо кешелекһеҙ тәғлимәт үҙ урынын таба, зомбилаштырылған фашист армияһы һис бер ҡасан ғәфү ителмәҫлек енәйәттәр ҡыла.

Кешелекте XIX-XXI быуаттарҙа бихисап үлемесле һуғыштарға алып килгән фашизмдың социаль-психологик тамырҙары бик тәрәндә ята. Белеүебеҙсә, архаик замандарҙан бирле төрлө ҡәүемдәрҙең үҙҙәренә генә хас ҡараштары һәм дини инаныстары барлыҡҡа килә. Дөйөм алғанда, күп быуаттар кешеләрҙең рухи донъяһы мәжүсилек менән бәйле йолаларына, ғөрөф-ғәҙәттәренә ярашлы формалаша. Беҙҙең эраның I быуатында Ғайса бәйғәмбәр (Иисус Христос) христиан диненә нигеҙ һала, әммә Рим империяһы юлбашсылары был яңы динде ҡабул итмәй, шуға күрә тәүге христиандар дәүләт һәм йәмғиәт тарафынан төрлө эҙәрлекләүҙәргә дусар ителә, уларға ҡарата иң ғазаплы яза саралары ҡулланыла. Әлбиттә, бында дини түҙмәүсәнлектең асыҡтан-асыҡ факттарын күрмәү мөмкин түгел. Әммә байтаҡ быуаттар үтеп, Европала христиандарҙың католиктар сиркәүе өҫтөнлөк алғас, Рим папаларының фатихаһы менән мосолмандарға ҡаршы һуғыш походтары башлана. Улар тарихҡа тәре походтары исеме аҫтында инеп ҡалған, 1096 - 1204 йылдар дауамында Көнсығышҡа (Палестинаға) барлығы 9 тәре походы ойошторола. Көнбайыш Европа католиктары, христиан руханиҙарҙың ҡотҡоһона бирелеп, Ислам динен ҡабул итеүселәрҙе - мосолмандарҙы үҙҙәренең төп дошманы итеп күрә, уларҙы ҡырып бөтөрөргә ниәт ҡора. Күрәһегеҙ, урта быуаттар сәйәсәтендә дини ҡараштар буйынса түҙмәүсәнлек шул тиклем көсәйә, хатта ки был оҙайлы хәрби бәрелештәрҙең, дини һуғыштарҙың төп сәбәбенә әүерелә.

Урта быуаттарҙы иҫкә алғас, монгол юлбашсыһы Сынғыҙхан нигеҙ һалған Алтын Урҙа империяһы хаҡында ла әйтеп үтмәйенсә булмай. Әлбиттә, йыһангир полководецты һәм уның вариҫтарын бер нисек итеп тә кешелекле заттар рәтенә индереп булмай. Күп илдәргә яу асып, бихисап ҡәүемдәрҙе буйһондорған монгол ғәскәрҙәре, илбаҫарҙар булараҡ, бер кемде лә йәлләп тормаған: кем ҡаршылыҡ күрһәтә, шулар үлемгә дусар ителгән. ***Шул уҡ ваҡытта монголдарға хас бер феноменға иғтибар итмәй булмай: үҙҙәре мәжүсиҙәрҙән булһа ла, бөткөһөҙ яуҙар барышында христиан һәм мосолман руханиҙары тейелгеһеҙ булып, сиркәүҙәр һәм мәсеттәр таланмай, емертелмәй. Күрәһегеҙ, монгол юлбашсылары донъяуи маҡсаттарын ғәмәлгә ашырғанда халыҡтарҙың рухи ҡиммәттәренә ҡағылмаған, ошо йәһәттән түҙемле сәйәсәт алып барған. Монгол етәкселәре, тора-бара мосолмандарға хас әҙәп-йолаларҙы үҙ итеп, Ислам диненә ыңғай ҡарай башлай. 1313 - 1341 йылдарҙа Алтын Урҙа хакимы булған Үзбәк хан (мосолманса исеме - Солтан Ғийас ад-Дин Мөхәммәд) Ислам динен дәүләт дине итеп иғлан итә.***

Түҙемле булыу һәр бер кешенең йәшәйешенә ыңғай тәьҫир итеүсе сифаттарҙан. Ислам динендә лә мосолман кешеһенән сабырлыҡ талап ителә. Халҡыбыҙ ҙа "Түҙгәнгә - түш ите", тип юҡҡа ғына әйтмәгәндер. Сабыр иткән - моратына еткән, тип тә әйтәбеҙ бит. Бында һүҙ фани донъя хәлдәренә вайымһыҙ ҡалыу тураһында түгел, ә иңеңә төшкән ауырлыҡтарҙы, бәлә-ҡазаларҙы сәбәләнмәй-ыңғырашмай, бар донъяға яр һалмай ғына үтә алыу хаҡында бара. ***Сабыр күңелле, кеше йәнле, түҙемле кешеләр бер ваҡытта ла үҙҙәренең уңышһыҙлыҡтарының, хаталаныуҙарының сәбәбен икенсе бер кешеләрҙең хилафлығы менән аңлатмай. Улар һәр саҡта ла яҡын-тирәләгеләр менән һыйышып йәшәүҙе хуп күрә. Башҡа берәүҙе үҙеңдән кәм күреү, уның яҡшыраҡ йәшәүенә, уңыштарына көнләшеп ҡарау ҙа әҙәм балаһының күңелен ҡарайта, зиһенен тарайта.*** Йәһүдтәрҙең иң боронғо китабы булған Тәүратта Әҙәмдең тәүге улы Кабилдың (Каиндың) бер туғаны Хабилды (Авелды) нык көнләшеүе арҡаһында үлтереүе хаҡында бәйән ителә. Ҡара көнсөллөк башҡаларҙың уңышын ҡабул итә алмауҙан, кәмһенеүҙән, үҙеңдән юғарыраҡ баҫҡысҡа күтәрелгәндәрҙе яманлауҙан башлана.

Әйтергә кәрәк, фани донья үҙенең бөткөһөҙ талаптары, заманаларҙың ауыр йәшәү шарттары, бер-бер артлы тыуып торған низағ-конфликттары, ҡан ҡойошло һуғыштары, хәсрәт-ҡайғылары аша кешеләрҙе үтеп сыға алмаҫтай һынауҙарға дусар итә. Түҙемлегең етһә, йәшәйһең, киләсәгең яҡшыраҡ һәм яҡтыраҡ булыуына өмөт итәһең. Фәлсәфә күҙлегенән ҡараһаң, әҙәм балаһының яҡты донъяға килеүенән башлап, барса ғүмере бер парадоксаль ҡанунға буйһона: йәшәйештең матур, күңел ҡәнәғәтләнерлек, шатлыҡ-ҡыуанyслы мәлдәре менән бер рәттән, ауыр хис-кисерештәр, негатив уйҙар тыуҙырған, ҡайғы-ғазаптарға дусар иткән, йәнеңде өшөткән саҡтары ла булып тора.

**Шулай итеп, "Тыуымдан ҡалмағас, үлемдән дә ҡалып булмай", тиҙәр халыҡта. Яҡты донъяға тыуған сабый ата-әсәһенә һис бер бүҫкәрмәҫ шатлыҡ сығанағы булһа, ғәзиз яҡынының вафат булыуын һәр кем бик ауыр кисерә. Тап шундай тормош һынауҙарына дусар булғандарға беҙ сабырлыҡ теләйбеҙ, ҡайғы-хәсрәттәрен уртаҡлашабыҙ. Түҙемлеләр, сабырҙар донъя ауырлыҡтарына бирешмәй, сөнки улар үҙҙәре өсөн генә йәшәмәй, балалары, ейәндәре, туған-тыумасалары, дуҫ-иштәренә терәк-таяныс булып, алға ҡарап йәшәүҙе хуп күрә. Әгәр ҙә донъялыҡта, ябай ғаиләнән башлап, йәмғиәт һәм дәүләт кимәлендә кешеләр, милләттәр, дини конфессиялар һыйышып йәшәй алһа, һәр халыҡтың тарихына, мәҙәниәтенә, йолаларына, теленә ҡәҙер-хөрмәт күрһәтә алһа, гуманист-ғалимдарҙың ғилми хеҙмәттәрендә һүрәтләнгән толерантлы йәмғиәт матур хыял емеше генә булып ҡалмаҫ, тип өмөт итәйек.**

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**

БАЛАҢА УҠЫ!

# ҠАМҠА

Ҡыҙыл ҡанаттары ете ҡара нөктәләр менән биҙәлгән был бәләкәй генә бөжәкте (божья коровка) яҡшы беләһеҙҙер ул? Уны төрлө ерҙә төрлөсә исемләйҙәр. Алла бабай һыйыры, биҙәкле ҡуңыҙ, ҡояш апай, ҡыр һыйыры, сыбар һыйыр, ҡамҡа, ҡыҙыл ҡандала, ҡылайтун һәм башҡа бик күп исемдәр менән атаһалар ҙа, уның киң таралғаны - ҡамҡа булыр! Әгәр ҙә уны усыңа ултыртып: "Эй! Ҡамҡа,ҡамҡа! Осоп кит һауаларға! Икмәк әпкил балаларға!" - тип һамаҡлаһаң, ысынлап та, ҡанаттарын йәйеп, осоп та китә. Ҡайһы саҡта, үҙенең бөжәктәр эше менән осоп арыһа, ял итеп алыр өсөн, кемдеңдер кейеменә, йә ҡулына килеп ҡуныу осраҡтары ла була.

Уның ҡуныуын күптәр ҙур уңышҡа, ҡыуанысҡа юрай...

... Ҡасандыр, бииик борон заманда, бер ауылда баҡсалар үҫтергән, балыҡ тотоп, кейектәр аулап, ялан эштәрендә бил бөккән, өйөр-өйөр һыйыр һәм һарыҡ көтөүҙәрен аҫыраған бик тырыш кешеләр йәшәгән, ти Улар бер нәмәгә лә мохтажлыҡ кисермәгәндәр... Бер ваҡыт ошо ауыл кешеһе баҡсаһында тәпке менән түтәлдәрҙе тәпкеләп йөрөгәндә, уның яурынына ҡамҡа килеп ҡуна. Ул уны күреү менән ҡыуанып ҡысҡырып ебәрә: "Күрҙегеҙме? Миңә ҡамҡа үҙе килеп ултырҙы! Хәҙер мин иң уңышлы кеше буласаҡмын! Миңә бер нәмәгә лә борсолорға кәрәкмәй! Ул миңә бәхет алып килде!"

Уның һөйләнгәнен ҡамҡа иҫе китеп тыңлай. Был хәтлем һоҡланыу һәм шатланыуҙың сәбәбен аңламай: "Нимә тураһында һөйләй ул? Әгәр үҙең тырышлыҡ күрһәтмәһәң, хеҙмәт көсөңдө һалмаһаң, эш уңышлы була аламы икән?"

Теге кеше, шул мәлдән алып, бар булған эштәрен ташлай. Ҡый үләндәрен утауҙан туҡтай. Емеш ағастарының өлгөргән емештәрен дә йыймай, улар ергә төшөп серейҙәр. Көтөүҙәрен дә көтмәй башлай, иркенгә сығарып ебәрә. Уларын бүреләр тамаҡлап бөтөрә. Кәрәкмәгән ғөрөф-ғәҙәткә ышанып, барыһы ла яйға һалыныр, тигән ҡарарға килә. Әммә ул бар булған мөлкәтен юғалта.

Бер ваҡыт был бөжәк тағы ҡулына килеп ҡуна. Уны күреп ҡалған кеше нык асыулана һәм нәфрәтләнеп әрләргә тотона: "Тағы миңә килеп ҡундыңмы? Яуыз уйлы бөжәк! Мине һәләк итергә теләйһеңме? Һинең арҡанда былай ҙа бар байлығымдан яҙҙым!"

Арҡаһына биштәр аҫып үтеп барған сал сәсле ҡарт юлсы уның был һүҙҙәрен ишетеп ҡала. Таяғына таянып, уға ҡарап тора ла былай тип өндәшә: "Эй, кеше! Һиңә бер кәңәш бирәйемме? Кешеләрҙең уйлап сығарғандарына ышанып, үҙе генә башҡара торған эштәрен ташлағандар менән ни булыры билдәле инде! Был - үҙҙәрен йыуатыр өсөн уйлап сығарылған бер мәрәкә һәм алдашыу ғына! Бер ғәйебе булмаған бөжәкте үҙеңдең бәхетһеҙлектәреңдә ғәйепләү дөрөҫмө икән? Ялҡаулығыңды ташла, яңынан эштәреңә тотон! Тырышып эшлә! Аллаһу Тәғәлә һиңә уңыштарын да бирер!"

Кеше үҙенең мәғәнәһеҙ ҡыланышын аңлай. "Беҙҙең бәхетһеҙлектәр ялғанды дөрөҫлөк менән бутауҙан килеп сыға түгелме һуң?" - тигән фекергә килә.Ҡарт юлсының аҡыллы кәңәштәренә рәхмәт әйтеп, ҡамҡаны осороп ебәрә! "Төрлө билгеләргә ышаныу - күп Аллалыҡҡа ышаныуҙы белдерә", тиелә бит Хәҙистә лә.

**✓ Төрмәне бит бөтә тоҡомо менән үҙ йорто иткәндәр бар: атаһы ултыра, ике улы ултыра, ҡартатаһы ултырған. Беренсе тапҡыр ултырғандарҙы бына ошо кешеләрҙән айырым тотоу дөрөҫ булыр ине.**

ИНТЕРНЕТТАН



# КҮП ЙОҠЛАУ ЗЫЯНҒА

■ Оҙаҡ йоҡлау депрессияға, шәкәр диабетына һәм йөрәк сирҙәренә алып килә. Тәүлегенә 8 сәғәттән күберәк йоҡлаған өлкәндәр сәләмәтлегенә ҙур зыян килтерә тип иҫәпләй ғалимдар. Тәүлегенә 6 сәғәт йоҡлаусыларҙың ғүмере күпкә оҙайлыраҡ була, шуға ла йоҡоға бүленгән ваҡыт ошонан артмаҫҡа тейеш. Һынауҙар күрһәтеүенсә, йоҡларға яратыу шәкәр диабеты, депрессия, шулай уҡ йөрәк сирҙәрен булдыра.

■ Маракуйя - бик үҙенсәлекле тәмгә эйә емеш. Диетологтар билдәләүенсә, уның составындағы А һәм С витамины яман шештән һаҡлай. Был витаминдар күҙәнәктәргә зыян килтереүсе ирекле радикалдарҙы юҡҡа сығарыусы көслө антиоксиданттар булып иҫәпләнә. Калий күп булғанлыҡтан ул ҡан баҫымын төшөрә. Күҙҙәрҙең сәләмәтлеге өсөн дә файҙалы был емеш. Иң мөһиме, ул гемоглобинды күтәреү һәләтенә эйә.

■ Күрәгә менән өрөк файҙалы матдәләргә бик бай. Киптерелгән абрикостарҙың йөрәк мускулына яҡшы йоғонто яһауын аңлатырға була, уның составында калий күп. Күрәгәлә фосфор, тимер, кальций, каротин, B5 витамины бар, шуға ла ул яман шеш ауырыуҙарын булдырмай. Инжир шулай уҡ яман шештән һаҡлай, уны бронхит мәлендә ҡулланалар. Ҡара емеш ашҡаҙан-эсәк тракты эшмәкәрлегенә йоғонто яһай, ревматизм, бөйөр, бауыр ауырыуҙары яфалағанда тап ошо емеш ярҙамға килер. Ҡара емештәге А витамины күреү һәләтен яҡшырта.

■ Калифорния университеты ғалимдары кешене асыуҙан һаҡлай торған дарыу уйлап тапҡан. Уларҙың фекеренсә, күп енәйәтселәр енәйәт эшләгәндә нәфрәт тойғоһо кисерә. Берәүҙәрҙә был психик тайпылыштар менән бәйле булһа, икенселәр ҡыҙыу холоҡло һәм тиҙ ярһып барыусан. Бына тап ошо икенсе төркөмдәге кешеләр өсөн тәғәйенләнә лә инде был дарыу. Америка ғалимдары Паркинсон ауырыуын дауалай торған дарыуҙы ентекле өйрәнгәндән һуң, уларҙың баш мейеһенә үҙенсәлекле тәьҫир итеп, кешелә мәрхәмәтлек тойғолары уятыуға һәләтле икәнен асыҡлаған. Ғалимдар был дарыу ярҙамында ҡатмарлы психик ауырыуҙарҙы ла дауалап буласағына ышана.

■ Британияның "Класадо" фармацевтик компанияһы ҡыҙыҡлы тикшеренеүҙәр үткәргән. Һорау алыуҙарҙа ҡатнашыусы ҡатын-ҡыҙҙарҙың 53 проценты үҙҙәренә иғтибар йүнәлтеү өсөн ирҙәр ауырыуҙары тураһында арттырып һөйләй, тип уйлай. Ир-егеттәрҙең 80 проценты иһә үҙҙәренең ауырыуҙарының етдилегенә ышана. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ирҙәрҙә йөләү тойғоһо көслөрәк. Ауырыған саҡта ҡатын-ҡыҙҙарҙы бер аҙ йәлләһәң һәм ризыҡ әҙерләп ашатһаң, шул етә. Ә ир-егеттәр уларҙы кәрәкле дарыуҙар менән тәьмин итеүҙе, көнөнә өс тапҡыр яҡшы итеп ашатыуҙы көтә. Уларҙың 29 проценты ғына ауырыған саҡта яңғыҙ ҡалырға ярата.

■ Ғалимдар билдәләүенсә, тәбиғи рәүештә уяныу будильникка ҡарағанда күпкә яҡшыраҡ. Быныӊ өсөн бер үк ваҡытта йоҡларға ятып, бер үк ваҡытта торорға ғына кәрәк. Ә ҡапыл уяныу организм өсөн оло стресс. Будильникты һүндереп, тағы йоҡлап китеү шулай уҡ насар, сөнки йоҡлап китергә ярҙам итеүсе гормондар уянырға ярҙам итеүселәре менән буталып бөтә, ә бынан кеше үҙен тағы ла насарыраҡ тоясаҡ.

КҮҢЕЛҺЕҘ ТЕМА

# ЯҘМЫШМЫ? ЯҢЫЛЫШМЫ?

**Ҡырҡ йылдан ашыу ғүмеремде холоҡ төҙәтеү колонияһында эшләп үткәрҙем. Шул осорҙа төрлө сәбәптәр арҡаһында төрмәгә килеп эләккән кешеләр менән аралашырға тура килде һәм килә.**



### Төрмә кешене төҙәтәме?

Беренсе тапҡыр хөкөм ителеүселәр менән һөйләшкәндә уларҙың береһе лә үҙен ғәйепле тип әйтмәй, яҙаның дөрөҫ түгеллеген иҫбат итергә тырыша. Кемдер арҡаһында яңылышҡан, йәки шундай хәл килеп тыуған да, башҡаса эшләргә мөмкинлеге булмаған. Бер аҙ ваҡыт үтеп, яҡыныраҡ аралаша башлағас, улар асылып китә, ғәйепле икәндәрен дә таныйҙар, ғаиләһе, туғандары, балалары тураһында уйлауҙарын, борсолоуҙарын белдерәләр. Оҙаҡ йылдар эшләүҙә, әллә хөкөм ителеүселәр менән аралашыу һөҙөмтәһендәме, кешене төрмәгә бикләп ҡуйып ҡына төҙәтеп булмайҙыр, тигән һығымтаға килдем.

Ни өсөн шулай? Сөнки әҙәми зат, был системаға, мөхиткә килеп эләккәс, электән төрмәлә ултырғандарҙан яҡшы нәмәгә өйрәнә алмай. Мин бында ярты ғүмерен төрмәлә үткәргәндәр тураһында түгел, ә беренсе тапҡыр килеп эләккәндәр хаҡында һүҙ алып барам. Нисек кенә булмаһын, кеше тормошон еңеләйтергә, хөкөм ителеү ваҡытында нимә менәндер шөғөлләнеп, уны ауырлыҡһыҙ үткәреп ебәрергә тырыша. Әммә төрмәне бит бөтә тоҡомо менән үҙ йорто иткәндәр бар: атаһы ултыра, ике улы ултыра, ҡартатаһы ултырған. Беренсе тапҡыр ултырғандарҙы бына ошо кешеләрҙән айырым тотоу дөрөҫ булыр ине. Элек, завод-фабрикалар эшләгәндә, колониялар, килешеү төҙөп, заказдар алды, төрмәлә ултырыусыларҙың барыһын да хеҙмәткә йәлеп итте. Хәҙер элекке предприятиелар юҡ, шуға хөкөм ителеүселәр ҙә тулыһынса эшләмәй, буш ваҡыттары күп була. Ә эшһеҙ кеше ниндәйҙер шөғөл табырға тырыша.

Ғөмүмән, кеше алдаусылар, үлтереүселәр, көсләүселәр араһына килеп ингәс, ниндәй яҡшылыҡҡа өйрәнә ала ул? Өҫтәүенә, уны хөкүмәт ашатырға, кейендерергә, йоҡларға урын бирергә, дауаларға, мәктәптә уҡытырға, һөнәр бирергә бурыслы. Кеше бер нисә йылда әҙергә өйрәнеп китә, ирекккә сыҡҡас, донъяуи мәсьәләләрҙе нисек хәл итергә белмәй, аптырап ҡала һәм тағы енәйәт ҡыла. Һуңғы йылдарҙа ошо юлдан йөрөүселәрҙең күбәйеүе борсолдора.

Совет осоронда төрмә хеҙмәткәрҙәре, участковыйҙар, хакимиәт етәкселәре кеше төрмәнән сыҡмаҫ элек үк, ул ҡайҙа бара, эше буламы, тип, белешеп, тикшереп тора ине. Ә хәҙер һәр ойошмала шәхси хужа, төрмәлә ултырып сыҡҡандар уларға кәрәк түгел.

Уйлауымса, енәйәт ҡылғандарҙы бер нисә ай тикшереү изоляторында тотоп, кире ирекккә сығарһаң, яҡшыраҡ булмаҫ инеме икән? Был осраҡта ауыр енәйәт ҡылғандар тураһында һүҙ бармай. Сөнки полиция тарафынан ҡулға алынғас та, кешенең асылын ҡурҡыу тойғоһо, һәр нәмәгә шикләнеп ҡарау, бөтә яҡтан насарлыҡ көтөү биләй. Бәлки, уны енәйәтселәр донъяһына барып эләкмәҫ борон ҡотҡарырға кәрәктер? Был осраҡта файҙаһы күберәк булмаҫ инеме икән? Халыҡ араһында шундай әйтем дә йөрөй бит: кем төрмәне бер тапҡыр татыған, ул төрмәһеҙ йәшәй алмай...

### Балаң эләкмәһен...

Холоҡ төҙәтеү колонияһында үҫмерҙәр менән эшләгән осорҙа бер райондан 15-кә яҡын ауыр тәрбиәләнеүсе үҫмерҙе, фәһем алһындар, башҡаса тәртип боҙорға теләктәре тыумаһын, тип, хөкөм ителеүселәр тормошо менән таныштырырға беҙгә алып килделәр.

Колония начальнигы миңә тәрбиәләнеүселәр йәшәгән, уҡыған ерҙе, ашхананы, клубты, санчасте, карантинды күрһәтеп сығырға ҡушты. Балаларға, нисә отряд, тотҡонда күпме үҫмер йәшәй икәнен һөйләп, биләмә буйлап барабыҙ. Бына отрядҡа индек. Унда 120 малай йәшәй. Бөтә ер йыйыштырылған, таҙа, карауаттар бер рәткә теҙеп ҡуйылған, аҡ простынялар йәйелгән. Малайҙар эшкә киткән, отряд буш. Артабан клубҡа юлландыҡ, унда ла таҙалыҡ, тәртип, бер нисә малай инструментта уйнап ултыра. Биләмә буйлап үтә...

УҢЫШ ҠАҘАН

# УЙҘАР УҢЫШЛЫ БУЛҺЫН



Йәнде һәм тәнде өйрәнеүсе хәҙерге медицина кешенең уй-фекере уның тотош организмы физиологияһына йоғонто яһай икәненә шикләнмәй. Әгәр уйҙарығыҙ асыҡ түгел һәм һеҙ үҙ тәнегеҙҙә кире сигналдар ебәреп, уны зарарлы токсиндар менән тултыраһығыҙ икән, улар һеҙҙең эшмәкәрлегегеҙҙе һүлпәнәйтеү генә түгел, ғүмерегеҙҙе лә ҡыҫҡарта. "Мега Тормош" - үҙендә ыңғай ғәҙәт, сикләүҙәрһеҙ фекерләү тәрбиәләү һәләте. Ошо ғәҙәткә өйрәнеп, һеҙ һауытты яртылаш буш тип түгел, ә яртылаш тулы тип ҡабул итә башлаясаҡһығыҙ.

Бөйөк Олимпия чемпиондары спортта камиллыҡҡа өлгәшеү өсөн андың бөткөһөҙ көсөн һәм рухи дисциплинаның әһәмиәтен күптән аңлаған инде. Ярыштарҙа миҙал алыусыларҙы һәм "йүгерeүселәрҙе" бары тик "чемпион көйләнеше" генә айыра. Нимә ул "чемпион көйләнеше"?

Һәр бөйөк спортсы тукланыу һәм күнекмәләр эшләү режимы менән бер рәттән, психологик күнекмә ясуылдарын да ҡуллана. Күптәр, мейенең иҫ киткес психик энергияһын кәрәкле һөҙөмтә алыуға йүнәлтеү зарур, тип иҫәпләй. 1954 йылда Роджер Баннистер кеше өсөн мөмкин булмағанды эшләй - бер милде дүрт минуттан кәмерәк ваҡытта йүгереп үтә. Быға нисек өлгәшеүен һорағас, ул, мин бары тик үҙемдең ошо еңеүемде аңымда ошо кимәлгә еткәнсе кино таҫмаһы кеүек ҡабат-ҡабат ҡабатланым, ти. Рухи камиллыҡты һәм визуаллэштереү ысулын бары тик спорт өлкәһе менән генә сикләргә ярамай. Быны һәр өлкәлә лә ҡулланырға мөмкин. Уңыш иртәгәһенә үк килмәҫ, әммә көсөгеҙҙә һәм энергиягыҙҙы хыялдарығыҙҙы тормошҡа ашырыуға ебәрһәгеҙ, ул мотлаҡ киләсәк.

Тормошоғоҙҙағы һәр көн йәки ниндәйҙер ҙур ваҡиғаға әҙерләнгәндә, мәҫәлән, мөһим сығыш яһағанда, уйығыҙҙағы видеозалда иң яҡшы уңышҡа өлгәшеүегеҙ тураһындағы фильмды ҡабат-ҡабат ҡарағыҙ. Ошо еңеү һауаһын һулағыҙ, барлыҡ ваҡ-ҡына деталдәрҙе лә яҡшы итеп күҙаллағыҙ. Үҙегеҙҙе йылмайыусан, ҡотлауҙар ҡабул итеүсе итеп күҙ алдына килтерегеҙ. Нимә тойорға һәм кисерергә теләйһегеҙ - ошо турала уйлағыҙ. Уңыштан ҡәнәғәтлек кисереүегеҙҙе тойоғоҙ. Ижади фекерләү яҡшы һөҙөмтәләр бирә, бары тик уны үҙ ҡылыҡ-ғәҙәттәрегеҙҙе моделләштергәндә ғәҙәткә индереп алығыҙ.

Үҙегеҙ белгән барлыҡ кешеләр араһында иң ыңғай ҡарашлы кеше булығыҙ. Үҙегеҙҙә позитивлыҡ һәм шатлыҡ рухын үҫтерегеҙ. Ысын мәғәнәһендә мажаралар эҙләүсегә әүерелегеҙ һәм тормоштағы ҡаршылыҡтарҙы аҡыллыраҡ һәм юғарыраҡ булыуға саҡырыу тип ҡабул итегеҙ. Ауырлыҡтарҙы яратырға һәм уларҙы еңергә өйрәнегеҙ. Хәҙерге бизнестың иң бөйөк вәкилдәре - Геттинан башлап Тернерғаса - тормош ауырлыҡтарын ҡабул итергә һәм уларҙы яңы байлыҡ туплау өсөн ыңғай мөмкинлеккә әйләндерергә ыратҡан. Еңеүселәр менән еңелеүселәр араһында айырма шунда ғына. Еңеүселәр һәр хәл-тороштан сығыу юлын таба.

**Робин ШАРМА.**

кәндә ҡунаҡтар төрлө-төрлө сәскәләр үҫкән клумбаларға, олондары ағартылған ағастарға, бордюрҙарға ҡарап һоҡланды. Ашханаға индек. Унда дүрт кеше ултыра торған быяла өҫтәлдәр, йомшаҡ ултырғыстар. Ашнаҡсылар һәр төрлө блюдалар әҙерләп көтөп торалар. Бинаның эсендә шундай яҡшы ремонт эшләнгән, бөтә ер ялтырап тора. Унан һуң мәктәпте ҡарарға киттек. Кластар компьютерҙар менән йыһазландырылған, бөтә уҡыу әсбаптары ла бар.

Ни өсөн мин быларҙы енетекләп яҙам һуң? Сөнки сәнскеле тимерсыбыҡ уратып алған биләмә артта ҡалғас, ҡунаҡтарға "Колония тормошо нисек?" - тигән һорау бирҙем. Ҡайһылары өндәшмәне, әммә күпслектең: "Бында ла йәшәргә мөмкин", - тигән яуабы мине ғәжәпкә ҡалдырҙы. Улар бит, асылда, 10 йәштән алып 18 йәшкә тиклемге үҫмерҙәр колонияның тик тышҡы сағылышын ғына күрҙе. Ә был тәртип, таҙалыҡ ҡайҙан килә, нисек уға өлгәшәләр, кемдәр быны эшләй, тигән уй баштарына ла инеп сыҡманы.

Сер түгел, колонияла күп осраҡта таҙалыҡ, бөхтәлек көс ҡулланыу арҡаһында булдырыла. Һәр отрядта председатель, уның дүрт ярҙамсыһы һәм уларҙың һәр береһенең дә тағы дүртәр ярҙамсыһы бар. Һәр кеше нимәләр өсөн яуаплы. Әгәр администрация ҡушҡан эш үтәлмәй икән, отряд ата-әсә менән ҡыҫҡа һәм оҙайлы осрашыуҙан, посылкалар алыуҙан, кино-концерт ҡарауҙан, ваҡытынан алда иреккә сығыуҙан һәм башҡа тейешле ташламаларҙан мәхрүм ителә. Ә бит үҫмерҙәр донъяһы аяуһыҙ, бер-береһенә мәрхәмәтһеҙ мөнәсәбәттәргә ҡоролған. Кем арҡаһындалыр отряд ошо льготаларҙан мәхрүм ҡала икән, унан үс алалар. Ирektә үҫмерҙәр, төрмәлә ултырған кеше бер нәмәнән дә ҡурҡмай, тигән романтик ҡараш менән йәшәй. Ә колонияға килеп эләккәс, юғалып ҡалалар, үкенәләр, илайҙар, башҡаса улай эшләмәскә, ата-әсәне тыңлап йөрөргә һүҙ бирәләр. Сөнки отрядтағы 150 малай араһында үҙ урыныңды табыу, үҙеңде яҡлай алыу - бик ауыр мәсьәлә. Ирektә ваҡытта улар әйткәнде һанға һуҡмай, ҡасан теләйҙәр, шул ваҡытта тороп, теләһә мәктәпкә барып, теләмәһә бармай йөрөгәндәр. Ә колонияла - ҡаты көн тәртибе. Унда ятырға, алтыла торорға, торғас, күнекмәләр яһарға, уҡырға, эшләргә тейешһең. Яйға һалынған көн тәртибе лә кешене тәрбиәләй бит.

Колония буйынса дежурҙа булғанда карантинда Олег исемле малайҙы аҡ простыняға ятҡыра алмағандары, уның простыняны йыйып ҡуйыуы тураһында әйттеләр. Мин унан: "Ни өсөн улай эшләйһең?" -тип һорағас, "Нисек ундай таҙа, аҡ әйбер өҫтөндә йоҡларға мөмкин?" - тип аптыратты. Уның менән һөйләшә торғас, әсәһенең эсеүе, атаһын белмәүе, подвалдарҙа йоҡлап йөрөүе тураһында белдем...

Бына ошо бер нисә миҫалдан сығып ҡына ла, ата-әсәләр балаларҙы ошо афәттән һаҡлап ҡала алһалар, күпме кешенең тормошо дөрөҫ юлдан барыр ине, тип әйткем килә.

### Был тотҡонлоҡтан сығып буламы?

Хәҙерге ваҡытта беҙҙең иң ҙур проблема - үҫеп килгән быуынды наркотиктарҙан һаҡлап ҡалыу.

Әйтерһең, бөтә ергә наркотиктар тултырғандар - мәктәп булһынмы, колледждармы, институттармы... Бер кемгә лә сер түгелдер, үлем һатыусылар төрлө ысулдар менән үҙҙәренең клиенттарын, тип әйтәйек, күбәйтергә тырыша. Тәүҙә улар үҫмерҙәргә дозаны бушлай бирә. Әхәҙерге заманда шундай көслө матдәләр бар, кеше бер тапҡыр татып ҡарағандан һуң, наркотикһыҙ йәшәй алмай. Интернетта ла үҫмерҙәрҙе "Наркотик ҡулланһаң, баш шәберәк эшләй башлай, хәрәкәттәр етеҙләнә, зиһен арта", тип ҡыҙыҡтыралар. Былар бөтәһе лә, минеңсә, ата-әсәнең балаға аҙ иғтибар бүлеүе, күп ваҡытын эштә үткәреүе һөҙөмтәһенән килә.

Үҫмерҙәр холоҡ төҙәтеү колонияһына Өфө ҡалаһынан Кирилл тигән малайҙы килтерҙеләр. Ул наркотик ҡулланған, тараткан өсөн биш йылға суд ҡарары менән хөкөм ителгән. Тотҡонда саҡта уның "ломкаһы" башланды. Төндә йоҡлай алмай, һәр ваҡыт асыҡ күҙҙәре быяла кеүек ялтырап тора. Бер ни тиклем ваҡыт үткәс, ул кеше хәленә инә, малайҙар менән аралаша башлай. Был хәлгә нисек төшөүен һораша торғас, әсәһенең магазин директоры булып эшләүе, эштән һуң ҡайтыуы, өйҙә бөтә нәмәнең булыуы, атаһының ғаиләне ташлап китеүе, уның бәләкәйҙән үк бер үҙе булыуы, аҡсанан өҙөлмәүе тураһында һөйләне. Был осраҡта әсәй кеше, улым матди яҡтан йонсомаһын, ас йөрөмәһен, яҡшы кейенһен, тип кенә ҡайғыртҡан, ә уның эске тормошо, нимә менән шөғөлләнеүе, нимә менән көн үткәреүе хаҡында уйламаған, быны өсөн ваҡыты ла булмаған. Малай мәктәптән һуң ҡайҙа теләй, шунда йөрөп үткәргән һәм наркотикка барып тарыған, уны ҡуллана башлаған. Кирилды наркотик һатыусылар дозаларҙы таратырға мәжбүр итә. Ә был эштең аҙағы билдәле - полиция, суд, колония. Күпмелер ваҡыт үткәс, Кирилл үҙен оҫта ойоштороусы, үҙ артынан малайҙарҙы эйәртеүсе, администрацияның ярҙамсыһы итеп күрһәтте һәм отрядтың председателе булды. Иреккә лә ваҡытынан алда сыҡты.

Шәхси тормошома бәйле, үҫмерҙәр колонияһынан китеп, ололар, йәғни, ун һигеҙ йәштән үткән тотҡондар менән эшкә күсергә тура килде. Төрмәләге аяҡ кейеме тегеү цехында минә бер тотҡон исемем, атайымдың исеме менән өндәште. Әйләнеп ҡараным да, уны танымауым тураһында әйттем. Мин бит, Кирилл, тине ул. Мин аптырап киттем: олоғайған, яй ғына һөйләшә, тура ғына ҡарап тора, күҙҙәре быяла кеүек ялтырай. Кирилл үҙенең наркотиктан ҡотола алмауы, ауырҙарына күсеүе, шул арҡала тағы ла колонияға эләгеүен әйтте.

Наркомандар араһында, крокодил, тигән төшөнсә бар. Был исемде алған кешеләр торған еренән артҡа табан ҡуҙғала алмай, йәғни, крокодил һымаҡ, алға табан ғына хәрәкәт итә. Уларҙың аяҡтары, ҡулдары серей башлай, был процесты туҡтатырға бер ниндәй ҙә дарыу уйлап табылмаған. Кеше, оҙайлы ауыртыуһыҙланыуҙарға түҙә алмай, был донъянан китеп бара.

Ошо яҙмамды уҡып, бер кеше булһа ла фәһем алһа, наркотиктың ни тиклем ҡурҡыныс икәнен, нимәгә алып барып еткереүен аңлаһа, ваҡытында туҡтап ҡалһа ине. Ата-әсәләр балаларына күберәк иғтибар бүлһә, улар был упҡынға ҡоламаҫ. "Юлдаш" радиоһынан бер ҡатын уҡыусы улының тәмәке тарта башлауы, быны белеп ҡалып, уның менән һөйләшеүе, илап та аңлатыуы һәм атаһының, малайҙың буш ваҡытында, эш ҡушыуы, урманға барыуҙары, балыҡҡа йөрөүҙәре һәм бына бер нисә йыл малайҙың тартмауы тураһында һөйләгәйне. Ысынлап та, бәләне ваҡытында туҡтатып ҡала алһаң, яҡшыраҡ бит инде ул.

**Булат БАЙМОРАТОВ.**
**Стәрлетамаҡ ҡалаһы.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ



## РИЗЫҠ ҠАБУЛ ИТЕҮ ҠАҒИҘӘЛӘРЕ

Табынға ҡулды йыуып ултыралар. Ризыҡ ҡабул итеү "Бисмиллаһ" һүҙе менән башланырға тейеш.

Мөхәммәт саллаллаһу ғәләйһис-сәләм хәҙисендә: "Кем дә кем ашарға йыйына икән, мотлаҡ Аллаһ исемен әйтеп, "бисмиллаһ" тип башлаһын, әгәр быны әйтергә онотҡан булһа, иҫенә төшөү менән: "Бисмиллаһ ғәләәүүәлиһи үә ахириһи" тип әйтһен", - тигән.

Уң ҡул менән генә ашау талап ителә. Һул менән ярҙам итергә мөмкин, әммә ризыҡ ауыҙға мотлаҡ уң ҡул менән һалынырға тейеш. Шулай уҡ ошондай хәҙис бар: "Кеше тултыра торған иң насар һауыт - ул ашҡаҙаны. Хәл инерлек кенә ашарға кәрәк. Ашҡаҙандың өстән бер өлөшө - ризыҡҡа, йәнә өстән бере - һыуға, ҡалған өлөшө - тын алырға ҡалһын".

Шул уҡ ваҡытта ҡайһы саҡ туйғансы ашау ҙа тыйылмай.

Һауытҡа ризыҡты ашай алыр күләмдә генә һалып алырға кәрәк, аш ҡалдырыу ғәйепләнә, бәрәкәт китә тип һанала. Ашап бөткәндән һуң "Әлхәмдүлиллаһ" тип, шунан башҡортса, йә ниндәй булһа ла туған телдә Аллаһы Тәғәләгә рәхмәт әйтергә ҡушыла.

## ГОНАҺ ҠЫЛҺАҢ

Алдашыу, ике йөҙлөлөк - иң ҙур гонаһ. Әгәр кеше яңылыш гонаһ ҡыла икән, тиҙерәк тәүбәгә килеп, үкенеп, ике рәкәғәт "Тәүбә намаҙы"н уҡып, башҡа улай йәмһеҙ ҡыланмаҫҡа һүҙ бирә.

Әҙәм балаһы тәүбә итмәһә, йөрәгендә ҡара тап барлыҡҡа килеп, тут һымаҡ йөрәген ялмап ала. Шунан кеше ҡаты бәғерлегә әйләнә, халыҡта ундайҙарҙы "таш йөрәк" тиҙәр. Йөрәктәребеҙ, күңелдәребеҙ бысранмаһын өсөн, һәр ваҡыт намаҙ уҡып, ураҙа тотоп, тәүбә итеп, көн дә Аллаһ биргәненә шөкөр әйтеп, зекер ҡылып йәшәргә тейешбеҙ. Аллаһ Үҙенең рәхимле, миһырбанлы, рәхмәтле булыу кеүек гүзәл сифаттарын мосолман йөрәгенә һалған. Шуға күрә кеше ни тиклем ябай, йомшаҡ, алсаҡ күңелле, әҙәпле икән, тимәк, ул шул тиклем Аллаһтың мәрхәмәтлелегенә өлгәшә.

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Яр ҡарлуғасы**

**Береговая ласточка (береговушка)**



Турғай кеүектәр отрядының ҡарлуғастар ғаиләһенә ҡарай. Турғайҙан ваҡ. Арҡаһы көлһыу-һоро, ҡорһағы аҡ. Ҡойроғо саҡ ҡына асаланып тора. Инә ҡош менән ата ҡош айырылмай, миҙгелгә ярашлы төҫөн дә үҙгәртмәй. Йәш ҡоштар ололарына оҡшаш, тик арҡаһында тәңкәләнеп торған һүрәте бар. Йәйелгән килеш ҡанаты 28-30 см-ға етә.

Ҡырҡыу ғына "чрр" тип ҡысҡыра. Үҙ "йыры" юҡ. Беҙҙең илебеҙҙә бар ерҙә лә осрай.

Яҙ аҙағында, йәшеллек барлыҡҡа килгәс, ҡайта. Йылғаларҙың текә ярҙарындағы соҡорҙарҙа колониялары менән йәшәй. Ҡомло карьерҙар, хатта тәрән булмаған соҡорҙар, әйтәйек, Ноғай ҡасабаһы янындағы силос траншеялары стеналарына ла оя яһауы мөмкин. Колония бер нисә тиҫтә, хатта йөҙ ҡоштан тора ала. Кеше йәшәгән ерҙән йыраҡ булмаған урындарҙы ла үҙ итә. Урал аръяғында һирәгерәк ҡош, сөнки ул яҡтарҙа йылғаларҙың ярҙары ташлы. Ә ҡарлуғас йомшаҡ грунтлы ярлы йылғаларҙы ярата. Шулай ҙа 1965 йылдың майында беҙ яр ҡарлуғастарын Әбйәлил районының Үләнде, Сыбаргүл күлдәре янында күпләп осраттыҡ. Ошо уҡ райондың Селивановка ауылы янындағы силос соҡорҙары стенаһына оя ҡорған ҡарлуғастарҙы күрергә лә насип булды.

Ҡарлуғас ояһын үҙе соҡой, бының өсөн суҡышы, тәпәйҙәрен ҡуллана. Иҫке ояларҙы ла үҙләштерә, бары тик уларҙы тәрәнәйтеп соҡоп ала. Ояның тәрәнлеге 0,2 м-ҙан 1,5 м-ға етә. Диаметры - 4-6 см, йышыраҡ 5 йомортҡа һала. Икәүләп баҫалар, был - яҡынса 12-16 көн. 19-20 көнлөк бәпкәләр оянан осоп сыға башлай, бығa тиклем инә ҡош менән ата ҡош уларҙы ризыҡ ташып ашата.

Бөжәктәр менән генә туҡлана, уларҙы һауала осоп китеп барышлай тота. Шулай ҙа һыуҙан, ерҙән, үҫемлектәрҙән дә бөжәк аулай. Бөжәктәр осмаған ямғырлы, һалҡын көндәрҙә ҡарлуғас ояһында ғына ултыра.

Бәпкәләр ояны ташлап осоп сыҡҡас та, башта уға кире ҡайтып йөрөй. Һуңғараҡ башҡа ҡоштарға ҡушылып, яр буйында йәшәй башлай, сымдарға теҙелеп ултырырға ярата. Июль аҙағында йылы яҡҡа оса башлайҙар. Беҙҙең ҡарлуғастарҙың ҡышлау ерҙәре - йә Үҙәк Африка, йә Һиндостан. Бында тыуған ҡоштар киләһе йылына ла ошонда ҡайта, шулай ҙа уларҙың йәшәү урыны ил буйынса бик киң урынлашҡан. Беҙгә билдәле иң оло яр ҡарлуғасына 9 йәш ине.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**



### 27 ОКТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

#### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25 Х/ф "Утомленные солнцем". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
15.05 "Давай поженимся!" [16+]
15.55 "Мужское / Женское". [16+]
18.45 "Большая игра". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Мосгаз. Дело №11: Розыгрыш". [16+]
0.00 "Время героев". [16+]
1.05, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

#### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.10, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Хроники русской революции". [16+]
23.35 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.26 Перерыв в вещании.

#### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Охота на Гауляйтера". [16+]**
**11.00 Новости недели (на рус.яз). [12+]**
**11.45, 16.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Специальный репортаж. [12+]**
**12.15, 20.15 Квадратные метры. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Асыш. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Башкорттар. [6+]**
**16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**17.45 Формула здоровья. [12+]**
**18.00 Защитники Отечества. [12+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Преображение. [12+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Кустәнәс. [12+]**
**23.30 Х/ф "Луиза Санфеличе". [16+]**
**2.00 Спектакль "Гайфи агай, женись давай!". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

### 28 ОКТЯБРЯ ВТОРНИК

#### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.20, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.35, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.05 "Давай поженимся!" [16+]
15.55 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Мосгаз. Дело №11: Розыгрыш". [16+]
0.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

#### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.20, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Хроники русской революции". [16+]
23.35 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.41 Перерыв в вещании.

#### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Бомба". [16+]**
**11.00 Специальный репортаж ГИБДД. [12+]**
**11.15, 20.15 Квадратные метры. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Автограф. [12+]**
**17.00, 22.00 Подкаст. Интонации. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Креативный код. [12+]**
**21.00 Деловая среда. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Гигант". [16+]**
**1.45 Спектакль "Оль-ля-ля". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

### 29 ОКТЯБРЯ СРЕДА

#### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.20, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.35, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.05 "Давай поженимся!" [16+]
15.55 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Мосгаз. Дело №11: Розыгрыш". [16+]
0.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

#### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.20, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Хроники русской революции". [16+]
23.35 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.43 Перерыв в вещании.

#### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Бомба". [16+]**
**11.00 "Дорога к храму". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Дознание. [16+]**
**12.15 Криминальный спектр. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 "Экологично". [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**17.00 Креативный код. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**17.45 Специальный репортаж ГИБДД. [12+]**
**18.00 Дустар. [16+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Адмирал" (Владивосток). КХЛ.**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байык-2025". [12+]**
**0.00 Х/ф "Семейный портрет в интерьере". [16+]**
**2.00 Спектакль "Галиябану". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

### 30 ОКТЯБРЯ ЧЕТВЕРГ

#### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.20, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.35, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.05 "Давай поженимся!" [16+]
15.55 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Мосгаз. Дело №11: Розыгрыш". [16+]
0.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

#### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.20, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Хроники русской революции". [16+]
23.35 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.34 Перерыв в вещании.

#### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Бомба". [16+]**
**11.00 Креативный код. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на рус. яз). [12+]**
**12.15, 20.15 Квадратные метры. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Сулпылар. [6+]**
**15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Патриот РФ. [12+]**
**16.15 Дознание. [16+]**
**17.00 Деловая среда. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 "Йома". [6+]**
**19.00 Телецентр.**
**19.45 "Мама". [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Защитники Отечества. [12+]**
**21.00 Формула здоровья. [12+]**
**22.00, 3.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Самая красивая жена". [16+]**
**2.00 Спектакль "Судьба выбранная мной". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

### 31 ОКТЯБРЯ ПЯТНИЦА

#### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.20, 17.00 "Большая игра". [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
13.10, 14.15 "Время покажет". [16+]
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Голос. Дети". Новый сезон. [0+]
23.40 Юбилейный концерт группы "Чайф". [12+]
1.30, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

#### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 Прямой эфир. [16+]
21.30 "Ну-ка, все вместе!" [12+]
23.55 "Истории Большой Страны". [12+]
0.55 Х/ф "Никому не говори". [12+]
4.38 Перерыв в вещании.

#### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Бомба". [16+]**
**11.00 "Йома". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на баш. яз). [12+]**
**12.15 Криминальный спектр. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Тирмәкәй. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Хазина. [6+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45 Квадратные метры. [12+]**
**18.00 Башкорттар. [12+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Адмирал" (Владивосток). КХЛ. [12+]**
**22.00 Своих не бросаем. [12+]**
**22.15, 3.45 Письма солдатам. [12+]**
**23.00 Дуҫтар. [16+]**
**23.30 "Курай-шоу". [12+]**
**0.00 Х/ф "Шея жирафа". [16+]**
**1.30 Спектакль "Кьоджинские перепалки". [12+]**
**4.00 Колесо времени. [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

### 1 НОЯБРЯ СУББОТА

#### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.20, 13.00, 14.15 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
11.55 "Большая игра". [16+]
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.05 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Сегодня вечером". [16+]
20.00, 21.35 Музыкальный фестиваль "Голосящий КиВиН-2025". [16+]
21.00 "Время".
23.50 Х/ф "Кентавр". [18+]
1.40 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

#### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 Большие перемены.
14.30, 20.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50 "Юморина-2025". [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Тысяча роз". [16+]
0.35 Х/ф "Тот мужчина, та женщина". [12+]
4.17 Перерыв в вещании.

#### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**8.45 Хазина. [6+]**
**9.15 "Сәләм представляет". [12+]**
**9.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**9.45 Своих не бросаем. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Книга сказок. [6+]**
**10.45 Әкиәтсе. [6+]**
**11.00 Гора новостей.**
**11.15 "Курсак". [6+]**
**11.30 Зерно. [6+]**
**12.00 "Елкән". [6+]**
**13.30 Башкорттар. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Х/ф "Шея жирафа". [16+]**
**18.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Специальный репортаж. [12+]**
**19.15, 4.30 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 "Байык-2025". [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00, 6.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Башкорт йыры-2025". [12+]**
**0.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.30 Х/ф "Скрытая любовь". [16+]**
**2.00 Спектакль "Кавардак Forever". [12+]**
**4.15 Письма солдатам. [12+]**
**5.15 Новости недели (на баш. яз). [12+]**

### 2 НОЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

#### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Играй, гармонь любимая! [12+]
6.55 "Часовой". [12+]
7.25 "Здоровье". [16+]
8.30 "Золотая коллекция Союзмультфильма". [0+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 "Жизнь других". [12+]
11.05 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Премьера. "Будем жить!". [16+]
13.10 "Видели видео?" [0+]
14.25 "Горячий лед". Фигурное катание. Гран-при России 2025. Этап II. Короткая программа. [0+]
15.35 Х/ф "Командир". [16+]
18.00 Вечерние новости.
19.00 Премьера. "Две звезды". Семейный подряд. [12+]
21.00 "Время".
23.00 "Что? Где? Когда?" Осенняя серия игр. [16+]
0.00 Т/с Премьера. "Опасная близость". [18+]
1.00 Д/ф "Марадона". [16+]
2.35 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

#### РОССИЯ 1

5.30, 3.40 Х/ф "Москва - Лопушки". [12+]
7.20 "В кругу друзей".
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
14.30 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 Петросян-шоу. [16+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.35 Х/ф "Мама поневоле". [12+]
5.20 Перерыв в вещании.

#### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**8.30 Кустәнәс. [12+]**
**9.00 "Мама". [12+]**
**9.15, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз).**
**9.45 "Читаем с Грамотейкой". [6+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Тирмәкәй. [6+]**
**10.45 Городок АЮЯ. [6+]**
**11.00 Гора новостей.**
**11.15 "Беседка". [6+]**
**11.30 "Сулпылар". [6+]**
**12.00 "Атайсал. Беҙҙекеләр! Знай наших!" [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз).**
**13.15 Башкирские каникулы. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**14.45 Дорога к храму. [6+]**
**15.15 Формула здоровья. [12+]**
**15.30 Честно говоря. [12+]**
**16.15 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Локомотив" (Ярославль). КХЛ.**
**19.00 Концерт Государственного ансамбля кураистов Республики Башкортостан. [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15 Подкаст. Интонации. [12+]**
**22.45 Концерт Сибайской филармонии "Вечные песни Рима Хасанова". [12+]**
**0.30 Х/ф "Юлий Цезарь". [16+]**
**3.30 Спектакль "Очень простая история". [12+]**
**5.30 Дустар. [16+]**
**6.00 Новости недели (на рус.яз.). [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1447 һижри йыл.*

| Октябрь - Ноябрь (Йомадиәл әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ахшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 27 (5) дүшәмбе | 6:27 | 8:09 | 13:30 | 15:58 | 17:50 | 19:32 |
| 28 (6) шишәмбе | 6:28 | 8:11 | 13:30 | 15:56 | 17:48 | 19:30 |
| 29 (7) шаршамбы | 6:30 | 8:13 | 13:30 | 15:54 | 17:46 | 19:28 |
| 30 (8) кесе йома | 6:32 | 8:15 | 13:30 | 15:52 | 17:44 | 19:26 |
| 31 (9) йома | 6:34 | 8:17 | 13:30 | 15:50 | 17:42 | 19:24 |
| 1 (10) шәмбе | 6:36 | 8:19 | 13:30 | 15:48 | 17:39 | 19:22 |
| 2 (11) йәкшәмбе | 6:38 | 8:21 | 13:30 | 15:46 | 17:37 | 19:20 |

*БР Мосолмандары диниә назараты сайтынан алынды.*

✓ *Тамашасылар был әҫәргә тәрән мәғәнә һалынғанын аҙаҡ төшөнөр, ғаилә ҡороуҙың, матур итеп балалар үҫтереүҙең, ир менән ҡатындың бер-береһенә тоғро булып йәшәүҙәре изге төшөнсә булыуҙан ситләшә барыуын аңлар.*



МӘҘӘНИ МАЙҘАН

# ОТОШЛО ОТА




**Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театрында туп-тулы зал, аншлаг менән Наил Ғәйетбаевтың пьесаһы буйынса режиссер Рөстәм Хәкимов ҡуйған "Әстәғәфирулла!" спектакленең премьераһы булып уҙҙы.**

Комедия комедия инде, тамашасыларҙың сәхнәләге мәҙәктәрҙе ҡарап, персонаждарҙың көлкөлө хәбәрҙәрен тыңлап, һындары ҡатты. Эйе, үтә ныҡ көлкөлө шул пьесаның сюжеты, көлмәҫ ерендән көлөрһөң. Артистарҙың һығылмалы, көтөлмәгән хәрәкәттәре спектаклдең йөкмәткеһенә уйланмайса уйылып китерҙәй мәғәнә өҫтәй. Әлегә көлөп кенә ултырған тамашасылар был әҫәргә тәрән мәғәнә һалынғанын аҙаҡ төшөнөр, бөгөнгө көндә ғаилә ҡороуҙың, матур итеп балалар үҫтереүҙең, ир менән ҡатындың бер-береһенә тоғро булып йәшәүҙәре изге төшөнсә булыуҙан ситләшә барыуын аңлар. Әйткәндәй, Сибай драма театрында был пьеса буйынса спектакль икенсе тапҡыр ҡуйыла. Тимәк, билдәле драматургтың әйтер фекерҙәре үткәндән бөгөнгөгә атлаған, һәр ике осорҙа ла актуаль булған.

Тормоштарында башҡа һыймаған эксперименттар үткәрергә яратҡан, һорауҙарына яуап эҙләгәндә бәхәс ҡороуҙы беренсе урынға ҡуйған ике дуҫ егет тураһындағы әҫәрҙең йөкмәткеһе, тәү ҡарамаҡҡа, үтә лә ябай һымаҡ. Береһе, өйләнеп айырылғаны, эргәһендәге мөхиткә бер ҙә иҫе китмәй, бар нәмәгә төкөрөп ҡарай, икенсеһе, халыҡ телендә "ботаник" тип йөрөтөлгәне, йәшәйешен үтә идеаллаштыра. Быларҙың төп бәхәсе - мөхәббәт бармы был донъяла, әллә ул бары уйҙырма ғынамы. Пьесаның сюжеты шул хәтлем оҫта ҡоролған: сираттағы бәхәсләшеү мәлендә ғаилә ҡороп айырылған ир әле айырылырға өлгөрмәгән дуҫын был донъяла мөхәббәт юҡлығын иҫбат итер өсөн уны үлгән булып ҡыланырға күндерә. Ни эшләһен, эксперимент үткәрер өсөн "ботаник" авантюраға риза була. Бына шунан башлана инде спектаклдең иң ҡыҙыу өлөшө, бәхәсте үҙ яғына ауҙарыу өсөн айырылған ир дуҫының "тол ҡалған" ҡатынын ярты сәғәт эсендә үҙенә кейәүгә сығырға ризалаштыра, мөхәббәттең буш ҡыуыҡ икәнен иҫбат итә, йәш ғаиләне тарҡата. Артабан пьеса авторы Наил Әсғәт улы геройҙарын виртуоз оҫталыҡ менән төрлө сүрәткә индерә, ғаилә тигән төшөнсә ЗАГС-та ғына етди ҡабул ителә икән, тип уйлай башлайһың. Әлеге ике ир һәм дүрт ҡатын ҡатнашлығындағы пьесаның сюжеты шахмат таҡтаһындағы уйын һымаҡ ҡоролған, ҡасан ҡайһы фигура йөрөрөн, ниндәй реплика ташларын, тип-тигеҙ урында, ҡәҙимге беҙҙе уратып алған тормошта башланып киткән ваҡиғалар ағышы ҡайһы юлдан китерен алдан белеп булмай.

Шахмат тигәндәй, театр тормошонда ла шулай: драматург яҙа, әртистәр уйнай, тамашасы ҡарай, матты режиссер ҡуя, әгәр теләмәһә, уны, һүнгән машиналай, этеп тоҡандырып булмай. "Был пьесаны тик Сибай театрында ғына сәхнәләштереү отошло булыр, тип уйланым",- ти Рөстәм Милләт улы. Тәки, отто, мат ҡуйҙы. Ысынлап та, спектакль бик отошло сыҡты! Комедия театр репертуарында лайыҡлы урын алһын, тип теләйек.

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ.**

# ЭПОС - РӘССАМ РӘСЕМЕНДӘ



**Бынан теүәл 115 йыл элек билдәле ғалим Мөхәмәтша Буранғолов Ғәбит сәсән Арғынбаев һәм Хәмит сәсән Әлмөмәхәмәтовтан "Урал батыр" эпосын ҡағыҙ битенә теркәгән. Нәҡ ошо ғәмәл бөйөк эпосты һаҡлап алып ҡалыуҙа тәүге аҙым була.**

Бөгөнгө көндә мәшһүр рухи ҡомартҡыбыҙ күптәргә билдәле. Уның менән ҡыҙыҡһыныусылар артҡандан-арта бара. Бик күптәр ошо әҫәр өҫтөндә ижади эштәр башҡара. "Әй Йола" төркөмө уны бөтә донъя кимәленә танытты. Ошо уҡ йүнәлештә Ишимбай ҡалаһында тыуған Ирина Анатольевна Окружнова ла ижад итә. Ул әлеге көндә үҙенең тыуған ҡалаһында "Ишимбайфильм" мультистудияһында һәм Ишимбай районының мәҙәни-ял итеү үҙәгендә эшләй. Рәссамдың ижады менән бик күптәр республика һәм халыҡ-ара күргәҙмәләр аша таныш.

Бөгөнгө көндә Ирина Анатольевнаның эштәре менән Өфөлә 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы музейында танышырға мөмкин. Дим биҫтәһендә урынлашҡан музейҙа рәссамдың "Урал батыр" эпосы мотивына яҙылған картиналарынан торған "Башҡорт еренең легендалары" күргәҙмәһе асылды. Тәүгеләрҙән булып күргәҙмә менән Башҡортостан Республикаһы Мәғарифты үҫтереү институтының Гуманитар белем биреү кафедраһында яңы профессия үҙләштереүсе уҡытыусылар, Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге Ғаилә тәрбиәһенә булышлыҡ итеү үҙәгенең балалары танышты. Музейға килеүселәргә шулай уҡ "Ишимбайфильм" мультистудияһы Башҡортостан Башлығының гранты аҡсаһына "Урал батыр" эпосы буйынса төшөргән фильм да тәҡдим ителде. Музейҙың ғилми хеҙмәткәре, тарихсы Ғилман Ҡашҡаров күргәҙмә тураһында һөйләне. Экскурсия барышында фекер алышыу ҙа булды.

"Башҡорт еренең легендалары" күргәҙмәһе 30 ноябргә тиклем эшләйәсәк.

ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ!



# ЯНҒЫНДАН...

• Йыл башынан республикала 6380 янғын сыҡҡан, уларҙа 162 кеше һәләк булған, 146 кеше төрлө ауырлыҡтағы тән йәрәхәттәре алған, 1323 кеше ҡотҡарылған. БР буйынса Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, 2025 йылда, янғын хәүефе осоро башланғандан алып, дөйөм майҙаны 75,97 гектарҙа 20 урман янғыны сыҡҡан. Хәлдең тотороҡланыуына бәйле, Башҡортостандың урман фондында быйыл 3 апрелдән ғәмәлдә булған янғынға ҡаршы махсус режим 20 октябрҙән ғәмәлдән сығарылды, тип белдерәләр ведомствонан.

• Стәрлетамаҡта "Светофор" магазинында янғын сыҡҡан. 100 квадрат метр майҙанды биләп алған утты һүндереүҙә туғыҙ берәмек техника һәм 30 кеше ҡатнаша. Зыян күреүселәр юҡ. Янғын сыҡҡан урынға тиҙ арала Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының, Башҡортостандың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитетының янғын һағы командалары килеп етеүе утҡа таралып китергә юл ҡуймай. Хәл-ваҡиғаның сәбәптәре һәм уны тыуҙырған шарттар асыҡлана.

• Дәүләкән районының Политотдел ауылында торлаҡ йорт янып китә. Башҡортостандың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитетынан хәбәр итеүҙәренсә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, янғын һөҙөмтәһендә ир һәләк булған. Ҡотҡарыусылар электр приборҙарын һәм газ ҡорамалдарын ҡулланғанда һаҡ булырға, бинала тәмәке тартмаҫҡа һәм янғын тураһында хәбәр итеүсе приборҙар ҡуйырға саҡыра.

# ҺЕЛӘҮҺЕНДӘН ДӘ...



Республикала ҡырағай йәнлектәр тораҡ пункттар янында йыш осрай. Бишбүләк районының Иттихат ауылы янында һеләүһен күргәндәр. Урман ҡунағын машинала китеп барғанда видеоға төшөрөп алғандар. Кадрҙа күренеүенсә, йәнлек кешеләрҙе шәйләү менән ҡасыу яғын ҡараған. Башҡортостан Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығының матбуғат секретары Ренара Ғәзина хәбәр итеүенсә, һеләүһен - йыртҡыс йәнлек. Республикала 1300-ҙән ашыу һеләүһен йәшәй. Башлыса улар кимереүселәр, ҡоштар, ҡуяндар, ҡоралайҙар менән туҡлана. Һуңғы өс йылда йыл һайын 51-82 йәнлеккә һунар итеү рөхсәт ителә. Һунарсылар яҡынса 15 һеләүһенде атып алған. Был иһә йыртҡыстың һирәк осрауы тураһында һөйләй. Ведомствола белдереүҙәренсә, һеләүһенгә тап булғанда уға яҡынлашырға, бигерәк тә ашатырға ярамай. Әкрен генә ошо урындан китеү яғын ҡарарға кәрәк. Һуңғы 20 йылда ауылдарға йәш һеләүһендәр килеүенең унға яҡын осрағы теркәлгән, шул иҫәптән Өфөлә ике осраҡ.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**24 октябрь "Хыялый"** (С.Әбүзәр, А.Йәнбәков), лирик комедия. 12+

**25 октябрь "Бөйрәкәй"** (Т. Ғарипова, А. Абушахманов, инсц. А. Ишбулдина), драма. 16+

**26 октябрь "Мөхәббәт ҡоштары"** (И.Йомағолов, Ф.Ғарипов), музыкаль комедия. 16+

**28 октябрь "Хыялға ҡаршы"** (А. Баймөхәмәтов, инсц. А. Ишбулдина, И. Ҡаҙаҡбаев), героик булмаған повесть. 12+

**29 октябрь "Йырланмаған йырым һин"** (В.Исхаҡов, А. Абушахманов), музыкаль милодрама. 16+

**30 октябрь "Яратам, тип әйтеп өлгөрмәнем"** (Г. Ғизәтуллина, А.Абушахманов), кинодрама. 12+

## М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**24 октябрь "Удивительное путешествие кролика Эдварда"** (К. ДиКамилло, А. Абушахманов), мөхәббәт тураһында әкиәт. 11:00. 6+

**24 октябрь "Аҡһаҡ"** (М. Ғиләзов, Ф. Ғәрипов), драма. 19:00. 12+

**25 октябрь "Рассказы Альфии"** (М. Кәрим, М. Күлбаев), бәхетле бала саҡ. 12:00. 6+

**25 октябрь "Отец"** (М. Горький, Д. Хөснийәров), ғаилә драмаһы. 18:00. 12+

**26 октябрь "Чиполлино"** (Д. Родари, Р. Хәкимов), мажаралар. 12:00. 6+

**28 октябрь "Спасите Леньку!"** (М. Икрамова, М. Күлбаев), драма. 11:00. 12+

**28 октябрь "Ханума",** (А. Цагарели, Р. Хәкимов), музыкаль комедия. 19:00. 12+

**29 октябрь "Я - кулак. Я А-Н-Н-А"** (М. Райцес, О. Мусина), социаль драма. 12:00. 12+

**30 октябрь "Играем Пушкина: Царевна-Лебедь"** (А. Пушкин, О. Мусина), әкиәт. 11:00. 6+

**30 октябрь "Поджигатель"** (Г. Горин, М. Күлбаев), трагикомедия. 16+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**25 октябрь "О чем поет осень?"** (В. Щербакова). 12:00 һәм 15:00. 0+

**26 октябрь "Шесть чувств"** (Н. Беззубова, А.Верхоземский). 12:00 һәм 15:00. 6+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**24 октябрь XIX Халыҡ-ара "SAUERFEST"** орган фестивале. Ф. Шагов (торба, Мәскәү), Т. Багинец (орган, Екатеринбург). 12+

**26 октябрь "Сказки дядюшки Органа".** Бөтә ғаилә өсөн йәкшәмбе концерты. 15:00. 6+

**26 октябрь** Виртуоз скрипкасы **Вардан Маркостың** концерты. 18:00. 12+

**28 октябрь Сергей Пашкевичтың** фортепиано концерты (Санкт-Петербург). 12+

**30 октябрь "Йыр көсө"** Өфө ҡала мәҙәниәт һарайы коллективы концерты. 12+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**25 октябрь "Три поросенка"** (З. Сөләймәнова), музыкаль әкиәт. 0+

**28 октябрь Сәйет Билаловтың** юбилей концерты. 12+

## А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**24, 25 октябрь "Светофорный детектив"** (А.Кружков), әкиәт. 12:00. 0+

**24 октябрь "Их, күгәрсенкәйҙәрем!"** (Ф. Бүләков), лирик комедия. 19:00. 12+

**25 октябрь "Алты ҡыҙға бер кейәү"** (Т. Миңнуллин), драмеди. 16+

**28 - 30 октябрь "Ҡанатлы генерал"** (Х.Ирғәлин, Д. Нурғәлин), драма. 12+

## Сибай концерт-театр берекмәһе

**28 октябрь "Ойраты"** Ҡалмыҡ Дәүләт бейеү театры концерты. 6+

**30 октябрь "Тарпан"** төркөмө концерты. 6+

## БР Милли музейы

**24 октябрь "Археология бөтәһе өсөн дә"** 2025 йылда ялан эштәре һөҙөмтәһе тураһына пресс-конференция. 11:00. 12+

АҠҺАҠАЛ ҺҮҘЕ

# АҠЫЛ ТУЛАЙ, ТЕЛ ӨНДӘШМӘЙ



**Ошо көндәрҙә Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең тыуыуына 106 йыл тулыуҙы билдәләнек. Фанилыҡта ваҡыт иң шәп аҡҡан йылғаларҙан да шәберәк аға икән: кисә генә мостайса йылмайып, дуҫ-иштәре менән һин дә мин аралашып йөрөгән мәшһүр шағирыбыҙ, үҙ быуаты аша уҙып сығып, икенсе йөҙ йыллығын дауам итә. Шағир рухы мәңгелек икәне ошолай раҫлана. Мостафа Сафа улы шағир ғына түгел, ә үҙенсәлекле аҡыл эйәһе лә ине. Уның урынлы, килешле һәм тос итеп әйтә белгән фекерҙәре, афоризмдары уҡыусыларыбыҙ күңеленә лә хуш килер, тип уйланыҡ.**

- Аҡыллыға серем систем:
Үҙе теләп
Улы итте;
Бер ахмаҡҡа серем систем -
Теләмәҫтән
Ҡоло итте.

- Атһыҙ кешенең ярты мөлкәте сабатаға китә.

- Бер бушлыҡ менән икенсе бушлыҡты тултырып булмай.

- Бөтә ерҙә лә бер үк ҡояш. Яҙмыштар ғына төрлө.

- Бәхеттең шаһиты булыу - үҙе бәхет икән!

- Ғашиҡтар тауға менә, аҙғындар соҡорға төшә.

- Дошман булғас, ул үҙеңдән ҡайтыш булмаһын.

- Замана - кешеләр. Замана - беҙ. Беҙҙең йөҙ - замана йөҙө. Киреһенсә түгел.

- Икмәк, тоҙ, һыу, наградалар - Бөтәһе лә ерҙә ҡала.

- Йомарт ҡулға мал керер.

- Йылғаның кирегә боролоуы ихтимал, ә ваҡыт бер ҡасан да кирегә аҡмай.

- Йыр, аҡыл һәм дуҫлыҡ - бүлешкәндән арта ғына.

- Байҙарҙы дуҫтары ерләй, ярлыларҙы - туғандары, һуҡбайҙарҙы ергә былай ғына тапшыралар.
*("Көндәлектәр". 2. I. 1979).*

- Байҙың уйы - килемдә,
Ярлыныҡы - илендә.
*("Үҙем сығарған әйтемдәр").*

- Байрам көнгә болотло булыу килешмәй.
*("Йырланмаған йыр").*

- Байрам мәңгелек нәмә ул.
*("Оҙон-оҙаҡ бала саҡ").*

- Байрам тигәнең бары урамда ғына була. Өйгә һыйып бөткән байрам - байрам түгел ул.
*("Оҙон-оҙаҡ бала саҡ").*

- Бал ҡорттары нисек йыйһа
Тугайҙарҙа гөл балын,
Шулай алам һинән, илем,
Йырҙарымдың илһамын.
*("Иңләнем дә, буйланым да").*

- Бала имеҙгән әсәне хатта ут та ала алмай.
*("Көндәлектәр". 11. XI. 1991).*

- Бала саҡта сәғәт ҡорһаҡта була ул.
*("Әс таған").*

- Бала саҡты мин яҙғы йылы ямғырҙар яуған мәл менән сағыштырыр инем. Ҡояшлы яҙ ни тиклем оҙағыраҡ һуҙылһа, йәйен ер йөҙә шул тиклем йомартыраҡ йәшеллеккә, сәскәләргә күмелә.
*("Бәләкәй кешенең ҙур хәсрәте").*

- Балалар донъяһы - ҡараш етмәҫлек мөһабәт һәм шул уҡ ваҡытта һаҡлыҡ ҡағылыуҙан ыуалырға торған донъя, уның тәртиптәре мәктәп тормошонон эске ҡағиҙәләренә һәр саҡ тура килеп кенә тормай.
*("Бәләкәй кешенең ҙур хәсрәте").*

- Балалар ололар күрмәгәнде күрәләр, ололар ишетмәгәнде ишетәләр.
*("Бәләкәй кешенең ҙур хәсрәте").*

- Балалар өсөн ваҡыт төшөнсәһе юҡ.
*("Көндәлектәр". 6. V. 1986).*

- Балалыҡ - йә асыҡ аҡыл,
Йә тотош хыял.
Йә ул арыҫланға оҡшай,
Йә ҡурҡаҡ ҡуян.
*("Декабрь йыры").*

- Бар ғаләмде йыуатырға
Шағир ҙа Алла түгел,
Телгеләп үк бирер ине -
Йөрәге алма түгел.
*("Шағир шатлығы").*

- Аҡсаға мохтаж дуҫың һинән һорамаһа ла, үҙең белеп биреү кәрәк. Кәңәшкә мохтаж кешегә һорамағанда кәңәш биреү кәрәкмәй. Һорамай биргән кәңәште күп әҙәм ҡабул итмәй, киреһенсә, хәтере ҡала. Йәнәһе, ул үҙе бөтәһен дә белә. Бигерәк тә ҙур түрәләргә был оҡшамай. Хәҙер берәүгә лә аҡыл бирергә атлығып бармайым.
*("Көндәлектәр". 20. IX. 1997).*

- Аҡыл тулай, тел өндәшмәй.
*("Ярлыҡау").*

- Аҡыл, тәүбәгә көн ҡалғас...
Шашмаҫҡа ине тәүҙә.
*("Мөхәббәт йырын һиплемә...").*

- Аҡылды кәрәк саҡта йәшереп була, ахмаҡлыҡты ғына йәшереп булмай.
*("Көндәлектәр". 6. III. 1982).*

- Аҡылды ҡапшап тикшереп булмай.
*("Диктаторға ат бирегеҙ!").*

- Аҡыллы һүҙ үтә һирәк булыр,
Шуға ла бик-бик кәрәк булыр.
Ахмаҡ һүҙҙең уның күп күләме -
Гүйә сәсмәй үҫкән сүп үләне.
*("Боронғоларға эйәреп...").*

- Ниндәй генә гәзитте асып, ниндәй генә телеэкранға күҙ һалма, гел йондоҙҙар тураһында һөйләйҙәр. Сәхнә йондоҙо, эстрада йондоҙо, поэзия йондоҙо...

Баҡһаң, йондоҙ тигәнең йыш ҡына сысҡан уты булып сыға. Ярым шәрә берәй туҙғаҡ баш йәки ҡатынша ир килеп сыға ла: "Йондоҙ! Йондоҙ!" - тип шаҡ ҡаталар.

ТЕЛҺӨЙӘР

## ҺАУЫТЫҢ ЫРЫҠТАМЫ?

**Һатып алған ырфыям
Ырыкта түгел, еҙҙән.
Ырыҫҡал тартып торһон тип,
Тағып ҡуйҙым еләнгә.
Шаян таҡмаҡтар тиҙерәк хәтергә һеңеүсән. Таҡмаҡтағы иҫке һүҙҙәрҙе яңыртайыҡ.**

**Ырфыя.** Ырфыя - ҡалайҙан йәки еҙҙән көмөрә итеп биҙәкләп һуҡҡан тәңкә һымаҡ биҙәү әйбере. *Боронғо ырфыя. Башҡорт ҡатын-ҡыҙы күлдәк-камзулына ырфыя ла баҫҡан.*

**Ырыкта.** Химик элемент, күкһел аҡ төҫтәге йомшаҡ металл; цинк. *Ырыкта һауыт. Табаҡтың ырыктаһы ашалһа, тутыға башлай. Шылтыратып тағып йөрөй ырыкталы сулпыһын ("Ҡарлуғас" йыры).*

**Ырыктаның** тағы ла бер мәғәнәһе - көмөш һымаҡ аҡ металл. Мельхиор. *Ырыкта әйбер ялтырап тора. Ҡарайған ырыкта ҡалаҡты аҡбалсыҡ таҙартамы?*

**Ырыктаның** кеше йә хайуан сифатын белдергән мәғәнәһе лә бар. **1.** Йонсоу, ябыҡҡан, хәлһеҙләнгән, кәрһеҙ. *Ырыкта мал.* **2.** Үтә яй ҡуҙғалыусан, ялҡау, ығыш. *Ырыкта аттар бик яй бара.* **3.** Кирегә киткән, уңышһыҙ. *Ырыкта эш. Юл ырыкта түгел.*

**Ырый**. Телдәге ҡайһы бер өндө дөрөҫ, асыҡ әйтә алмаған йәки боҙоп һөйләгән. һаҡау. *Ырый бала. Ырый телле.*

**"Ырый"** тағын да "аҡылы камил түгел, алйот, иҫәр" тигәнгә тура килә. *Юҡ-бар һөйләһәң, ырый тиерҙәр. Ырый һымаҡ ҡыланма.*

**Ырыҫҡал.** "Бәхет килтергән мал, дәүләт, ҡот" тигән мәғәнәле һүҙ. *Һаҡал - ырыҫҡал түгел (мәҡәл).Тапҡаның ырыҫҡал икән.*

**Шулай итеп, ырыҫҡаллы булайыҡ!**

**НУРБИКӘ** әҙерләне.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ТАУЫШЛЫ ЙОРТТАН...

## тау артына ҡас!

Атың яман булһа, һатып ҡотолорһоң. Ағай-энең яман булһа, ҡасып ҡотолорһоң. Ҡатының яман булһа, нисек ҡотолорһоң?

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Өлкәндәр - үлемдән, балалар ҡараңғынан ҡурҡа: ике осраҡта ла был ҡурҡыу әкиәттәр аша тыуҙырыла.

**(Фрэнсис Бэкон)**

Граждандар һәм эштәр менән закондар түгел, ә үҙен иң аҡыллыһы тип иҫәпләгән буйһоноусылар һәм буйһондороусылар, судтар идара иткән ерҙә ҡайғы хөкөм һөрәсәк.

**(М. Кутузов).**

Бел, ҡолдарының йөрәктәре Уға ни тиклем яҡын булһа, Аллаһ Тәғәлә шул тиклем ҡолдарының йөрәктәренә яҡынлай. Йөрәгеңә нимә яҡын - шуға иғтибар ит.

**(Ал-Джунайд).**

Гонаһ ҡылырға теләмәү һәм белмәү араһында айырма ҙур.

**(Мишель Монтень).**

Йөҙ мең ҡоралға ҡарағанда, мин өс бөртөк гәзиттән ныҡыраҡ ҡурҡам.

**(Наполеон I).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Конфуций әйтеүенсә, Кеше йөрөгән аңлау Йыһан серҙәрен аңлауҙан да ауырыраҡ. Йыһандың эштәре, йәғни уның яҙҙы һәм көҙҙө, йәйҙе һәм ҡышты булдыра икәне һәр кемгә асыҡ, ә бына Кеше йөрәгендә ниндәй хис-тойғолар йәшеренеүен аңлауы бик үк аңһаттан түгел. Шуға ла Конфуций кеше өсөн туғыҙ һынау тәҡдим итә:**

**- тоғролоған тикшереү өсөн кешене алыҫ юлға ебәреү кәрәк;**

**- ихтирамлы булыуын тикшереү өсөн кешене алыҫ булмаған урынға ебәреү кәрәк;**

**- һәләтлеген тикшереү өсөн кешегә ауыр үтәлә торған эш ҡушырға кәрәк;**

**- отҡорлоғон тикшереү өсөн кешегә көтөлмәгән һорау биреү кәрәк;**

**- ышаныс буламы, юкмы икәнен тикшереү өсөн кеше алдына тиҙ генә ҡарар ҡабул итә торған мәсьәлә ҡуйырға кәрәк;**

**- намыҫлылығын тикшереү өсөн кешегә байлыҡ ышанып тапшырырға кәрәк;**

**- түҙемлеген тикшереү өсөн кешегә ниндәйҙер хәүеф тураһында хәбәр килтерергә кәрәк;**

**- ниндәй насар ғәҙәттәре барлығын белеү өсөн кешене иҫерткәнсе эсереү кәрәк;**

**- тотанаҡлылығын тикшереү өсөн кешене ҡатын-ҡыҙҙар араһында тотоу кәрәк.**

**Ошо туғыҙ һынауҙан һуң кеше тураһында бер фекер төйнәргә була ла инде..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ02-01885, 30 июль 2025 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Рәсүл БАЙГИЛДИН,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33.
(453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**График буйынса ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 23.10.2025 й. 17 сәғәт 00 мин.
**Ҡул ҡуйылды -** 23.10.2025 й. 14 сәғәт 30 мин.
**Баҫылып сыҡты -** 24.10.2025 й.

«Киске Өфө»нөң индексы — **ПР905**

Тиражы - 2707
Заказ - 1983

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.